ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 ноябрь (ҡырпағай) 2022

№46 (1036)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ирҙәр ҙә илай...**



3

**Ул намыҫ һымаҡ:**

йә бар, йә юҡ



8

**Йыһан киңлеген...**

асып күрһәтә



11

**Ағайҙарым**



12-13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Иғтибар! "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн дә ПР905 индекслы баҫмабыҙға яҙылып ҡуйырға саҡырабыҙ. Хаҡы - 798 һум 60 тин.*

*Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, матур йөкмәтке менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ.*

*Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

БАШ ҠАЛАМ

# ЮЛ ЙӨРӨҮ ҘӘ...

## уңайлы хәҙер

**Ҙур ҡалала уңайлыҡтар тыуҙырыу еңелдән түгел. Был бигерәк тә юлдарға ҡағыла, сөнки күп кеше йәшәгән ерҙә автомобилдәр һаны ла бик күп була. Был, үҙ сиратында, ҙур тығындарға килтерә. Миллионлы ҡала булараҡ, Өфө лә тығындар "тотҡонона" йыш эләгә. Ләкин республика һәм баш ҡала етәкселеге тарафынан өфөләргә һәм ҡала ҡунаҡтарына был йәһәттән уңайлыҡтар тыуҙырыу буйынса алып барылған эштәрҙе күрмәйенсә лә мөмкин түгел.**

Мәҫәлән, шул уҡ велосипедта йөрөргә яратыусылар өсөн махсус юлдар эшләйҙәр һәм артабан был эш тағы ла киңәйтелер, тип уйлайым. Шулай уҡ ҡала парктарында һәм скверҙарында ла был йәһәттән ҙур эштәр башҡарыла: тротуарҙар төҙөкләндерелә, эскәмйәләр ҡуйыла, сүп-сар һауыттары урынлаштырыла. Әле бына күптән түгел Зәки Вәлиди урамы менән Салауат Юлаев проспекты киҫешкән урындағы айырманың ҡулланыуға тапшырылыуы транспорттың үтеү кимәлен 27 процентҡа арттырған, тип белдерә ҡала хакимиәте. Был айырма аша тәүлегенә генә меңәрләп машина үтеүен иҫәпкә алғанда, уның ни тиклем мөһим икәнлеген һәр кем аңлай.



Ҡала ситендә йәшәгәс, был айырманан көн дә Өфөгә эшкә килергә һәм кисен ҡайтырға тура килә. Реконструкция барышында юл үткәргесен алты һыҙатҡа еткерҙеләр. Бигерәк тә һулға боролоу өсөн махсус айырма эшләүҙәре хуплауға лайыҡ. Шулай уҡ юл үткәргестең 9 метрға оҙайыуы ла үҙенең ыңғай яҡтарын әле үк күрһәтә. Тағы ла был юл айырмаһы эргәһендәге биләмәләрҙең тәртипкә килтерелеп, матур төҫ алыуы ла ҡалаға инеүселәр өсөн мөһим, сөнки эстетик матурлыҡ ҡала тураһындағы тәүге тәьҫораттарҙы ҡалдыра ла инде. Миңә бигерәк тә күкһел төҫтәге һәм тулҡын рәүешендә эшләнгән архитектура яҡтыртҡысы оҡшай. Әйткәндәй, баш ҡалаға төрлө яҡлап ингән ерҙәрҙә урынлашҡан күперҙәрҙең төрлө төҫтәге уттар менән балҡыуы шулай уҡ Өфөгә бер үҙенсәлек өҫтәй.

Баш ҡаланан көнсығыш тарафҡа сығыу юлының әүҙем эшләнеүен дә күрепбелеп торабыҙ. Бөтә пландар үтәлеп, был юл эшләнеп бөтһә, әллә күпме кешенең юл михнәттәре бермә-бер кәмейәсәк.

Әлеге мәлдә шулай уҡ Пугачев урамында эштәр ҡайнай. Әлбиттә, тура юлдың ваҡытлыса ябылыуы, шулай уҡ М5 трассаһынан килеп, Бородино урамына боролған ерҙә бәләкәй генә урын ҡалдырылыуы водителдәрҙең үҙәгенә үтә. Ләкин әҙ генә сабырлыҡ булғанда, бөтә был ҡыйынлыҡтар артта ҡаласаҡ һәм барыһы өсөн дә уңайлы, киң, яңы юл барлыҡҡа киләсәге тураһында онотмайыҡ.

**Зәкир АҪЫЛБАЕВ.**

АФАРИН!

# АБҘАҠ ҠЫҘЫ




**Ошо көндәрҙә Ҡаҙан ҡалаһында үткән билбау көрәше буйынса донъя беренселегендә Белорет районы Абҙаҡ ауылы ҡыҙы Эвелина Йомағолова еңеү яулап ҡайтты. Ул Абҙаҡ урта мәктәбендә унынсы синыфта белем ала, Салауат Дауытов етәкселегендә спорт түңәрәгендә шөғөлләнә һәм Башҡортостан йыйылма командаһы составына ингән.**

**(Дауамы 2-се биттә).**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ЗАМАН ҮҘГӘРӘ, ТИП...

## үҙгәрмәне

**"Киске Өфө"бөҙгә 20 йыл да булып киткән икән! Тәү ҡарашҡа әҙ тойолған кеүек, ләкин ошо ике тиҫтә йыл эсендә әллә күпме хәл-ваҡиғалар булды, яратып уҡыған гәзитебеҙ ҙә үҫте, нығынды. Өфөләрҙең генә түгел, ә тотош республиканың һәм хатта ил кимәлендә ихтирам яулаған баҫмаға әйләнде. Интернетты әрләһәләр ҙә, уның республиканан ситтә йәшәүселәргә ошондай милли баҫмаларыбыҙҙы уҡырға мөмкинлек биреүен билдәләп үтергә кәрәктер.**



*Учалы ағинәйҙәре.*

*(Дауамы 2-се биттә).*

12+

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ЗАМАН ҮҘГӘРӘ, ТИП... үҙгәрмәне

(Башы 1-се биттә).

"Булыр бала - биләүҙән", ти халыҡ аҡылы. Ошо мәҡәлде "Киске Өфө"гә ҡарата ла ҡулланырға була, сөнки ул тәүге һандарынан уҡ үҙенең үҙенсәлеге, баҫылған материалдарының әһәмиәтлеге менән уҡыусыларының күңелен яуланы һәм ошо йылдар арауығында үҙ бәҫен бер кәлимә лә төшөрмәне, заман үҙгәрә, тип, үҙе тәүҙән үк алған юлынан тайпылманы - милләтенең иң яҡын дуҫы булып ҡалыуға өлгәште. Гәзит 20 йыл элек халыҡ өсөн ни тиклем кәрәк булған, бөгөнгө көндә лә уҡыусылары тарафынан көтөп алынған баҫма һәм артабан да ошо юғарылығынан төшмәҫенә иманым камил.

Гәзит үҙ биттәрендә үҙенең журналистарына ғына урын биреп ҡалмай, ә ситтән дә мәртәбәле авторҙарҙы йәлеп итә белеүе менән дә күп баҫмаларҙан айырылып тора. Мин, мәҫәлән, әллә күпме ваҡыт инде Урал Мостафиндың мәҡәләләрен яратып уҡып барам, шулай уҡ Фәүзиә Яхинаның да яҙғандары күңелгә ятып ҡына тора. Хәлил Һөйөндөковтың тормош тәжрибәһенә таянып, юморға ла бай телле мәҡәләләре минең генә түгел, барлыҡ гәзит уҡыусыларҙың да күңеленә яҡындыр, тип уйлайым.

Юмор, тигәндәй, гәзиттә элек "Алдар менән Ерәнсә ҡоро" тигән шәп рубрика була торғайны, һуңғы ваҡытта ул һирәкһаяҡ ҡына күренгеләй. Ундағы юмористик донъяуи хәлдәрҙе уҡып бөтә өйөбөҙ менән деү килешеп көлөп ала торғайныҡ. Үҙем дә төрлө ҡыҙыҡ хәлдәр тураһында яҙырға уҡталып-уҡталып ҡуям да, йә баҙнат итмәйем, йә яҙғаным гәзиттәге һымаҡ килешле генә килеп сыҡмай. Тормошҡа юмор аша ҡарау күп хәлдәрҙән еңелерәк сығырға ярҙам итә бит ул.

"Киске Өфө"нөң алмаштырғыһыҙ һәм бик тә кәрәкле рубрикаһы - "Уңыш ҡаҙан". Ошо 20 йыл эсендә мин әлеге рубрика аша күпме аҡыл уҡыным, тормош юлында ниндәй ауырлыҡтар килеп тыуһа ла, уларҙы еңеп сығып була икәнен аңланым, ауыр саҡта ла, күңелдәрҙә ҡыуаныслы хистәр урғылғанда ла сама белеү кәрәклеге тураһында яҡшы төшөндөм. Һәм минең кеүектәр байтаҡ икәнен күреп-ишетеп торам.

Баҫмалағы тағы ла бер әһәмиәтле рубрика тураһында әйтеп үткем килә. Ул - "Һорау - яуап" рубрикаһы. Әлбиттә, интернетта хәҙер һәр һорауға яуап табып була кеүек, ләкин гәзиттә яуап ҡыҫҡа, аңлайышлы һәм шул уҡ ваҡытта йөкмәткеле итеп бирелә. Шулай уҡ төрлө өлкәне яҡтыртыуы менән яҡшы, ниндәй һорауға ла яуап табырға мөмкин.

"Киске Өфө"нө республикабыҙ мәҙәниәтенең йөҙө тиһәм дә хата булмаҫ, моғайын, сөнки ошо 20 йыл эсендә әллә күпме сәнғәт әһеле менән әңгәмәләр сыҡты, уларҙың хәтирәләренә лә урын бирелде, йырсыларға концерттары алдынан мәҡәләләр ярҙамында тамашасы йыйырға булышлыҡ итте. Ә һәр һан һайын театр һәм филармонияларҙың булаcаҡ тамашалары тураһындағы мәғлүмәт тураһында әйтеп тораһы ла түгел, уны уҡып, һәр кем күңеленә ятырлыҡ сара хаҡында белеп тора.

Һаулыҡ булғанда ғына донъя йәмле. Ошо хәҡиҡәтте оноторға юл бирмәүе менән гәзит үҙенең баһаһын тағы ла нығыраҡ күтәрә. Табиптар, халыҡ дауалаусылары тураһындағы мәҡәләләр, уларҙың кәңәштәре бихисап кешегә ярҙам итеүенә шигем юҡ. Белгестәрҙең баҫма бите аша гәзит уҡыусыларҙы үҙ һаулығын хәстәрләргә саҡырыуы һәр ваҡыт урынлы булып сыға.

Гәзит тураһындағы матур фекерҙәрем бик күп, алдағы көндәрҙә әле әйтелмәй ҡалғандары менән дә уртаҡлашырмын тип торам. Ә үҙенең 20 йыллыҡ юбилейын билдәләүсе баҫмаға уңышлы эшмәкәрлек, тоғро гәзит уҡыусылары һәм тағы ла оҙон-оҙаҡ йылдар беҙҙе ҡыуандырып йәшәүен теләйем.

**Илүзә ЯҠШЫБАЕВА.**

БЫНАҒАЙЫШ!

# "БЫҒАУЛЫ" ҒӘҘӘТТӘРҘӘН... ҡасан ҡотолорбоҙ?



**Һуңғы йылдарҙа, һүҙ ҙә юҡ, баш ҡалабыҙ Өфөлә бында йәшәгәндәр һәм ҡунаҡҡа килгәндәр өсөн уңайлыҡтар булдырыу, ял итеү һәм спорт менән шөғөлләнеү өсөн шарттар тыуҙырыуға ҙур иғтибар бирелә. Бигерәк тә ҡала парктарын заманға ярашлы үҙгәртеп ҡороу, буш ятҡан урындарҙа скверҙар төҙөү, "Башҡортостан ихаталары" проектын дауам итеү, спорт майҙансыҡтары эшләп йыһазландырыу, Башҡортостаныбыҙҙың билдәле шәхестәренә һәйкәлдәр асыу һәм башҡа төҙөкләндереү саралары ҡала йөҙөн нурландырып, йәнләндереп ебәрҙе.**

Сипайловола үҙем йәшәгән йорт тирәләй генә булған үҙгәрештәр ҙә әле әйткәнгә раҫ. Мәҫәлән, оло юл ситендә нисәмә йылдар инде эс бошорғос, билдән ҡый үләне баҫҡан бушлыҡты хәҙер танырлыҡ түгел: быйыл бында балалы ғаиләләр һәм өлкәндәр өсөн заманса йыһазландырылған сквер асылды. Унда айырыуса бәләкәстәр шөғөлләнерлек спорт ҡоролмалары: самокаттарҙа елдерергә һикәлтәле хәүефһеҙ маршрут, бәүелсәктәр, кескәй альпинистар өсөн ҡош рәүешендәге скалодром, ә өлкәндәргә ултырып ял итергә эскәмйәләр, мини-китапханалар бар. Был скверҙы эшләгәндә проект авторҙары бер ыңғайҙан эргәләге 130-сы урта мәктәп биләмәһенә лә "һуғылып", уҡыусы балаларға бик шәп спорт майҙаны, футбол-хоккей яланы, көйәрмәндәр өсөн төҫлө ултырғыстарҙан трибуна ла бүләк итеп китте.

Тик бына ошо спорт майҙанына сыҡҡан һайын күңелдә әрнеү, үкенеү тойғоһо арта ғына бара: мәктәп уҡыусылары бындай юғары мәҙәниле урындарҙа үҙҙәрен тота белмәгәнлектәрен күрһәтеп кенә тора. Сүп-сарлауҙар хаҡында яҙып арыныҡ инде. Был спорт майҙанына, хәүефһеҙлек маҡсаттарынан сығып, йомшаҡ резина "келәм" түшәлгән. Махсус технология буйынса резина йәки каучук валсыҡтарынан эшләнгән

АФАРИН!

# АБҘАҠ ҠЫҘЫ




(Башы 1-се биттә).

Биш балалы ғаиләлә тәрбиәләнгән ҡыҙ спорт ярата, билбау көрәшенән тыш, волейболға ла бик теләп йөрөй. Ул быға тиклем республика һәм Рәсәй кимәлендәге ярыштарҙа ҡатнашҡан, былтыр донъя беренселегендә бишенсе урын яулаған.

- Билбау көрәше менән 10-11 йәштән, бишенсе синыфтан алып шөғөлләнәм. Әле 15-17 йәшлектәр араһында донъя беренселегендә ҡатнаштым, - ти Эвелина. - Билбау көрәше менән ҡыҙыҡһынып китеүем ҡайҙан килгәнен әйтә алмайым, мәктәптәге ошо түңәрәккә үҙем теләп йөрөй башланым былай. Тренерыбыҙ Салауат Ғәзиз улы Дауытов ҡулы аҫтында шөғөлләнгән балалар төрлө кимәлдәге ярыштарҙа ҡатнашып, даими еңеүҙәр яулап тора. Мәҫәлән, Эльвина Ғәҙелшина 2019 йылда Үзбәкстанда уҙғарылған донъя беренселегендә беренсе урын алғайны, Рәсәй кимәлендәге ярыштарҙа ла һынатмай. Мин үҙем Ҡарасай-Черкес республикаһында үткәрелгән Рәсәй беренселегендә беренсе урын, былтыр Татарстанда донъя беренселегендә бишенсе урын яулағайным. Быйыл тырышыбыраҡ, ныҡлы әҙерләнеп барҙым. Тәүҙә Үзбәкстан, шунан үҙебеҙҙең Рәсәй спортсыһын еңдем. Был ярыштарҙа үҙемә күп һабаҡ алдым, иң мөһиме, күберәк күнекмәләр яһарға кәрәклеген аңланым. Хәҙер мин көн һайын кәмендә ике сәғәтемде төрлө күнекмәләр эшләүгә бүләм. Ни тиһәң дә, ҡыҙҙарға билбау көрәше еңел бирелмәй бит. Ә шулай ҙа беҙҙә билбау көрәше менән шөғөлләнеүселәр араһында ҡыҙҙар күберәк, малайҙар, нишләптер, киләләр ҙә китәләр. Был спорт төрөнә үҙҙәрен бағышлап, оҙағыраҡҡа тотҡарланғандары һирәк. Минән тыш, һеңлем һәм ҡустым билбау көрәше менән мауыға, тик һеңлем һуңғы ваҡытта үҙен күберәк волейбол уйынына бағышлай башланы.

Эвелина спортта ғына түгел, уҡыуҙа ла һынатмай: тик бишле-дүртлегә генә өлгәшә икән. Киләсәктә юридик белем алырға хыялланыуын, ләкин әле бер аҙ икеләнеп тороуын да йәшермәне. Әммә ниндәй генә йүнәлеште һайламаһын, атаәсәһе һәр ваҡыт күтәрмәләп торасағына һәм үҙенең дә маҡсатынан тайпылмаясағына ышана ул.

**Камила ҒӘЛИЕВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓14 ноябрҙә Рәсәй Президенты Владимир Путин белгестәрҙе һәм эшмәкәрҙәрҙе бүләкләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйған. Улар иҫәбендә яҡташтарыбыҙ ҙа бар. Башҡортостандан сенатор, Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесе Лилиә Ғүмәрова һәм шәхси эшҡыуар, йәмәғәт эшмәкәре Рөстәм Нәбиев Дуҫлыҡ ордены менән бүләкләнде.

✓Башҡортостанда "Иң матур яңы йыл ҡаласығы - 2023" республика конкурсы башлана. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованова хәбәр итте. Ҡатнашыу өсөн хакимиәттәргә муниципаль йәки йорт яны биләмәһендә иң яҡшы объектты һайлап, Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығына ғариза ебәрергә кәрәк, тине ул.

✓Башҡортостандың ике шәкәр заводында яңы уңыш сөгөлдөрөн эшкәртеү дауам итә. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, 14 ноябргә "Раевшәкәр" һәм Шишмә шәкәр заводы 627 мең тонна тамыраҙыҡ эшкәрткән. Бөгөнгә республикала 96,7 мең тонна аҡ шәкәр етештерелгән, шул иҫәптән "Раевшәкәр" йәмғиәтендә - 50,3 мең тонна, Шишмә заводында - 46,2 мең тонна. 14 ноябргә Башҡортостанда татлы тамырҙың тулайым йыйымы 1,361 миллион тонна тәшкил иткән, уңыш - гектарынан 309,1 центнер.

✓18 ноябрҙә Аҫҡын районы үҙәгенең мәҙәниәт йортонда "Кесе ватаным - Атайсал" муниципаль форумдары циклына старт бирелде. Беренсе муниципаль форумда Аҫҡын районы халҡынан тыш, Балтас, Балаҡатай, Борай, Дыуан, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Мәсетле, Мишкә, Салауат һәм Тәтешле районлары вәкилдәре ҡатнашты. Был форум - йәштәрҙең ошо райондарҙа тыуып үҫкән яҡташтары, "Атайсал" проектында ҡатнашыусылар менән осрашыу майҙансығы ул.

✓Өлөшләтә мобилизация барышында саҡырылған граждандарға декабрь өсөн аҡса ғинуарҙа түгел, ә 25 декабргә тиклем, йәғни ваҡытынан алда түләнә. Оборона министры урынбаҫары Татьяна Шевцова Дәүләт Думаһы депутаты Максим Ивановтың һорауына шулай тип яуап бирҙе.

был "келәм"дәр атлағанда ла, йүгергәндә лә йомшаҡ, бала йығылып китһә лә ҡурҡыныс түгел. Етмәһә, ул матур төҫтәргә буялған, шул уҡ ваҡытта "келәм"дәр ҡояш нурҙарына ла, ҡышҡы һыуыҡҡа ла бирешмәй. Тик баяғы тәртип белмәгән уҡыусыларҙың шапшаҡлығына ғына ҡаршы тора алмаҫ, ахыры, сөнки быйыл ғына файҙаланыуға тапшырылған был һоҡланғыс объекттың йомшаҡ келәмдәре төкөрөп, тапап кителгән һағыҙ таптары менән ҡаплана башланы. Ни тиклем ҡырағайлыҡ! Һәм был ошо мәктәп уҡыусыларының йөҙө, тип әйтер инем мин.

Ә бит яңы төҙөлгәнде емереү, аҡтарыу, яман һүҙҙәр яҙып, сыймаҡлап китеү, ҡыҫҡаһы, әлегесә, төкөрөп ҡарау күбеһенсә ана шул бөгөнгө мәктәп уҡыусыларының эше. Ә баш ҡалала күп ундай мәктәптәр. Дөрөҫөрәге, вандалдар һәр мәктәптә лә бик күптәр. Шуныһы ғәжәп, был уҡыу йорттары педагогтары беләме ошо хаҡта? Ниндәйҙер тәрбиәүи эш алып барыламы икән? Бөгөн бөтөн мәктәптәр ҙә илһөйәрлек тәрбиәһе флагын күтәрҙе. Ә нимәнән башлана һуң ул илһөйәрлек? Ниндәйҙер юғары идеяларҙан алда уның, был тәбиғи, гендарҙа булырға тейешле тойғонон, бала ултырған партанан, класс таҡтаһынан, мәктәп бинаһынан, спорт майҙанынан башланыуын беләме икән уҡытыусылары? Мәктәп биләмәһенән сыҡҡас, был тойғо, тәбиғи, тыуған ҡалабыҙ урамдарына, уның йәмәғәт урындарына, һәйкәлдәренә күсергә тейеш түгелме ни?

Әйткәндәй, баш ҡалабыҙҙың Совет майҙанындағы әле яңы ғына Шайморатов генералға ҡуйолған һәйкәл комплексы янында күргәне хаҡында былай тип яҙып сыҡҡайны билдәле журналист Руслан Шәрәфетдинов: "Ошо майзандан көн һайын тиерлек үтеп йөрөйөм, Шайморатовҡа һәйкәл янынан халыҡ өҙөлгәне юҡ. Бына 10 йәштәр тирәһендәге бер малай ата-әсәһенең күҙ алдында һәйкәл нигеҙендәге металл барельефҡа үрмәләп менеп китте лә уҡ-һаҙаҡлы фигураларға йәбешеп, бәүелә башланы. Ата-әсә, бер ни булмағандай, был хәлдә тыныс ҡына күҙәтеп тора. Беҙҙең ғорурлыҡ символы булған һәйкәлгә бындай хайуандарса мөнәсәбәттән һуң нимә торол ҡалыр икән?"- тип әсенә. "Ҡалала тәртип булдырыу өсөн, Сингапур йә Ғәрәп Әмирлегендәге кеүек, штраф системаһы булдырыу кәрәк!" - тип комментарий яҙа был хәбәргә бер ҡатын. "Бөтә бындай хайуанлыҡ осраҡтары уларға ҡарата бер ниндәй ҙә яза сараһы булмауҙан килә,- ти икенсе берәү. - Конгресс-холл рәшәткәләрен онтанылар, Совет урамындағы эскәмйәләргә ҡырҙылар - берәй сара күрелдеме һуң? Ҡалала, әйтерһең дә, полиция ла, патруль хеҙмәте лә ҡалмаған..."

Дөрөҫөн әйткәндә, йәмәғәтселектең дә бит хәҙер бындай хәлдәргә бик иҫе китеп бармай - өйрәнелгән, ахырыһы... Ә ниндәй ҡурҡыныс ғәҙәткә әйләнгән был хайуанлыҡҡа өйрәнеү, күнеү, килешеү. Хәҙер бит, әйткәндәй, һәр кемдә смартфон, айфон - видеоға төшөрөп, әлеге малайҙы, ата-әсәһен дә, әлбиттә, телевизорҙан күрһәтергә, интернетҡа һалырға һәм был тәрбиә сараһын законлаштырырға ла мөмкиндер бит, моғайын. Ләкин был мәсьәлә полицияны ла, педагогтарҙы ла, ата-әсәләрҙе лә, закон сығарыусыларҙы ла борсомай.

...Октябрь урталарында Өфөнөң Октябрь районындағы "Өфө муйынсаһы" урман биләмәһендә (Парк һәм Шәфиев урамдары киҫелеше) фәҡәт ағастан эшләнгән 15 кг ауырлыҡтағы штанга һәм 5-әр килограмлыҡ гантелдәр менән йыһазландырылған спорт майҙансығы тантаналы асылғайны. Башҡортостанда берҙән-бер һәм берәгәйле. Ғәҙәттәгесә, бер нисә көндән ағас снарядтар ... юҡҡа сыҡты, урлағандар! Ә нимә көтөргә ине һуң ҡалала нығынған әлеге "хайуанлыҡ" ғәҙәтенән? Спорт йыһаздары яңынан эшләп ҡуйыла, ләкин инде улар, әйтеүҙәренсә, тимер сынйыр менән бығаулап ҡуйылған. Урланғандары ла табылған, имеш, тип яҙҙылар, ләкин эш унда ла түгел. Ғәрлек бит, уйлап ҡараһаң... Ҡасан ҡотолорбоҙ икән намыҫ, выждан, кешелеклелек сифаттарын быуып торған әлегеләй тимер бығауҙарҙан?..

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ТАЯНЫУ НӨКТӘҺЕҘ ИТМӘГЕҘ!



**Башҡортостан юлдаш каналында элегерәк "Арыҫландар клубы" тигән тапшырыу була һәм журналист Уйылдан Ғәлин алып барған ҡорҙа ир-егеттәр төрлө темаға бәхәс ҡора торғайны.**

...Бына ике билдәле генә шәхес ғаиләлә ҡатын һәм ир мөнәсәбәттәре тураһында фекер алыша. Тик һөйләшеү килеп сыҡманы. Егеттәр алып барыусы ҡуйған һорауҙарға яуап бирә, үҙ ғаиләләренән бер ниндәй ҙә миҫал килтерә алмай ҡаушап ҡалдылар. Уларҙы белгән тамашасы шул мәлдә, моғайын, бының сәбәбен аңлап, көләмһерәп ҡуйғандыр. Мин дә шулай иттем: улар үҙҙәренең атай-әсәй ғаиләһендә бер төрлө тәрбиә, мөнәсәбәттәр күреп үҫкән, тәрбиәләнгән, әммә үҙҙәре ҡорған ояла бындай өлгө лә, традициялар ҙа юҡ. Егеттәрҙең икеһе лә башҡа милләт ҡыҙҙарына өйләнгән, тимәк, башҡорт ғаиләһе ҡиммәттәре лә, йолалары ла, мөнәсәбәттәре лә икенсе юҫыҡта...

Ә шулай ҙа егеттәрҙең береһе тиҙ генә үҙен ҡулға алды һәм ниндәй генә һорау ҡуйылмаһын, атаһы менән әсәһенең мөнәсәбәте тураһында ғорурлыҡ менән һөйләй башланы. "Бер ваҡыт атайым нимәләр асыуланды ла, өс минут самаһы бер туҡтамай әсәйемә әр һүҙҙәрен теҙҙе. Әсәйем тауыш-өнһөҙ ултырҙы ла, өс минуттан һуң: "Етте!" - тип өҙә генә әйткәйне, атайым шып туҡтаны ла ҡуйҙы..." Тапшырыуҙы алып барыусы ла уны йөпләп: "Бына мин дә олатай-өләсәйҙәрҙең, атай-әсәйҙәрҙең ҡыҫҡырып талашҡанын хәтерләмәйем..."- тип һүҙ ҡыҫтырғайны, әңгәмәсе: "Нимә талашмаһын, талаша инеләр. Бына бер саҡ командировкала бер әбей менән бабайҙың өйөнә фатирға төштөк. "Телевизорығыҙ эшләйме?" - тип һорайым бабайҙан. "Юҡ, эшләмәй", - ти бабай. "Юҡ, эшләй",- ти әбейе. Бабайы тағы: "Юҡ, эшләмәй", - ти. Әбейе: "Юҡ, эшләй", - ти. Шулай бер нисә минут һүҙ көрәштерҙе былар..." Был миҫал менән егет тағы ла башҡорт ғаиләһендәге тартҡылаштың бына ошондай килмәлдә генә булғанына ишаралап ҡуйҙы.

Ә әңгәмәләшеүселәрҙең икенсеһе бөтөнләй буталды. Ул үҙе лә ҡатнаш никахлы ғаиләлә үҫкән. Тимәк, ул, исмаһам, үҙ атай-әсәйенең мөнәсәбәттәре тураһында ла һөйләй алмай булып сыҡты. Үҙенең фекерһеҙ, традицияларһыҙ, таяныу нөктәһеҙ икәнен раҫланы...

...Таяныу нөктәһенән яҙҙырмаһаҡ ине балаларҙы, тип әйткем килә милләттәштәргә. Таяныу нөктәһе - ул туған тел, туған рух, туған мөхит. Шуны онотмайыҡ!

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**

БАТЫРЛЫҠ ӨЛГӨҺӨ



# ИРҘӘР ҘӘ ИЛАЙ...

Ниһайәт, көс йыйҙыҡ, оборонанан һөжүмгә күсергә тырышабыҙ. Ҡаланы ҡамауға алдыҡ тиерлек. Беҙҙең диверсион разведка төркөмө дошман тылына үтеп кереп, уның оборонаһының "тишек" урындарын ҡапшарға кереште. Бер төркөм икенсеһен алмаштыра - ял итеү, ашау, һуғыш кәрәк-яраҡтары туплау мөмкинлеге бирә.

Беҙҙең бер төркөмдә дошман ҡыҫымға ала. Алыш башлана: биш бөртөк яугирыбыҙ 30-40 дошманға ҡаршы алыша. Төркөмдә үҙебеҙҙең яҡҡа сығара алмайбыҙ - артналёт баш күтәрергә лә ирек бирмәй. Беҙҙекеләр ҡала эсендә хәрәкәт итә башлай, урамдар буйлап йөрөй. Дошман сылбыры үҙ тылы ягында көсһеҙ генә була, шуға күрә беҙҙең баяғы төркөм шул тирәлә йырып сыға алыр, тигән ышаныс тыуа.

Кискә табан беҙҙән өҙөлөп ҡалған төркөм менән бәйләнеш юҡҡа сыға - күрәһең, аккумуляторҙары "ултыра". Шартлауҙар аша үтеп кереп, ҡала эсендә яйлап ҡына төркөмдә эҙләй башланыҡ. Шул саҡ украиндарҙың ҡысҡырған тауышы ишетелде: улар беҙҙекеләрҙән әсирғә бирелеүен талап итә ине. Хәҙер дошмандың ҡайҙа икәнен белдек, төркөм дә ошо тирәлә, тик ҡайһы йортта икәне генә билдәле түгел. Украиндар уларға уйларға 5 минут ваҡыт бирелеүе тураһында хәбәр итә. Шул саҡ бер көй ишетелә. Аҙаҡ белеүебеҙсә, ҡурайҙа уйнайҙар икән. Был төркөм тик башҡорттарҙан ғына торған булып сыҡты. Барыһы ла - отставкалағы офицерҙар, Грозный аша яуға үҙ теләктәре менән килгәндәр. Улар ултырған подвалда сығыр урын бер генә - улар дошман ҡапҡанында. Башҡорттар әсирғә төшмәҫкә ҡарар итеп, һуңғы алыш алдынан ҡурайҙа уйнап, үҙ-үҙҙәрен шартлатырға әҙерләнгән булған...

Беҙ дошманға ташландыҡ. Атыш барған ваҡытта ла көй тынманы, күрәһең, башҡорттар ҡурай моңо аҫтында йән бирергә әҙерләнгән. Улар атыш тауыштарының украиндарҙыҡы ғына түгел, ә беҙҙеке лә икәнен, беҙҙең башҡорт туғандарыбыҙҙы ҡотҡарырға килгәнебеҙҙе белмәй ине бит. Бына был, исмаһам, рух ныҡлығы! Башҡалар дошманға бирелер йәки илап ултырыр ине, юҡ, былар гүмерҙәренең һуңғы мәлен үҙҙәренең ҡурай моңо менән ҡаршы ала ине...

Уларҙы подвалдан сығарҙыҡ. Бишәүҙең береһе генә йөрөй ала, уныһының да ике ҡулы ла сәрпәкләнгән, ҡалғандары шыуыша ғына ала, аяҡтары пуля, снаряд ярсыҡтары менән теткеләнеп бөткән. Был ир-азаматтар - 40 йәштән уҙған офицерҙар, бына тигән ысын офицерҙар! Их, шундайҙар күберәк булһа икән!

Теге ҡурай башҡорттарҙың береһенеке икән. Ул ике өлөштән торған металдан йыйып яһалғайны. Беҙҙе күргәс кенә башҡорттарҙың күҙҙәренә йәштәр эркелде, күңелдәре йомшарҙы. Беҙ ҙә илаштыҡ. Ирҙәр ҙә илай шул...

**Глеб СТАЛЬСКИЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Ил Президенты Владимир Путин хәрби хеҙмәт тәртибе тураһындағы положениеға үҙгәрештәр индергән Указға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, сит ил граждандары Рәсәй Ҡораллы Көстәрендә сағырылыш буйынса хеҙмәт итә ала.

✔Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Александр Булушев 14 ноябрҙә Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә автоһәүәҫкәрҙәрҙе тиҙ арала автомобилдәренең тәгәрмәстәрен алмаштырырға саҡырҙы. Юл-транспорт ваҡиғаларын анализлау һауа торошонон боҙолоуы ауыр эҙемтәләргә килтергән юл фажиғәләренең күп тапҡырға артыуына килтерҙе, тине ведомство етәксеһе.

✔Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров оператив кәңәшмәлә Өфөлә республика Яңы йыл шыршыһын үткәреү көнөн хәбәр итте. Ул 2022 йылда 22 декабрҙә буласаҡ. Республика шыршыһын "Башҡортостан" дәүләт концерт залында ойоштороу күҙаллана.

✔Салауат районының хәрби хәрәкәттәр ветерандары берлеге активистары үҙ аҡсаһына махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн УАЗ автомобиле һатып алған. Транспортты легендар башҡорт комдивының исемен йөрөткән 1-се миномет батареяһы яугирҙарына илтеп тапшырғандар. Сәфәрҙә афған һуғышы ветерандары Рөстәм Хәснуллин һәм Рәлиф Хәснөтдинов ҡатнашты, тип хәбәр итә социаль селтәрҙәрҙәге әүҙемселәр.

✔Башҡортостанда пенсионерҙар арта - 2022 йылдың сентябренә 1 миллион 154 мең 521 кешегә еткән. Уларҙың 182 мең 653-ө эшләп йөрөй. Был хаҡта Пенсия фондының төбәк бүлексәһе мәғлүмәттәренә һылтанма менән республика статистары хәбәр итте. Сағыштырыу өсөн: ғинуарҙа 1 миллион 149 мең 347 пенсионер иҫәпләнгән, уларҙың 186 481-е эшләгән. Сентябргә тәғәйенләнгән пенсияның үртаса күләме лә арткан һәм Башҡортостанда 17 979 һум тәшкил иткән.

✔Башҡортостанда балалар лагерҙарына юлламаларҙың хаҡы арта. Республика хөкүмәте ҡарарына ярашлы, киләһе йылдан ҡала ситендәге стационар лагерҙа түләгенә бер баланың ял итеү хаҡы - 942 һумдан 1 045 һумғаса, палатка тибындағы балалар лагерында 267,5 һумға тиклем арта. Шулай итеп, йәй көнө 21 көнлөк юлламаның дөйөм хаҡы 21 945 һум була. 2023 йылда мәктәп яңы лагерҙарында түләгенә бер балаға аҙыҡ-түлек йыйылмаһы хаҡы ике тапҡыр тукланғанда - 140 һум һәм өс тапҡыр тукланғанда иһә 207 һум тип билдәләнә.

ҠЫҪҠАСА

# ДҮРТЕНСЕ...

**Башҡортостан 2021 йыл өсөн Төбәктәрҙә фән-ни-техник үҫтереүҙең беренсе милли рейтингында дүртенсе урын алды. Рейтинг Рәсәй Президенты Владимир Путиндың ҡушыуы буйынса булдырылған.** Ошо уңайҙан Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров шулай тип билдәләне: "Был бик юғары ҡаҙаныш. Республика фәннитехнологик мөхиттә сифатлы үҙгәреш тәр барған һәм фән үҫешенең өҫтөнлөклө йүнәлештәре уңышлы тормошҡа ашырылған алдынғы биш төбәк иҫәбендә. Әлбиттә, Евразия фәнни-белем биреү үҙәге уңыштарыбыҙҙың төп этәргес көсө. Башҡортостан вуздары донъяның фән картаһында үҙ урынын алды, беҙ эре федераль проекттарҙы тормошҡа ашырабыҙ - вуз-ара кампус төҙөй башлайбыҙ, республикала ҙур Өфө фән һәм технологиялар университеты барлыҡҡа килде. Ике йыл инде Фәнни-белем биреү үҙәгенең йәштәр лабораториялары эшләй, эре сәнәғәт предприятиелары менән партнерлыҡта Алдынғы инженер мәктәбе асыҡ. Беҙҙең фәнгә ярҙам иткән республика сараларын рейтинг эксперттары ла билдәләп китте. Статистика менән бәхәсләшеп булмай - төбәктә ғилми хеҙмәткәрҙәр һаны, предприятиеларҙың фәнни асыштарына бүленгән аҡса күләме артты, сәнәғәткә фәндән күберәк технологиялар күсерә башланыҡ".

✔**Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Ағиҙел һәм Сибай ҡалаларын моноҡалалар исемлегенән индереү буйынса эш хаҡында һөйләне.** Рәсәйҙең Иҡтисади үҫеш министрлығы яғынан принципиаль ҡарарҙарҙың булмауы хәлдә ҡатмарлаштыра, тип билдәләне ул. Республикалағы йыйлдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһе күрһәткән уңышлы һөҙөмтәләр был ҡалаларҙағы хәлдә яҡшы яҡҡа үҙгәртә алыр ине. Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров ошо эште дауам итергә ҡушты. Атап әйткәндә, Башҡортостандың биш моноҡалаһында (Бәләбәй, Күмертау, Белорет, Благовещен, Нефтекама) эшләгән йыйлдам социаль-иҡтисади үҫеш биләмәһендә халыҡтың миграция үҫеше һәм эшһеҙлектең кәмеүе теркәлә.

✔**Башҡортостандың мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин Рәсәй мәктәптәрендә башланғыс хәрби әҙерлек курсын индереүгә ҡарата фекерен белдерҙе.** Мәғариф министры һүҙҙәренсә, йәмәғәтселек мәктәптәрҙә башланғыс хәрби әҙерлек дәрестәрен үткәреү кәрәклеген хуплай, быға ихтыяж бар, заман быны үҙе талап итә. "Мәсьәлә хәл ителде, курстар киләһе уҡыу йылынан индереләсәк. Республикабыҙҙа ла программаға индерһендәр өсөн ғариза бирҙек. Әлбиттә, быны өсөн күп аҡса талап ителә. Сөнки тирҙарҙы, ҡоралдарҙы кире ҡайтарырға, мәктәптәрҙең матди базаһын яңыртырға кәрәк", - тине Айбулат Хажин уҡытыусылар һәм ата-әсәләр менән осрашыуҙа. Башланғыс хәрби әҙерлек курсы 10-11 класс уҡыусылары өсөн индереләсәк. Ләкин хәрби әҙерлек, СССР ваҡытындағыс кеүек, айырым фән итеп уҡытылмай, ә "Тормош хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре"ндә өйрәнелә башлай. Яңы программаға ярашлы ике курс асыу күҙаллана, уларҙың береһе - медицинаға, икенсеһе хәрби әҙерлеккә арнала.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТӘҮГЕ БАШҠОРТ НЕФТЕНӘ...



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ишембайҙағы тантаналы йыйылышта "Башнефть" компанияһы ветерандарын һәм хеҙмәткәрҙәрен тәүге башҡорт нефтен сығарыуҙың 90 йыллығы менән ҡотланы.**

"Ошо әһәмиәтле датаны Ишембайҙа, 1932 йылда 702-се скважинанан беҙҙең нефть тармағының данлы тарихы, илебеҙ яғыулыҡ-энергетика комплексы үҫешенең "башҡорт" этабы башланған ҡалала билдәләйбеҙ. Беҙҙең нефтселәр тармаҡта башлап юл ярыусы булды. Тыуған республиканың һәм илдең бөгөнгө именлеге өсөн нәҡ һеҙгә, нефть-газ тармағы хеҙмәткәрҙәре быуынына, бурыслыбыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Бөгөн "Башнефть" - илдә алдынғы нефть һәм нефть эшкәртеү тармағы компанияларының береһе, республиканың ышаныслы партнеры һәм эре һалым түләүсеһе булып ҡала. Уҙған йылда компания төбәк ҡаҙнаһына 15 миллиард һум һалым аҡсаһы күсергән (2020 йылғы кимәлдән 73 процентҡа күберәк). Һуңғы биш йылда ғына Башҡортостан нефтселәре юлдар, мәктәптәр, балалар баҡсалары, дауаханалар, мәҙәниәт учреждениелары төҙөүгә, спортҡа ярҙам итеүгә 18 миллиард һумдан ашыу аҡса йүнәлткән".

Башҡортостан нефтенә 90 йыл тулыуға арналған тантаналы йыйылыштан һуң Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Ишембайҙағы "Аркада" сәнәғәт берекмәһенең яңы бирсәткәләр цехын асыуҙа ҡатнашты. Был - "Алға" махсус иҡтисади зонаһының тәүге резиденттарының береһе. 2021 йылдың декабрендә компания бында эш кейемдәренең киң ассортиментын етештерә башланы. Инвестор яңы цех төҙөлөшөнә 200 миллион һумға яҡын аҡса һалған. Унда 100 белгес эшләйәсәк. "Аркада" сәнәғәт берекмәһен ойоштороусы Михаил Цукерман белдереүенсә, элек бындай махсус кейемдәр сит илдәрҙән һатып алынған булған. Хәҙер был цех импортты алмаштыра торған производство булараҡ эшләйәсәк. Тулы ҡеүәтенә сыҡҡас, йылына 10 миллион пар бирсәткә әҙерләү планлаштырыла.

# ӘРМЕГӘ КИТӘЛӘР...



**Рәсәйҙә "Көҙгө саҡырылыш - 2022" кампанияһы старт алды. Ул быйыл, башҡа йылдарҙан айырмалы рәүештә, 2 ай дауам итәсәк. Башҡортостандан хәрби хеҙмәткә көҙгө саҡырылыш кампанияһы сиктәрендә 4000 һалдат оҙатыласаҡ, тине журналистар менән осрашыу ваҡытында республиканың хәрби комиссары Михаил Блажевич.**

"Көҙгө саҡырылыш кампанияһы махсус хәрби операция менән бер нисек тә бәйләнмәгән. Әрме хеҙмәтенә саҡырылыусыларҙың барыһы ла Рәсәй биләмәһендә урынлашҡан хәрби частарға ебәреләсәк. Ә хәрби бурысын үтәү ваҡыты тулғандар үҙ ваҡытында йәшәгән ерҙәренә ҡайтарыласаҡ", - тине ул.

Һалдаттарҙы саҡырылыу пунктында медицина комиссияһы үткәреп, хәрби хеҙмәт итеү урындарына 10 ноябрҙә ебәрә башланылар. Хәрби комиссар белдереүенсә, медицина комиссияһы үтеү тәртибе һәм булаҫаҡ һалдаттарҙың һаулыҡтарына ҡарата талаптар үҙгәрмәгән. Билдәләнеүенсә, булаҫаҡ һалдаттар араһында юғары ҡан баҫымы менән ауырыусылар күбәйгән (был диагноз менән әрме хеҙмәтенә алмайҙар). Шулай уҡ башҡа төрлө сирҙәргә бәйле әрме хеҙмәтенә яраҡһыҙ йәш егеттәрҙең һаны артыуын һыҙыҡ өҫтөнә алалар.

Хәрби комиссариат вәкиле әйтеүенсә, повестка һәр кемгә шәхсән тапшырыла. Шулай уҡ ниндәйҙер мәғлүмәтте асыҡлау өсөн бер ниндәй ҙә робот ҡулланылмай, ә һәр кемгә хәрби комиссариат хеҙмәткәре шылтырата. Шуға күрә, әгәр ҙә шылтыратыу шикләнеү тыуҙырһа, хәрби комиссариатҡа ҡабаттан шылтыратырға була, тине Михаил Блажевич. Хеҙмәткә алынған һалдаттарҙың күп өлөшө ҡоро ер ғәскәрҙәренә ебәреләсәк. Һаулыҡтары "А" категориялы булғандар ВДВ, спецназ һәм Росгвардия отрядтарын тулыландырасаҡ. Әгәр ҙә булаҫаҡ һалдат фәнни ҡаҙаныштарға һәм баҫма мәҡәләләргә эйә булһа, олимпиада һәм конкурстарҙа еңеүсе булһа, ул фәнни ротаға эләгергә лә мөмкин. Бындай роталар Анапала урынлашҡан. Яҙғы саҡырылыш ваҡытында фәнни роталарға 8 кеше ебәрелгән, көҙөн уларҙың һаны 10 булыр тип көтөлә. Шулай уҡ IT-белгестәргә ихтыяж күп. Законға ярашлы, егеттәр альтернатив хеҙмәт үтергә лә мөмкин. Йыл һайын 30-40 Башҡортостан егете альтернатив хеҙмәте үтә. Шулай уҡ яҙғы саҡырылышта спорт ротаһына 2 кеше оҙатылған.

# БАЛАҒА ПОСОБИЕ АЛАҺЫҢМЫ?



**Рәсәй Хөкүмәте аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән 8-17 йәшлек балаларға айлыҡ пособие түләү өсөн төбәктәргә тағы 27,5 миллиард һум бүлә. Ошо хаҡтағы бойороҡҡа Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, дәүләт башлығы Владимир Путиндың башланғысы буйынса 2022 йылдың апрелендә ғаиләләргә яңы ярҙам сараһы индерелде. Ғаиләнең хәленә ҡарап, пособиеның күләме -бала өсөн төбәктәге йәшәү минимумының 50, 75 йәки 100 проценты. Ул айына 6 меңдән 13,5 мең һумға тиклем тәшкил итә. "Бындай ярҙам йән башына уртаса килеме төбәктәге бер кешегә йәшәү минимумынан аҙыраҡ булған ғаиләләргә күрһәтелә. Пособиелар мохтажлыҡты комплексы баһалауҙы ҡулланып тәғәйенләнә. Шуның менән бергә мохтажлыҡты иҫәпләгәндә 1 марттан һуң эшен юғалтҡан һәм мәшғүллек үҙәктәренә иҫәпкә торған граждандарҙың, шулай уҡ өлөшләтә мобилизация барышында хәрби хеҙмәткә саҡырылған ғаилә ағзаһының килеме иҫәпкә алынмай", - тип асыҡлыҡ индерҙеләр Рәсәй Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә.

Әйткәндәй, РФ Дәүләт Думаһы бала тыуыуға һәм уны тәрбиәләүгә бәйле берҙәм пособие тураһында закон ҡабул итте. 2023 йылдың 1 ғинуарынан балалы ғаиләләр өсөн пособиелар бала тыуыуға һәм уны тәрбиәләүгә бәйле яңы айлыҡ пособие менән алмаштырыла. Пособие төрлө түләүҙәрҙе берләштерә: йөклөлөктөң беренсе аҙналарында иҫәпкә торған ҡатын-ҡыҙҙарға; баланы йәш ярымға тиклем тәрбиәләүгә; беренсе балаға (бөтә төбәктәрҙә лә бирелә); өсөнсө балаға (78 төбәктә генә һәм төрлө ҡағыҙҙәр буйынса бирелә); 3 йәштән 8 йәшкә тиклемге балаларға (социаль яҡлау органдары түләй); 8 йәштән алып 17 йәшкә хәтлемге балаларға (Пенсия фонды түләй). 2022 йылдың 31 декабренә тиклем тыуған бала өсөн пособиены ғаилә элекке йәки яңы ҡағыҙҙәр буйынса алырға мөмкин.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Республикала башҡорт атына иң яҡшы һәйкәл проектына конкурс иғлан ителде. Уны Ағиҙел ярына ҡуйыу күҙаллана. Бәйгелә ҡатнашыу өсөн заявканы, проекттарҙы, аңлатманы, график материалды һәм смета-финанс иҫәптәрен 2023 йылдың 1 мартына тиклем М.В. Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейына (Өфө ҡалаһы, Гоголь урамы, 27) тапшырырға кәрәк. Белешмә өсөн телефондар: +7 (347) 273 42 36, +7 (347) 272 13 85.

✔Баш ҡалала берҙәк хайуандарға приют төҙөү проекты әҙер, төҙөлөш өсөн 150 миллион һум аҡса кәрәк. Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев белдереүенсә, хакимиәттең ундай күләмдә аҡсаһы юҡ. Шуға күрә, питомник төҙөү билдәһеҙ ваҡытҡа кисектерелә. Шул уҡ ваҡытта йыл башынан ҡалала 5 мең хужаһыҙ хайуан ауланған.

✔Өфөлә Ҡыш бабай резиденцияһы асыла, тип хәбәр итте ҡала мэры Ратмир Мәүлиев. Уны Ағиҙел йылғаһы буйында урынлаштырылыу күҙаллана. Мәүлиев әйтеүенсә, Өфө - миллионлы ҡала, балалар нык күп. Бынан тыш, республиканың баш ҡалаһына байтаҡ ҡунаҡтар килә. Барыһының да Ҡыш бабайҙан бүләктәр алыу теләге ҙур. Резиденция 25 декабрҙән 14 ғинуарға тиклем эшләр тип көтөлә. Бынан тыш, Башҡортостандың баш ҡалаһына "ысын" Ҡыш бабайҙы килтерергә теләйҙәр. Әлегә Бөйөк Устюг менән һөйләшеүҙәр алып барыла, тип өҫтәне муниципалитет башлығы.

✔Быйыл декабрҙән Өфө менән Таиланд араһында тура авиабәйләнеш тергеҙелә. Был турала "Башинформ" агентлығына Coral Travel турагентлығынан хәбәр иттеләр. Компания вәкиле һүҙҙәренсә, Өфө аэропортынан Пхукетҡа рейстар 2 декабрҙә башлана һәм киләһе йылдың яҙына тиклем дауам итә. Осоштарҙы 325 пассажир өсөн иҫәпләнгән Boeing 767 самолеттарында Azur Air компанияһы башҡара.

✔БР Финанс министрлығынан белдереүҙәренсә, 2022 йылдың 1 декабрендә физик шәхестәр тарафынан мөлкәт, транспорт һәм ер өсөн һалымдарҙы түләүҙең берҙәм ваҡыты етә. Һалымдарҙы өйҙән сыҡмайынса ғына онлайнда Рәсәй ФНС-ы сайтында йәки "Физик шәхестәрҙең һалымдары" мобиль ҡушымтаһы аша түләргә мөмкин. Әгәр ҙә 1 ноябргә тиклем һалым түләү тураһында иҫкәрмә килмәһә, һалым органына мөрәжәғәт итергә йәки "Һалым түләүсенең шәхси кабинеты" аша мәғлүмәт ебәрергә кәрәк.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҺОРАУ - ЯУАП

# ХАҠТАР ХӘЛЕ БОРСОЙ



Әле ил буйынса йыллыҡ инфляция 13,7 процент тәшкил итә. Рәсәй банкы күҙаллауынса, 2022 йылдың аҙағына ул 11-13 процентҡа тиклем төшәсәк, 2023 йылда 5-7 процентҡа тиклем кәмеп, 2024 йылда маҡсатлы 4 процентҡа кире ҡайтасаҡ.

➔ **Башҡортостанда инфляцияның аҡрынайыуына нимә йоғонто яһай?**

● Аҙыҡ-түлек өлөшөндә хаҡтарҙың артыуын тотороҡландырырға йәнә йәшелсә-емеш продукцияһы тос өлөш индерҙе - 2022 йылда уны баҙарҙа былтырғыға ҡарағанда күберәк тәҡдим итәләр. Шуның һөҙөмтәһендә быйыл ҡайһы бер йәшелсә һәм емеш-еләктәр былтырғыға ҡарағанда арзанырак булды.

● Иген культураларының рекордлы унышы онға һәм он продукцияһына, шулай уҡ ярма һәм ярма изделиеларының бөтә төрҙәренә лә тиерлек хаҡтар үҫешенең аҡрынайыуына килтерҙе.

● Суҡса, ҡош итен һәм һөттө күпләп тәҡдим итеү сәбәпле, республикала ит һәм һөт ризыҡтарына хаҡтарҙың үҫеш кимәле кәмене.

● Ҡулланыусыларҙың тотанаҡлы ихтыяжы аҙыҡ-түлеккә ҡарамаған сегментта инфляцияның әкренәйеүенең төп сәбәбе булды - енел автомобилдәргә һәм шиналарға, көнкүреш техникаһына һәм электроникаға, шул иҫәптән һыуыткыстарға, кер йыуыу машиналарына һәм телевизорҙарға хаҡтарҙың артыуы кәмене.

● Хеҙмәт күрһәтеү өлкәһендә инфляцияның артыуына, атап әйткәндә, эске һәм сит ил авиаосоштарына ихтыяждың артыуы йоғонто яһаны. Маршруттарҙың һәм рейстарҙың сикле булыуы арҡаһында Төркиәгә, Мысырға һәм Көньяҡ-Көнсығыш Азия илдәренә юл хаҡы артты, шулай уҡ эске йүнәлештәр буйынса осоштарға хаҡ төшөү кәмене. Автозапчастарҙың һәм ремонт эштәренең ҡиммәтләнеүе һөҙөмтәһендә автостраховка полистарының хаҡы артты.

➔ **Республикала инфляция кимәле ниндәй хәлдә?**

- Был һорауға Рәсәй Банкы бүлексәһе - Башҡортостан Республикаһы буйынса Милли банк шулай тип аңлата: сентябрҙә республикала йыллыҡ инфляция 13,9 процентҡа тиклем кәмегән. Быға аҙыҡ-түлеккә һәм аҙыҡ-түлек булмаған тауарҙарға хаҡтар динамикаһы йоғонто яһаған. Хеҙмәт күрһәтеү өлкәһендә инфляция артҡан.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ГЕРОЙ-ӘСӘГӘ...

**Владимир Путин ошо көндәрҙә беренсе тапҡыр "Герой-әсә" тигән маҡтаулы исем тапшырҙы.** Рәсәйҙең беренсе Герой-әсәләре тип Чечня Республикаһы Башлығының ҡатыны Медни Ҡадирова һәм Ямал-Ненец автономиялы округында йәшәгән Ольга Дехтяренко танылды. Был оло награда 1944 йылда булдырыла, һуңғы тапҡыр 1991 йылдың 14 ноябрендә тапшырыла. Быйыл 15 августа "Герой-әсә" исемен булдырыу тураһында Указ донъя күрҙе. Ул Рәсәй гражданы булған, 10 һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ҡатындарға тапшырыла. Шулай уҡ Герой әсәләргә 1 миллион һум аҡса бирелә.

## БАТЫРЛЫҒЫ ӨСӨН...

**Рәсәйҙең Оборона министрлығы дошман техникаһын юҡ иткән йәки алып ҡаскан өсөн махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан яугирҙарға тейешле түләүҙәрҙең суммаһын билдәләне.** Әйтәйек, танк өсөн 100 мең һум аҡса түләнә, вертолет - 200 мең һум, самолет - 300 мең һум. Дошмандың тере көсөн юҡ иткән өсөн 100 мең һум түләү ҡаралған. Бынан тыш, дошмандың пилотһыҙ осоу аппаратын, БМП, БТР, БМД, МТ-ЛБ, САУ, С-300, "Бук", "Тор", "Оса" йәки РСЗО-ның хәрби машинаһын юҡ иткән йәки алып ҡаскан һалдаттарға 50 мең һум түләнергә тейеш, тип белдерҙеләр Рәсәйҙең Оборона министрлығында.

## ЕР ШАРЫНДА...

**15 ноябрҙә Ер шарындағы халыҡтың һаны 8 миллиард кешегә еткән, тип хәбәр итә Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының халыҡтар һаны өлкәһендәге фонды.** Айырыуса Азия һәм Африка илдәре ерҙәге халыҡ иҫәбенең артыуына ҙур өлөш индергән, Европала, киреһенсә, халыҡтың кәмеүе күҙәтелә. Кешелек, сираттағы үҫеш этабына еткәс, үҙенең алдында торған глобаль проблемаларҙы хәл итеү юлын табырға тейеш, тиелә хәбәрҙә. 2037 йылда Ерҙә халыҡ һаны 9 миллиардҡа етеүе ихтимал, тип фаразлай Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы.

## ҠЫТАЙҒА...

**Федераль һауа транспорты агентлығы ведомство-ара комиссия ҡарары менән Өфө аэропортынан тағы бер нисә халыҡ-ара авиарейс ойоштororға рөхсәт итәлде.** "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы ҡарамағында ошондай документ бар. "Азимут" авиакомпанияһы аҙнаһына өс тапҡыр Башҡортостандың баш ҡалаһы менән Ҡытайҙың Урумчи ҡалаһы араһында осоштар башҡарырға йыйына. Авиакомпания Өфөнән Сәмәрҡәндкә (Үзбәкстан) осоштар ойоштороуға ла рөхсәт алды. "Азур Эйр" авиакомпанияһы аҙнаһына ике тапҡыр Пхукетҡа (Таиланд) оса башлай.

## ҒӘРӘП ӘМИРЛЕКТӘРЕНӘ...

**2 декабрҙән Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренең Air Arabia авиакомпанияһы Шарджа - Өфө - Шарджа маршруты буйынса осоу программаһын аса.** Тура рейстар аҙнаһына биш тапҡыр: дүшәмбе, шишәмбе, кесаҙна, йома һәм йәкшәмбе көндәрендә башҡарыла. Осоу өсөн биш сәғәт самаһы ваҡыт китә. Өфө аэропорты хәбәр итеүенсә, Башҡортостандың баш ҡалаһынан самолеттар төнгө 2-се яртыла оса һәм Шарджаға урындағы ваҡыт буйынса таңғы 6-сы яртыға барып етә. Осоштарҙы 168 пассажир өсөн иҫәпләнгән Airbus A320 самолёттары башҡара. Маршрут 2023 йылдың март аҙағына тиклем ғәмәлдә.

ҠЫҪҠАСА

# ҠАРҘЫ ИРЕТӘБЕҘ УНЫ...

**Баш ҡала Сәғит Агиш урамында 813 квадрат метр биләмәлә яңы ҡар иретеү пункты төҙөләсәк. Контракт хаҡы 165,5 миллион һум тәшкил итә.** Сығымдар республика һәм Өфө ҡалаһы бюджетынан ҡаплана. Был объект 2023 йылдың 31 майына тиклем төҙөлөп бөтөргә тейеш. Быйыл төҙөлөш майҙанын әҙерләү, ҡар иретеү станцияһын һәм канализацион һурҙырыу станцияһын ҡуйыу күҙаллана, киләһе йылда контроль-тикшереү пункты һәм көнкүреш бүлмәләре төҙөү, тышҡы элемтә бәйләнеше, һыу һәм канализация торбалары үткәреү, территорияны төҙөкләндереү планлаштырыла.

✔ **Баш ҡалала ташландыҡ автомобилдәрҙе утилләштереү буйынса эш дауам итә.** Ташландыҡ йәки тулы комплектта булмаған машиналарҙы халыҡтан ҡабул итеү буйынса кеҫә телефондарындағы WhatsApp ҡушымтаһы аша +7 (986) 964-13-22 номеры буйынса хәбәр итергә, шулай уҡ oksb308@yandex.ru электрон почтаһына ғариза ҡалдырырға мөмкин. 2019-2022 йылдарҙа барлығы ошондай 4497 транспорт сараһы тикшерелгән. Уларҙың 2078-ен комиссия ташландыҡ һәм тулы комплектта түгел тип тапҡан. Бындай транспорт күбеһенсә Октябрь һәм Совет райондарында асыҡланған. Эвакуацияланған 354 транспорттың 132-һен хужалары кире ҡайтарып алған. Әлеге ваҡытта махсус урындарҙа 222 ташландыҡ автомобиль һаҡлана, шул уҡ ваҡытта комиссия ихаталарҙа ташландыҡ автомобилдәрҙе асыҡлау буйынса эшен дауам итә.

✔ **Баш ҡалала Көрәш һарайын төҙөү әүҙем бара. Әле бында нигеҙ әҙер, цоколь ҡаты 95 процентҡа ҡоролған, беренсе ҡатты ҡаплаусы плиталәрҙе түшәйҙәр, инженер коммуникацияларын һуҙалар. Был турала үҙенең телеграм-каналында төбәк спорт министры Руслан Хәбибов яҙған.** Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Өфөләге Көрәш һарайын Воскресения Христова соборы артында, Муса Гәрәев, архитектор Рехмуков, Рудольф Нуриев һәм Комсомол урамдары менән уратылған кварталда төҙөйҙәр. Бында яңырак БР Башлығы Радий Хәбиров та булды. Ул төҙөүселәр һәм проектсылар менән бина эсендә нимә буласағы тураһында кәңәшләште һәм ул күп функциялы спорт объекты булһын, тип белдерҙе. Көрәш һарайы Өфөнөң 2024 йылда билдәләнәсәк 450 йыллығына төп юбилей объекттарының береһе булып тора.

✔ **Башҡортостанда махсус туктаткала тотонолған машиналарҙы һаҡлаған өсөн түләү күләме үҙгәрҙе.** БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған тейешле ҡарар республикалағы хоҡуҡи мәғлүмәт рәсми интернет-порталында баҫылып сыҡты. Документҡа ярашлы, ҡала эсендә тотонолған машинаны тейәү-төшөрөү, махсус туктаткаға күсереү эштәре өсөн түләү 2557 һум буласаҡ. Әгәр рөхсәт ителгән ауырлығы 3,5 тоннанан артмаһа, "А" категорияһындағы автоны һаҡлау сәғәтенә 20 һум тәшкил итә, "В" категорияһындағыһы - 40 һум. Рөхсәт ителгән ауырлығы 3,5 тоннанан артһа, "С", "Е" категорияһындағы машиналар өсөн 80 һум түләү ҡаралған. Габаритлы транспорт сараһы өсөн 120 һум түләргә кәрәк буласаҡ.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Бөйөр сәнсеүе

❖ Ярты литрлыҡ ике һауыт араҡыны алып, һәр ҡайһыһынан 100-әр грамын ҡойоп алырға ла, шуның урынына юл япрағының яңы ғына атҡан сәскәһен тултырырға. Шешәләрҙе яҡшылап ябып, 15 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. Ошо ваҡыт эсендә төнәтмә сәй төҫөнә инә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Гастрит

❖ Беренсе йыл үҫкән дегәнәктең һуҡ бармаҡ ҙурлығындағы тамырын ҡаҙып алып, өсәү ағынан 2 сантиметрын ҡырҡырға. Тамырҙы таҙартып ваҡларға, 1 литр һыуҙа 10 минут ҡайнатырға. Шунан ошо һыуға бер төп юл япрағын һалырға. Һыу яңынан ҡайнағас та, утын һүндерергә. Был дауаны иртәнсәк әҙерләп, кискә тиклем теләгән бер ваҡытта эсергә. Бер литр етмәһә, өҫтәп ҡайнатып алырға мөмкин, әммә үҙегеҙҙе мәжбүрләп эсмәгеҙ. Ашҡаҙанға ҡыйын булыуын тойһағыҙ, әҙерәк ҡулланығыҙ. Йәй буйы ошо рәүешле дауаланыу файҙалы.

### Уҫаҡ

❖ Уҫаҡ ҡайырында һәм япраҡтарында файҙалы әселек бар, ул бигерәк тә бөйөрҙәр эшмәкәрлеге боҙолғанда файҙалы. Был әселек һимереүҙән һәм диабеттан ғына түгел, йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан дауаланғанда ла ярҙам итә. Уҫаҡ ҡайырынан кеүәҫ әҙерләргә мөмкин. Өс литрлыҡ банканы яртыһына тиклем уҫаҡ ҡайырыһы тултырып, өҫтөнә һыу ҡойорға һәм 1 стакан шәкәр, 1 балғалаҡ ҡаймаҡ ҡушырға. Йылы урында ике аҙна тоторға. Банканың ауыҙын марля менән ҡапларға. Был кеүәҫте көнөнә 2-3 стакан эсергә мөмкин. Бер стакан ҡойоп эскәс тә, банкаға 1 стакан һыу һәм 1 ҡалаҡ шәкәр өҫтәп ҡуйырға. Бындай кеүәҫ 2-3 айға етә. Әгәр ҙә кеүәҫ килешмәһә йәки оҡшамаһа, уның урынына уҫаҡ япрағы һәм ҡайырынан бешерелгән сәйҙе аҙ-аҙлап эсергә мөмкин. Әсе нәмәне эскәндә һаҡ булырға кәрәк.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Тамырҙары ҡайҙа?

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының түшкә тағып йөрөгән биҙәүестәрен өйрәнеүҙең мөһим бер яғы - ул тарихы. Ысынлап та, селтәр, яға һәм башҡа төр биҙәүестәрҙең таралыу алған территорияһын, нимәнән эшләнгәнлеген белеү менән бер рәттән тамырҙарын да асыҡларға кәрәк. Был йәһәттән бер нисә фекер иғтибарҙы йәлеп итә.

Светлана Николаевна Шитова "Башкорт халыҡ кейеме" китабында яҙыуынса, биҙәүестәрҙе көмөш һәм мәрйенддәр менән һырып эшләү традицияһы Урта быуаттарға ҡайтып ҡала. Тап шул осорҙа көнсығыш илдәре менән сауҙа бәйләнештәре йәнләнә. Ә бына археологтар Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов менән Әлфиә Нияз ҡыҙы Солтанова "История Башкортостана. Древность. Средневековье" исемле китабында бик ҡыҙыҡлы һығымталар яһай. Улар хәҙерге Силәбе өлкәһендә табылған "Һынташты (бронза быуаты)" археологик комплексындағы ҡәберлектәрҙә табылған биҙәүестәрҙе туранан-тура башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарыныҡы менән бәйләй (фотола). Ғалимдар археологик материалдар нигеҙендә яға, һаҡалдарҙың тамырҙарын беҙҙең эраға тиклемге IV - I меңйыллыҡтарға алып барып тоташтыра.



Түшкә тағып йөрөтөлгән биҙәүестәрҙең тарихына шулай уҡ тыуған яҡты өйрәнеүсе билдәле археолог, музейҙар белгесе Рәүеф Барый улы Әхмәров "Об истоках декоративно-прикладного искусства башкирского народа" тигән китабында мөрәжәғәт итә. Әйтергә кәрәк, ул биҙәүестәрҙең "селтәр" һәм "һаҡал" тигән төрҙәре тураһында һүҙ алып бара.



Уның фекеренсә, селтәр - иң боронғо биҙәүестәрҙең береһе. Рәүеф Барый улы селтәр менән һаҡалдағы айырым элементтарҙы беҙҙең эраның VII-VIII быуаттарына ҡараған ҡәберлектәрҙә табылған медальон, шөңгөрҙәр менән бәйләй.

Шулай итеп, археология өлкәһендә тикшеренеүҙәр алып барған билдәле ғалимдар башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының кейемендә үҙәк урындарҙың береһен алып торған биҙәүестәрҙең тамырҙарын бик боронғо замандарға алып барып тоташтыра.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# ТӨТӨНҺӨҘ ТАРТЫУ - БАЛАЛАР УЙЫНЫМЫ?

**Балаларҙың электрон сигареттар менән мауығыуы нимәгә килтереүе ихтимал? Вейптар, электрон сигареттар, айкостар күптән түгел модаға инде. Күптәр уларҙы бөтөн урындарҙа ла, хатта бинала ла көйрәтеүе уңайлы булған өсөн һатып ала.**



Эйе, уларҙы һатыу һәм ҡулланыу тәртибе оҙаҡ ваҡыт закон нигеҙендә көйләнмәй килде. 2019 йылда Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары электрон тартыу әйберҙәрен тәмәке төрҙәренә тигеҙләп, балиғ булмағандарға һатыуҙы тыйғайны, ләкин уларҙы йәмәғәт урындарында сикләү йәштәрҙә һис кенә лә ҡаушатманы. Төтөнһөҙ генә тартыусы өйөрҙә мәктәп янында ла, йорт алдарында һәм парктарҙа ла осратырға була. Үсмерҙәр өлкәндәрҙән дә, хоҡуҡ һәм тәртип һаҡсыларынан да ҡурҡмай, шуға күрә йәшенмәйҙәр ҙә һәм иркенләп үҙ фекерҙәре менән уртаҡлашалар. Был мода ҡайҙан, нисек башланып китеүен йәштәр үҙҙәре лә хәтерләмәй. Шулай бер ваҡыт бөтөн уҡыусыларҙа ла пәйҙә була улар. Электрон сигареттарҙан тәмәке еҫе сыҡмағанлыҡтан, ата-әсәләре алдында фашланмаясаҡтарын бик тиҙ төшөнөп ала балалар.

Һәр хәлдә, "Башинформ" хәбәрсеһе әңгәмәселәре тартҡыс гаджеттарға шул сәбәпле күсәләр. Элинаға (исемдәр үҙгәртеп алынды - **Авт.**) 16 йәш, 3 йыл инде тарта. Ҡәҙимге тәмәкенән башлаған, ә аҙаҡ дуҫтары араһынан иң тәүҙә "быу сығарғыс"тар һатып алған. "Шул саҡ мин тарта башланым. Тәмәкенән һуң үҙемде насар тойҙом, күңел болғана ине. Унан һуң тәмәке һаҫығы ла оҡшаманы, шуға күрә электрон сигареттар һатып ала башланым",- тип һөйләй ҡыҙыҡай.

Ә 14 йәшлек Александра электрон сигареттарҙы бынан ике йыл элек тарта башлай. Компанияла һыйлайҙар уны һәм ул баш тарта алмай, шунан ғәҙәткә инеп китә. Шәп ҡыҙ йә өлкән булып күренеү өсөн дә түгел, үҙенә шулай оҡшаған өсөн тарта. "Ғөмүмән, мин быны шәплек билдәһе тип иҫәпләмәйем, сәләмәт тормош алып барыусыларҙы ихтирам итәм. Бәлки, үҙем дә бер ваҡыт шундай тормош рәүешенә күсермен", - ти Саша. "Тәүҙәрәк атайым менән әсәйем был ғәҙәтемде бик насар ҡабул итте, тора-бара күнделәр инде. 13 йәшемдә әле тартыуҙың зыяны тураһында күп һөйләйҙәр ине, хәҙер өндәшмәйҙәр"-, ти Элина.

"Минең атай-әсәйем бөтөнләй ҡаршылар, минә 14 кенә йәш бит әле. "Ташла, һин бит спорт менән шөғөлләнәһең!" - ти улар, ә үҙҙәре тарталар", - ти Саша. Александра ысынлап та спорт менән шөғөлләнә, волейболға йөрөй, хип-хоп бейергә ярата.Тартыуҙың һаулығы өсөн ниндәйҙер кире тәьҫирен һиҙмәй әле. Дөрөҫ, спорт секцияларында саҡта тыны быуылыуын таный, әммә бында электрон сигареттарҙың зыянын күрмәүен белдерә.

### "Попкорн сире"

Ләкин был ҡыҙҙар электрон сигареттарҙың һаулыҡҡа тәьҫире юҡ тип бик ныҡ яңылыша. Асылда, эш үпкәне күсереп ултыртыуға барып етеүе бик ихтимал. Быу сығарыусы был саралар ҡәҙимге тәмәкеләр кеүек үк зарарлы. Составтары ягынан да хатта әллә ни айырмалыҡтары юҡ. Өфө табибы, онколог Замир Абдуллин әйтеүенсә, бындай быу бүлеп сығарыусы сигареттар бала ҡулдарында шуныһы менән хәүефле: улар әскә быуҙы нисә тапҡыр һурыуҙарын контролләй алмай. Ҡәҙимге сигарет көйрәткәндә, ғәҙәттә, бер юлы бөрөүҙе генә ҡулланһалар, электрон сигареттарҙы бер юлы "көнделәре булғансы", бүккәнсе тарталар. Шунлыҡтан, уны күпме һулауҙарын контролләй алмайҙар һәм күберәк ағыуланалар.

Балалар өсөн электрон сигареттар уйын менән бер булып тойолһа ла, әйтелеүенсә, уларҙың үпкәләрендә хәүефле әҙемтәләр башлана, ти доктор. Ҡоро һәм тамаҡты гел ҡуҙғытып торған йүткерек барлыҡҡа килеүе ихтимал, ә ул дауалауға бирелмәй. "Электрон быу сығарғыстар составындағы глицерин үпкә туҡымаларына ултыра һәм бронхиолит сире башлана. Уны дауалауға оҙаҡ ваҡыт китә, бик күп антибиотик, гормондар ҡабул итергә кәрәк буласаҡ. Улар бер аҙ хәлде еңеләйтереп, йүткеректе баҫҡан һәм температураны төшөргән хәлдә лә был сир барыбер тулыһынса дауалауға бирелмәй", - тип аңлатма бирә Республика клиник онкодиспансерҙың торакаль онкологы Замир Абдуллин.

Донъя медицина йәмәғәтселегендә электрон быу сығарыу саралары менән мауығыусылар йүтәлен тиҙ әҙерләнеүсе попкорн етештереүселәргә генә хас сир билдәләре менән сағыштыралар һәм ул "үпкәләрҙең попкорн сире" тигән атама менән йөрөтөлә. 2019 йылда был сир Канадала йәшәүсе 17 йәшлек вейперҙа расланa һәм уға үпкәләр күсереп ултыртыу мәсьәләһе килеп тыуа.

### Әсәһе "һыйлаған"

Өфөлә йәшәүсе Людмила Тихонова тартыуға ҡаршы әүҙем көрәшсе. Урамда тартыусы үсмерҙәргә кисәтеү яһамай үтеп китә алмай ул, ләкин улар быны ишетергә лә теләмәй, ҡайһы саҡ хатта ҡаршы ирешеп, һүгенеп тороп ҡалыуҙары ла бар. Ләкин Людмила өндәшмәй ҡала алмай, сөнки модаға әйләнгән был алама ғәҙәттең йәштәрҙе һәләкәткә илтеүен аңлай ул. Людмила үҙе лә 13 йәшенән сигарет тарта башлаған, сөнки өлкәнерәк ҡыҙҙар менән дуҫлашҡанлыҡтан, улар өйрәткән. Ул саҡ фильтрлы сигареттар ҙа булмай әле, арзан ҡәҙимге тәмәке алып тарталар. Люданың мутлыһын әсәһе бик тиҙ һиҙеп ҡала һәм ныҡ асыулана. Бындай осраҡтарҙа ҡәтғи тәрбиә яҡлы әсә ҡыҙын ике тәмәкене бер юлы ашап бөтөргә мәжбүр итә. Ҡыҙыҡай был "тәрбиә" алымынан һуң үҙен бик насар тоя, ҡоҫҡоһо килә һәм башҡаса тәмәкегә ҡарай ҙа алмаҫ хәлгә килә. "Башинформ"дың тағы бер әңгәмәсеһе үҙенең 15 йәшлек ҡыҙы тартыуын белгәс, шундай уҡ ҡәтғи сараға барырға әҙер була. Ләкин ҡыҙыҡайға әлеге "ашалған сигареттар" хаҡында тасуирлап һөйләү ҙә яҡшы тәьҫир итә.

### Тыйылған татлы буламы?

Үкенескә, бөтөн ата-әсәләр ҙә хәүефле модаға ҡаршы көрәштә әлегеләй ҡәтғи тәрбиә саралары ҡулланырға әҙер түгелдәр. Үсмерҙәрҙең күбеһе белдереүенсә, уларҙың шөғөлө хаҡында ата-әсәләре яҡшы белә, ләкин өгөт-нәсихәттәре менән мейене "серетмәй". Ә өлкәндәрҙең был юҫыҡта фекере ябай: тыйыуҙар менән генә хәлде үҙгәртеп булмаясаҡ. Балалар барыбер йәшенеп тартыуҙарын дауам итәсәк, ти улар. Өфөлә йәшәүсе Светлана Брякова һөйләүенсә, уның ҡыҙы бынан ике йыл элек тарта башлаған. Әсәһе уға бының зыянын аңлатырға тырышып ҡараһа ла, файҙа булмай. Шунан ҡатын үҙенең дә "буйһонмаҫ" йәш сағын иҫкә төшөрә һәм тыйыуҙан файҙа юҡ тиғән фекерендә ныҡына. Электрон быу сығарыу ниндәйҙер кимәлдә тәмәке тартыуҙы алмаштырһа ла, уның зарарын да аңлай Светлана һәм зыяны әҙерәген һайлауҙы хупларға мәжбүр була.

Әйткәндәй, Республика психотерапия үҙәгенең үсмерҙәр менән эшләү бүлегендә баланың 13 йәшенә электрон сигарет бүләк итеүсе ата-әсәнең ҡылығына күптән инде ғәжәп ҡылмайҙар. Белгестәр фекеренсә, ата-әсә ошондай юл менән балалары күңеленә юл табырға, ышаныслы мөнәсәбәттәр тыуҙырырға тырыша. Ысынында иһә бала менән бындай рәүештә дуҫлашырға маташыуҙарҙың ахыры бик ҡыҙғаныс тамамлана. Ата-әсә "фатиха" биргәс, үсмер, мин инде ярайһы ҙурайҙым, үҙаллымын, тип уйлай һәм өлкәндәргә, ғөмүмән, буйһонмай башлай. Башҡа бер төркөм ата-әсәләр, киреһенсә, ҡәтғи тыйыу алымын һайлай. Ләкин был да дөрөҫ сара түгел, ти психологтар, сөнки шул уҡ ваҡытта атай менән әсәй үҙҙәре тарта икән, был ғәҙәттең зыянлы булыуында баланы инандыра алмаясаҡтар. "Тартыу зарарлы!", "Бер тамсы никотин атты үлтерә", "Тартыуҙы ташлаһаң, һинә шуны-шуны һатып алабыҙ", "Һин әле бәләкәй" кеүек дөйөм һүҙҙәр, аҡыл һатыу бер ниндәй файҙа бирмәйәсәк.

Психотерапевт кәңәш итеүенсә, бала менән һөйләшеүгә алдан һәм ентекле әҙерләнергә, тәмәке, сигареттарҙың зыяны хаҡында мәғлүмәтле булырға кәрәк. Дәлилдәрендә тормошҡа бәйләү, мәҫәлән, сигарет һатып алған аҡсаны башҡа маҡсаттарҙа тотоноуҙың отошлоғо, бала һаулығы өсөн борсолоуҙарығыҙ хаҡында һөйләү ҙә урынлы буласаҡ. Атай-әсәй үҙе сәләмәт йәшәү рәүеше өлгөһө күрһәтеп, балаһын алама ғәҙәттәрҙән һаулыҡ өсөн генә түгел, ә артабанғы тормошо өсөн дә хәүефле икәненә ышандыра алырға тейеш.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.



Андронов ҡәбиләләре ҡәберҙәрендә тотош кеше һөлдәһе урынына уның айырым өлөштәре генә: баш һөйәге, башһыҙ һөлдәләр, кәүҙәһенең яртыһы табылыуы осраҡтары бик күп. Бындай өлөшләтә ерләүҙе, үлгән кешенең мәйетен ер өҫтөндә ҡалдырып, уның һөйәктәрен таҙартыу йолаһы һөҙөмтәһе итеп ҡарауға ныҡлы ерлек бар. Үлгән кешенең ижтимағи хәленә (көслө, бай булыуы һ.б.) ҡарап, ырыуҙаштары уның һөйәктәренең төрлө магик сифаттарға эйә булыуына инанған, һәм улар үҙенсәлекле талисман ролен үтәгән, амулет, йәғни бетеү итеп тотолған. Бындай осраҡта кеше һөйәктәре эргәлә ҡалдырылған, бер ни тиклем ваҡыттар уҙғас, уларҙы ерләүҙәре лә мөмкин булған. Мәйеттән тороп ҡалған һөйәктәрҙе айырымлап, өлөшләтә ерләү абашев һәм бура мәҙәниәте ҡәбиләләре ҡәберлектәре өсөн ғәҙәти күренеш була; үрҙәрәк билдәләп үтелгәнсә, ям мәҙәниәтендә лә ошондай уҡ ерләү йолаһы күпләп күҙәтелә. Бынан инде ошондай һығымта яһап була: энеолит һәм бронза эпохаларында Көньяҡ Урал һәм уға сиктәш территорияларҙа йәшәгән халыҡтарҙың дини ҡараштары уртаҡ нигеҙҙә формалашҡан.

Алдараҡ, бура мәҙәниәте ҡәбиләләре тураһында яҙғанда, уларҙа сәсбау (сәсүрмә, сулпы) йәиһә түшелдерек сифатында ҡулланылған, бронза торбасыҡтар (пронизки) һәм пластиналарҙан яһалған биҙәүестәр комплексының киң таралыуына уҡыусыларҙың иғтибарын йүнәлткән инек. Һынташты ҡәберлегенән тағы ла байыраҡ бронза биҙәүестәр йыйылмаһы табылыуы беҙҙе яңынан ошо сюжетҡа кире ҡайтырға мәжбүр итә. Һынташтылағы ике ҡатын-ҡыҙ ҡәберендә, ҡалын күнгә беркетелеп, көмөш пластиналарҙан һәм торбасыҡтарҙан яһалған берәр зиннәтле түшелдерек табылған. Уларға иш булырлыҡ табылдыҡтар Көньяҡ Урал, Волга буйы һәм Ҡаҙағстандың бронза эпохаһына ҡараған ҡомартҡыларында күпләп осрай.

Ошондай түшелдеректәрҙең бура ҡәбиләләре ҡурғандарынан алынған сәсбау-түшелдеректәр менән дөйөм типологик яҡынлығы шик тыуҙырмай. Бында ошо биҙәүестәр комплексының ҡатын-ҡыҙҙар ерләнгән ҡәберҙәрҙән табылыуы иғтибарҙы йәлеп итә. Уйлауыбыҙса, ошо түшелдеректәр - башҡорттарҙа әлеге заманға тиклем массовый рәүештә һаҡланып ҡалған ҡатын-ҡыҙ күкрәксәләренең иң боронғо һәм сағыу прототибы ул. Сағыштырылған түшелдеректәр араһындағы конструктив оҡшашлыҡ беленеп тора, тик уларҙың айырмаһы хәҙерге башҡорт күкрәксәләрендә (башҡортса - яға, һаҡал) биҙәүес сифатында сәйләм, көмөш тәңкәләр йә иһә ябай пластиналар ҡулланылыуында ғына.

Конструкцияһы буйынса оҡшаш ҡатын-ҡыҙ түшелдеректәренең хәҙерге мириҙарҙа, сыуаштарҙа һәм Төньяҡ Евразияның башҡа халыҡтарында һаҡланып ҡалыуын һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк.

Беҙҙең бында сағылдырылған күҙәтеүҙәребеҙ дөрөҫ юҫыҡта бара икән, ғалимдарыбыҙ ҡарамағында ҡиммәтле сығанаҡҡа тиң материал барлыҡҡа киләсәк: ул Урал-Волга буйының бронза быуаты ҡәбиләләре мираҫының, үҙгәрә барып, ошо төбәк халыҡтарында хәҙерге заманға тиклем һаҡланып ҡалыуына дәлил булып тора. Был дала Евразияһы ҡәүемдәре, иң элгәре Көньяҡ Урал, Көньяҡ Себер, Урал-Волга буйы халыҡтары этногенезы башланғысының, шул иҫәптән хәҙерге башҡорттарҙың да, бронза быуаты ҡәбиләләренә барып тоташыуы хаҡындағы фекергә етерлек дәлил булып торасаҡ. Уҡыусы, Көньяҡ Уралда бронза эпохаһына ҡараған 22 ҡәлғә-ҡаласыҡ асылып, ошо нигеҙҙә оригиналь билдәләре булған археологик мәҙәниәтте айырып ҡарау дала Евразияһы археологтарының барыһы өсөн дә һис бер көтөлмәгәнсә булды, һәм һынташты ҡәбиләләре тарихының үҙәк мәсьәләләре буйынса әлегәсә берҙәм фекер юҡ.

Бына, мәҫәлән, бер төркөм тикшеренеүселәр Көньяҡ Уралда һынташты мәҙәниәтенең бында көнбайыш райондарҙан килгән абашев мәҙәниәте ҡәбиләләренең әүҙем йоғонтоһо аҫтында барлыҡҡа килеүе хаҡындағы фекергә килә. Хатта ошо мәҙәниәттең абашевсылар мәҙәниәтенең бер варианты булыуы хаҡындағы ҡараш та бар. Шулай уҡ Г.Б. Здановичтың оппоненттары Арҡайым тибындағы ҡәлғәләрҙең барлыҡҡа килеүен Урал-Волга буйы төбәге ҡәбиләләренең бер ни тиклем кимәлдә дала халыҡтары төркөмө һәм ям мәҙәниәте ҡәбиләләре вариҫтары ҡатнашлығында барған бәйләнеш һөҙөмтәһе итеп ҡарай. Ҡайһы бер авторҙар күрһәтелгән ҡомартҡыларҙың барлыҡҡа килеүендә Төньяҡ Кавказ ҡәбиләләренең ҡатнашыуы мөмкинлеге хаҡында ла һүҙ йөрөтә.

Арҡайым тибындағы ҡомартҡыларҙың функциональ тәғәйенләнеше буйынса тикшеренеүселәр араһында фекер айырымлыҡтары бик күп. Күптәр Г.Б. Зданович һәм уның коллегалары тикшеренеүҙәренең төп положениеларына - ҡеүәтле нығытмалар системаһы булған Арҡайымға иш тораҡтарҙың дини-административ, һөнәри һәм хәрби һаҡ функцияларын үтәүсе протоҡала үҙәктәре булғанлығына ҡаршы килә. Оппоненттар фекеренсә, был тораҡтар - малсылыҡ-ер эшкәртеү менән көн иткән халыҡтың Көньяҡ Уралда барлыҡҡа килгән ҡәҙимге, әммә иртә ҡәлғә-ҡаласыҡтары ғына. Улар, үҙҙәренең ошо кире ҡағыусы ҡараштарына дәлил итеп, көньяҡ мәҙәни үҙәктәрендә Арҡайым кеүек тораҡтарҙың иштәре (аналогтары) булмауына һылтана.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

# БЫЛ БАЛЫҠҠА...

## ике миллион йыл!



**Ике миллиондан ашыу йыл элек йәшәгән ташҡа әйләнгән балыҡ табылған. Уны Өфөлә йәшәүсе Роман Осокин үҙенең балыҡ тоторға яраҡкан Иглин районында, Охлебинино ауылы янында тапҡан.**

- Манчазы йылғаһы тамағында эзбиз тоҡомло таштар бик күп. Уларҙа ҡыҙыҡлы әйберҙәр табырға мөмкин. Шулар араһында балыҡтың ҡабырғаһы һөйәгенә оҡшаған ылымыҡлы таш таптым да инде. Таҙартып ҡараһам, унда, ысынлап та, боронғо балыҡтың эҙе бар! Уны өйөмә алып ҡайттым, раритет итеп һаҡлайым, - тип һөйләне ул "Эксперт Башкортостан" гәзитенә.

Ғалимдар әйтеүенсә, таштағы балыҡҡа ике миллиондан ашыу йыл, ул бик яҡшы һаҡланған.

- Бик яҡшы өлгө! Күп йылдар эшләйем, әммә бындай яҡшы эҙҙе күргәнем юҡ ине. Уникаль табыш. Камбалаға оҡшаған, кәүҙәһе, ҡабырғаһы, ҡойроғо, хатта тәңкәләре лә бар. Башы ғына күренмәй. Уға кәмендә 2 миллион йыл. Ул ваҡытта боронғо диңгеҙ Аҡсағыл тип аталған. Ул Урал тауҙарына тиклем еткән, бындай балыҡтар ярға яҡын йәшәүе ихтимал, - ти палеонтолог, геология-минералогия фәндәре кандидаты, геология институтының өлкән фәнни хеҙмәткәре Рөстәм Яҡупов.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Шулай уҡ Днепр ярҙарында күрһәткән тиңһеҙ батырлыҡтары өсөн Советтар Союзы Геройы исеменә 58-се атлы полктың пулемет взводы командиры Дәүләтов Әбдерәүф Ғәни улы (Әбйәлил районының Хәлил ауылынан), шул уҡ полктың 4-се эскадроны командиры, гв. өлкән лейтенанты Анатолий Михайлович Рудой (милләте буйынса украин, тыумышы менән Белгород өлкәһенең Борисовка ауылынан), сабельниктар взводы командиры, гв. лейтенанты Евгений Федорович Манахов лайыҡ була. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Ә.Ғ. Дәүләтов 1943 йылдың 27 октябрендә, А.М. Рудой 1943 йылдың 14 ноябрендә Белоруссия ерендә барған алыштарҙа батырҙарса һәләк була. Е.Ф. Манахов һуғыштан иҫән-һау ҡайта, Мәскәү ҡалаһында йәшәй, совет сауҙаһы өлкәһендә юғары вазифаларҙа хеҙмәт итә.

4-се эскадрондың йылға аша имен-аман сығыуы хаҡында хәбәр алғас, полк командиры, гв. подполковнигы Кусимов гв. өлкән лейтенанты П.Г. Язенконың 2-се эскадронына Днепрҙың уң яҡ ярына сыға башларға бойороҡ бирә. Шул мәлдә дивизияға 2 ярымпонтон килтерелгән була. Шуға күрә һәр бер рейс өсөн тәғәйенләнгән тере көс һәм ҡорал күбәйтелә бирә. 2-се эскадрон яугирҙары һәм ике миномет взводы кәмәләрҙә һәм һалдарҙа йылға аша хәтәр юлға ҡуҙғала. Улар йылға уртаһына етеүгә, немецтар артиллерия һәм миномет уты аса. Кәмәләрҙең береһе снаряд ярсығы тейеп тишелә, уның эсенә һыу тула башлай. Эргәлә генә килгән һалдан сабельный взвод командиры ярҙамсыһы, гв. старшинаһы Ҡәйүм Хәбибрахман улы Әхмәтшин тиҙ генә һыуға һикерә, ошо кәмәгә күтәрелеп, үҙенең күлдәген кәмәләге тишеккә тыға. Яугирҙар, кәмәләге һыуҙы пилоткалары менән һирпеп алып, йылғаға түгә, кәмә шул арала уң яҡ ярға килеп етә.

Дошмандың бер рота һалдаты, көслө артиллерия утынан файҙаланып, контратакаға ташлана. Был хәлдәр төн уртаһында була, ҡараңғыла ҡайҙа дошман, ҡайҙа үҙебеҙҙекеләр булыуын да белеүе ҡыйынлаша. Һөҙөмтәлә Ҡ. Әхмәтшин взводы дошман ҡамауында ҡала. Беҙҙең яугирҙарҙы төрлө яҡтан уратып алған немецтар, гвардиясыларҙы бына-бына әсирgә алабыҙ тип, яҡынлашҡандан-яҡынлаша бара. Атыш ныҡ көсәйә, әммә яугирҙарҙың патрондары ла бөтә. Ошо мәлдә Ҡәйүм Әхмәтшин яугирҙарға: "Гранаталарығыҙҙы әҙерләгеҙ! Уларҙы ташлау менән дошман ҡулсаһын йырып сығырбыҙ", - тип өндәшә. Ул үҙе туҡтауһыҙ атып торған дошман пулеметына яҡын ғына шыуышып барып, граната ташлай, уның расчеты юҡ ителә. Яугирҙар шундуҡ, немецтар өҫтөнә гранаталарын ырғытып, алға ынтыла. Батыр төркмән егете Клычнияз Әғзәм улы Азалов (Төркмән ССР-ның Мары ҡалаһынан) гранаталары һәм штыгы менән 10-лап дошман һалдатын һәм офицерын сафтан сығара. Яуҙаштарынан алғараҡ китеп өлгөргән Азаловҡа ике немец һалдаты ташлана, әммә уларҙың береһе уның штыгына юлыға. Ошоға тиклем үҙе лә өс мәртәбә немец штыгынан яраланған яугир, ҡанһырап, ергә ауа. Уны иптәштәре бик ауыр хәлдә яу яланынан алып сыға. Госпиталдә дауаланып сыҡҡас, уны икенсе бер уҡсы полкҡа ебәрәләр. Ул һуңынан фронтта батырҙарса һәләк була. Днепр плацдармында күрһәткән ҡаһарманлығы өсөн уға үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Ошо юғары наградаға батыр егеттәребеҙҙең береһе - гв. старшинаһы Ҡәйүм Әхмәтшин дә лайыҡ була. Ул Ейәнсура районының Ҡара Көсөк ауылында тыуып үҫә, 1943 йылдың 10 ноябрендә батырҙарса һәләк була, Белоруссияның Уборок ауылында ерләнгән.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ

# УЛ НАМЫҪ ҺЫМАҠ:

## йә бар, йә юҡ

**Бөгөн был иң көнүҙәк тема: патриотлыҡ, йәғни беҙ уны хәҙер башҡортсаға ауҙарып, илһөйәрлек, тибеҙ. Был тема телдән төшкәне лә булманы, әлбиттә. Ә шулай ҙа ул быйыл бөтөн етдилегендә, бөтөн асылында күтәрелә: яңы дәүерҙә, яңы шарттарҙа ватандаштарҙың ошо сифаты - патриотлығы илгә янаған ҡурҡынысҡа ҡаршы торорға тейеш икәне ҡапыл иҫебеҙгә төшөп, ойой яҙған аңды уятҡандай булды. Гәзитебеҙҙәге күп материалдар, сығыштар ошо илһөйәрлек темаһы менән һуғарылған булһа ла, беҙ артабан да ул хаҡтағы һүҙҙе һыҙыҡ аҫтына алып ҡуйыртмаҡсыбыҙ. Әлегә һорауҙарыбыҙҙы Учалы районында йәшәп ижад итеүсе зыялы, илһөйәр шағирәбеҙ Наилә ХӘМБӘЛИЕВАға юлланыҡ. Ошондай уҡ һорауҙар өҫтөндә башҡа авторҙарыбыҙ һәм уҡыусыларыбыҙ ҙа уйланып, яуаптарын яҙып ебәрә ала. Әйҙәгеҙ, фекер алышайыҡ әле.**



**Патриотизм, йәғни ватансылыҡ, ниндәй генә заманда ла кешенең рухи торошон, әхлаҡи-мәҙәни кимәлен сағылдырып ҡына ҡалмай, был тойғо илдең сәйәси, иҡтисади, социаль һәм мәҙәни проблемаларында ла хәл иткес әһәмиәткә эйә, тигән фекерҙе нисек дәлилләр инегеҙ?**

- Ватансылыҡ, йәки илһөйәрлек тойғоһоноң асылында Ватанға, тыуған илгә ҡарата булған эскерһеҙ һөйөү ята. Эскерһеҙ. "Мин Тыуған илем өсөн ( ауылым, ҡалам, халҡым өсөн) алһыҙ-ялһыҙ эшләнем, фәлән-фәлән ғәмәлдәр башҡарҙым - бына мин ысын патриот", тигән кешеләрҙе мин ҡабул итә алмайым. Атай, әсәйгә булған һөйөү нисек эскерһеҙ булған кеүек, Ватанға булған һөйөү ҙә түләү талап итмәй. Илһөйәрлектә бизмәндәр юҡ. Унда аҡ һәм ҡараны, яҡшы һәм яманды һалып үлсәп булмай. Иленә ҡарата булған ғорурлыҡ тойғоһон күккә олғаштырып, оят, әрнеү тойғоһон йоторға мәжбүр итә ул илһөйәрлек. Атайыңдың, әсәйеңдең битенә төкөрә алмаған кеүек, Илеңдең битенә лә төкөрөп булмай. Илһөйәрлек - ул йөрәк һымаҡ: йә тибә, йә юҡ. Ул намыҫ һымаҡ: йә бар, йә юҡ.

Эйе, патриотизм һәр дәүерҙә лә илдәр алып барған сәйәсәткә йоғонто яһаусы төп фактор, тиһәк хата булмаҫ. Сөнки һәр илдең (хөкүмәт тип әйтәйек) төп маҡсаты, бурысы ла - сиктәренең ныҡлығын булдырыу, граждандарының көнкүрешен яҡшыртыу. Был йүнәлешкә һеҙ һанап киткән сәйәси, иҡтисади, социаль һәм мәҙәни проблемаларҙың барыһы ла инеп китә ул. Ҡайһы илдә ни кимәлдә тормошҡа ашырыла был бурыс - икенсе һорау. Әммә был тәңгәлдә, ҡайһы ил булдыҡлыраҡ, шул илдең граждандарында ватансылыҡ тойғоһо юғарыраҡ, тигән фекер бар.

**Илһөйәрлек тойғоһо Тыуған илде яратыу, уға йәнең-тәнең менән бирелгәнлек, уның менән ғорурланыу ғына түгел, бәлки, шәхси мәнфәғәттәреңде, хатта ки, кәрәк икән, ғүмереңде лә Тыуған иленә бағышларға, ҡорбан итергә лә әҙер тороу бит ул. Быны гражданлыҡ өлгөрөүе тип әйтергә буламы? Ғөмүмән, кем һәм ниндәй ул - гражданин һәм патриот?**

- Үрҙә әйтеп киткән инем, илһөйәрлек - ул Иленә ҡарата эскерһеҙ һөйөү. Шундай һөйөү генә Илең хаҡына шәхси мәнфәғәттәреңде ситкә ҡуйҙыра, йәшәү менән үлем араһында һуңғыһын һайларлыҡ көс бирә. Юҡ, был гражданлыҡ өлгөрөүе түгел. Гражданлыҡ һәм илһөйәрлек араһындағы айырманы мин нисек аңлайым? Ябай ғына итеп әйткәндә, гражданлыҡ өлгөрөүе - ул йәмғиәт тормошонда актив ҡатнашырлыҡ кимәлгә етеп үҫешеү.

Был өлгөрөү хөкүмәт алып барған сәйәсәткә баш ҡағып тороу тигәнде лә аңлатмай. Үҙ фекере булып, белем кимәле ярайһы булған, Ватан киләсәге өсөн янып йәшәгән шәхес - үҙ иленең өлгөргән гражданы тип әйтер инем. Ә илһөйәрлек - ул тойғо, хис. Өлгөрөү кимәленә еткән граждан ҡорбан булыуҙан баш тарта алһа, ысын илһөйәр - юҡ. Ҡорбан булырға әҙерлек - уның булмышында.

**Илһөйәрлек ил тарихының һәр осоронда ла хәл иткес көс булды, ә бөгөн был турала айырыуса йыш телгә алабыҙ. Ил Президенты Владимир Путин, патриотизм - Рәсәйҙең төп милли идеяһы, тип атаны. Ә шулай ҙа, кем ул бөгөнгө илһөйәр?**

- Һуңғы сәйәси ваҡиғалар Рәсәйҙә патриотизмдың ни тиклем юғары кимәлдә икәнен күрһәтте, асып һалды. Тиҫтә йылдар йәмғиәттәге етешһеҙлек, ғәҙелһеҙлеккә зарланып йәшәгән беҙ ҡыҫҡа бер ваҡыт арауығында бер төптән булдыҡ та ҡуйҙыҡ. Ил етәкселегенең бөгөн алып барылған сәйәсәтен күпселек хуплай бит. Ул сәйәсәт яҡты, сит ил йоғонтоһонан азат, үҙаллы киләсәк хаҡына икәнен аңлай, түҙергә лә риза. Мәлдән файҙаланып, түңкәрелеш яһайыҡ, тигән көстәргә ҡаршы яуап ҡайтара белә был сәйәсәт. Был тиклемде көтмәгән, халыҡ ҡәнәғәтһеҙлеген власҡа ҡаршы ҡорал итеп ҡулланырға ниәтләгән радикаль оппозиция, ҡайһы бер сит илдәр аптырап ҡалды. Рәсәй халҡының ойошҡанлығын ни тип аңлатырға белмәнеләр. Ә был бары тик беҙҙең менталитет. Ауыҙым тулы ҡан булһа ла, яттар алдында төкөрмәм, тигән намыҫ ауазы. Рәсәй составында йәшәгән төрлө милләт вәкилдәрен бер туп итеп берләштереп алған халәт был. Быуаттар буйына формалашҡан берлек. Нимә генә тимәһендәр, беҙ - рәсәйлеләр. Милли идея - рәсәйле булған күп һанлы милләттәрҙең бер яҡҡа табан йүнәлеше. Ә бөгөнгө илһөйәр - ул бәләкәй Ватанын һәр күҙәнәге менән яратып, ҙур Иленә тоғро ҡалған намыҫлы шәхес.

**Совет заманы йылдарында йәшәүсе быуындарҙа, ябай һәм ярлы ғына тормош шарттарында йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, эскерһеҙ хеҙмәт энтузиазмы, Тыуған илде һөйөү, уның менән ысын күңелдән ғорурланыу тойғолары көслө булды. Был тойғо, әйтерһең дә, тыумыштан бирелгәйне беҙгә. Был совет пропагандаһы һөҙөмтәһе инеме, әллә ата-бабаларыбыҙ ҡанынан, уларҙың ватансылыҡ гендарынан күскән "иммунитет" инеме? Бөгөнгө йәштәребеҙҙә был дауам ителәме?**

- Үрҙә әйткәнемсә, илһөйәрлек тыумыштан бирелгән матур бер сифат. Һәм, әлбиттә, совет заманының пропагандаһы был сифатты үҫтереүгә тос өлөш индерҙе. Иртәләрҙе Советтар Союзы гимны менән башлау, мәктәптәрҙәге патриотик тәрбиә, төрлө социаль яҡлауҙар - былар барыһы ла совет кешеһен илһөйәрлек рухында тәрбиәләне. Әйтергә кәрәк, "тимер шаршау" ҙа быға булышлыҡ итте. Ни өсөн тигәндә, бөйөк Рәсәй тип үҫкән беҙ башҡа төрлө мөхит барлығын белмәнек. Сит илдәрҙән кергән сифатлы тауар дефицит булды, уларҙы индергән фарцовщиктар хөкөм ителә ине. Был беҙҙең тарих. Һәм күпселек беҙ шундай ҡарарҙар менән риза инек. Матур йәшәргә теләгән уларға ытырғаныу тойғоһо ла кисерҙек. Был күренеште нисек атарға ла мөмкин. Пропаганда һөҙөмтәһе тип тә, патриотизм тип тә. Әммә иң мөһиме, минеңсә, һуңыраҡ күренде. Горбачев иғлан иткән асыҡлыҡ сәйәсәте илһөйәрлектең ысын хаҡын асып һалды. Кемдер төкөрөгөн сәсеп Рәсәйҙе фашланы, кемдер уйға ҡалды, ә кемдер, был барыбер минең илем, уны мин ниндәй булһа ла яратам, тине.

Бөгөнгө йәштәрҙә дауам ителәме был рух? Эйенән бигерәк юҡ тип әйтер инем. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы. Көнбайыш фильмдарында, музыкаһында үҫкән быуындың аңын таҙартып алыу кәрәкме? Ғөмүмән, был аң шулай уҡ бысраҡмы икән? Махсус рәүештә кәрәкмәйҙер. Көсләп асылған күҙҙең нуры булмаған кеүек, был аҡ, был ҡара тип тыҡып торорға лә кәрәкмәй. Йәштәрҙе илһөйәр итеп тәрбиәләүҙең бер генә юлы бар: Ватаныбыҙҙы алдынғы, бай һәм азат итеп үҙгәртеп ҡороу.

**Башҡортостан - беҙҙең кесе Ватаныбыҙ, тыуған, торған еребеҙ. Рәсәйҙе лә уны һөйгән кеүек һөйәбеҙ. Тыуған телебеҙҙе, халҡыбыҙ тарихын, уның әхлаҡ-йолаларын, милли рухиәтебеҙ хазиналарына булған һөйөү хистәребеҙҙе һәр нәмәне кирегә һапларға күнеккән реакцион көстәр "милләтселек" мөһөрө һуғып, яла яғырға әҙер тора. Ундайҙарға нисек ҡаршы торорға, ниндәй яуап бирергә?**

- Кире көстәр һәр ваҡыт булған һәм буласаҡ. Бөгөн, эйе, улар айырыуса нескә эш итә. Йәмғиәттең төпкә төшөп уйланып, хәл-ваҡиғаларға анализ бирә белмәгән ҡатламын үҙ артынан эйәртә белә улар. Милләтселек менән милләтеңде һөйөү араһындағы нескә сикте үҙ файҙаларына ҡуллана беләләр. Мәғлүмәти һуғышта еңеү-еңмәү бик мөһим бөгөн. Аптырап, юғалып ҡалғандар бихисап. Был тәңгәлдә төптән уйлап, һынап ҡына эш итергә кәрәк. Власта ултырғандар провокацияларға бирелергә тейеш түгел. Милләтте милләткә, бер милләт кешеләрен үҙ-ара һөсләтеүҙәр күп. Ҡыҫҡаһы, тарих өсөн бик әһәмиәтле һәм мөһим заманда йәшәйбеҙ. Йылдар үтер, хәтирәләр тулы китаптар яҙылыр. Яҙған берәү ул китапты үҙ күҙлегенән сығып һүрәтләр.

**Ата-бабаларыбыҙ ил азатлығын, тыныс тормошто яҡлап, ғүмерҙәрен фиҙа ҡылған. Уларҙың ҡаһарманлығы бөгөнгө быуын йәштәре өсөн ватансылыҡ өлгөһө булып дауам итәме? Ошо юҫыҡта Башҡортостан мәктәптәрендә башланған "Шайморатовсылар класы" хәрәкәтенә мөнәсәбәтегеҙ ниндәй?**

- Бәйләнештә бер яҙмаға тап булдым. Уҡып сыҡтым да болоҡһоп киттем. Оло кешенең бөгөнгө йәштәргә мөрәжәғәте ине. Йәнәһе лә, йәштәр бөгөн тәртипһеҙ, әҙәпһеҙ. Уларҙың бер идеалы юҡ, маҡсатһыҙлыҡ һаҙлығына батҡандар. Һәм иң аптыратҡаны, "Беҙҙе, юғалып барған ололарҙы күреп, ҡәҙерләп ҡалығыҙ, йәштәр", тигән сәйер фекер әйтелә. Был яҙмаһы менән автор оло быуын менән йәштәр араһына ҡуйы ғына итеп һыҙыҡ һыҙа. Йәштәр икенсе планетанан төшкәнме ни? Беҙ, оло быуын, бер йәмғиәт, улар төптө икенсе йәмғиәтме әллә? Кем тәрбиәләгән һуң ул йәштәрҙе? Беҙ түгелме? Минең баламдың ҡырын ҡылыҡтары була икән, үҙемдән яуаплылыҡты һыпырып алып, кемгәлер япһарырға тейешменме?

Юҡ, йәштәр бөгөн, киреһенсә, маҡсатлы, әүҙем, алдынғы улар. Батырҙар, ҡыйыуҙар, үҙ һүҙҙәрен ҡурҡмай әйтә беләләр. Беҙҙең кеүек цензура сәскә атҡан осорға тура килмәне уларҙың үҫкән мәле. Азатлыҡ, демократия идеялары менән һуғарылған сит ил киноларын ҡарап үҫкән быуында ниндәй ҡурҡыу булыуы мөмкин? Ана шул прогрессив, яҡты көстө кәрәкле юҫыҡҡа йүнәлтеү - беҙҙең бурыс та инде. Әлбиттә, алмашына яҡшы көнкүреш, тыныс ил тәҡдим итергә тейешбеҙ.

Ә "Шайморатовсылар класы" булһын ул. Беҙҙең быуын дини тәғлимәттәрҙән йыраҡ булһа ла, ана шундай бер идея менән берләштерелгән ойошмаларҙа үҫте. Әммә был идея ғына булып ҡалмаһын ине. Юғиһә, шулай ҙа була торған: кемдер берәү эш күрһәтте, маҡтау ҡағыҙы алды ла, вәссәләм. Йәш быуынды тәрбиәләү бер-ике программа менән генә башҡарылмай ул. Был иҫ киткес сетерекле, ентекле һәм оҙайлы процесс.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**һорауҙар бирҙе.**

**РЕДАКЦИЯНАН:**

**Илһөйәрлек тураһындағы һөйләшеүгә ҡушылып, һеҙ ни тиер инегеҙ, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ? Бөгөн ҡапма-ҡаршы көстәр алышы ҡайҙалыр алыҫта, Донбасс ерендә генә түгел, ә беҙҙең эргәлә, беҙҙең тормошта, беҙҙең аңдарҙа ла бара бит. Көн һайын, минут һайын беҙгә яуызлыҡҡа, ялғанға, вәхшилеккә төрөлгән мәғлүмәт ырғытыла. Мәғлүмәти һуғыш эсендәбеҙ. Ошондай шарттарҙа илһөйәрлегебеҙ беҙгә ваҡиғаларҙы дөрөҫ анализларға, аумаҡайланмаҫҡа, ҡаҡшамаҫҡа ярҙам итә, итәсәк.**

**Әйҙәгеҙ, "Илһөйәрлек мәктәбе" рубрикаһында бергәләп фекер алышайыҡ. Был мәктәпте алыҫтан эҙләү кәрәкмәй: ул һеҙҙең ғаиләлә, мәктәптәрҙә, йәшәгән урынығыҙҙа үткәрелгән мәҙәни-спорт сараларында, туристик һуҡмаҡтарҙа, ҡыҫҡаһы, һәр кем күңеленә рух, ғәм, илһөйәрлек, телһөйәрлек орлоғо һалынған майҙандарҙа. Әгәр ҙә һеҙ беҙҙең гәзит биттәрендә яҡтыртырға теләгән ваҡиға ысынлап та илһөйәрлек өлгөһө була ала икән, яҙығыҙ. Көтәбеҙ.**

# ЗАТЫҢ НИНДӘЙ, АТЫҢ ШУНДАЙ...

## Ниңә беҙҙә хатта бер туғандар дошманлаша?

*(2003 йыл, №32)*

**Әңгәмәлә Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың мәғариф отличнигы Сәбилә Ғәйзулла ҡыҙы СӨЛӘЙМӘНОВА менән шағир, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ҡәҙим Әбделғәлим улы АРАЛБАЙ тәрбиә хаҡында фекер алыша.**

**➔ Сәбилә өләсәй-картәсәйҙең, Ҡәҙим олатай-картатайҙың ейән-ейәнсәрҙәрен тәрбиәләгәндә үҙҙәренең генә ысулдары бармы?**

**С. Сөләймәнова:** Ҡартәсәй булараҡ, мин улдарымдың төп тәрбиә эшенә ҡыҫыла алмайым. Ҡасандыр уларҙың үҙҙәренә бирелгәндең балаларына нисек тапшырыуын күҙәтеп кенә барам. Шулай ҙа, рухи тәрбиәгә, туған телде өйрәтеү мәсьәләһенә килгәндә, быларын үҙемдең намыҫ эшем тип ҡарайым.

**Ҡ. Аралбай:** Тәүге ҡыҙыбыҙ Айгөл Иҫке Собханғолда тыуҙы. Уны яҙ көнө бына-бына ташырға торған Агиҙел аша алып сыҡтым. Беҙ сығып та киттек, һыу ташып, күперҙе ағыҙып алып та китте. Бала тәрбиәләүҙе лә мин ана шуға тиңләр инем. Тыуғандан алып үҙ ҡулыңда үҙең менән йөрөтмәһәң, уның йылғаның теге ярында тороп ҡалыуы ла бар, йә булмаһа, тормош ташҡыны үҙ ағымы ыңғайына алып китеүе мөмкин. Ҡыҙҙарымды күтәреп тиерлек йөрөтөп үҫтерҙек. Иң тәүҙә баланың уйын донъяһында атай кеше үҙ урынын табырға тейеш. Ә инде ейән-ейәнсәрҙәрҙе тәрбиәләгәндә ҡайһы саҡ үҙемдең характерҙы ла күрһәтеп алам. Әйткеләргә лә, етешһеҙлектәрен күрһәтергә лә тура килә. Тәүҙә үпкәләйҙәр, һынап ҡарап йөрөйөм, аҙаҡ минең хаҡлыҡты аңлағас, килеп ғәфү үтенәләр, йәки юхалай башлайҙар. Ҡартатайҙың ғаиләлә үҙ абруйы була, Аллаға шөкөр, уны төшөргәнем юҡ. Өләсәйҙәре күберәк рухи тәрбиә бирә, йырҙар, бәйеттәр өйрәтә. Гөлнур менән Ильяс башҡаруындағы егермеләп йыр өләсәй мәктәбенән алынған.

Ҡала ерендә бала тәрбиәләүҙең үҙ проблемалары бар. Ғаиләлә бала нисек кенә тәрбиәләнмәһен, урамға, ҡырҡ ата балалары араһына сыҡҡас, кәмһенеү комплекслылығы кисерә башлай. Психологтар быны "терһәк психологияһы", тип тә атай, йәғни терһәгең менән үҙ яныңда яҡыныңды, ҡандашыңды тойоу. Ҡытайҙар, мәҫәлән, Американа күпләп килгәс, үҙ кварталдарын булдырған. Тимәк, быныӊ менән улар рухи берҙәмлеген дә һаҡлай.

**С. Сөләймәнова:** Элек өфөләр бына шундай рухи берҙәмлек, ниндәйҙер таяныс эҙләп, "Аҡ тирмә"гә, сибайҙар "Арҡайым" клубына йыйыла ине. Хәҙер быны онотоҡ. Ҡайһы саҡта шул тиклем кәрәк булып китә үҙ милләттәштәрең менән аралашыу.

# ЙӘШӘҮҘЕҢ МӘҒӘНӘҺЕ ЙӘШӘЙ БЕЛЕҮҘӘ.

## Нурғәлиндар бәхетте шулай аңлай

*(2003 йыл, №41)*

**Башҡортостан Фәндәр академияһы академигы, филология фәндәре докторы, тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, Яҙыусылар союзы ағзаһы, профессор Зиннур Әхмәҙи улы НУРҒӘЛИН тормош иптәше Ғәптиә Ғәбиҙулла ҡыҙы менән тәрбиә тураһындағы әңгәмәлә ҡатнаша.**

**➔ Һеҙ биш тиҫтә йылдан ашыу татыу йәшәгәнһегеҙ. Хәҙер иһә йәштәр ҡауышып та өлгөрмәй, айырылышып та ҡуя. Күптәр был осраҡта заманға, уның ауырлығына һылтана. Сағыштырып ҡараһаң, кирелеһенсә, әле еңелерәк түгелме икән йәшәүе?**

**Ғ. Нурғәлина:** Иң элек ул ғаилә тәрбиәһенә ҡайтып ҡала. Балаларҙа ата-әсәһенә ҡарата яуаплылыҡ тойғоһо һеңдереү етешмәй. Ата-әсә балаһы хаҡында ниндәй хәстәрлек күрә, балала ла, үҫә килә, уларға ҡарата шундай уҡ ҡараш нығына барырға тейеш. Баланы киләсәктә ата-әсәһенә ярҙамсы булыу теләге һәр саҡ борсоп торһон. Шул саҡ ул тормошта ла үҙен икенсерәк тотасаҡ. Ҡайһы бер ата-әсә балаһын үтә шаштырып ебәрә, уның теләген үтәүҙә сик белмәй. Икенсе берәүҙәр балаларын баҫып тота, уның ихтыяр көсөн быуа, аҙым һайын ҡулына һуғып тора. Ике осраҡта ла һәҙәмтә үтә күңелһеҙ барып бөтә. Иң мөһиме, балалар менән рухи теләктәшлек кәрәк.

Йәштәрҙең йыш айырылышыуында мәктәптең дә ғәйебе аҙ түгел. Унда белем беренсе урынға ҡуйыла, әхлаҡ, этик тәрбиә бирәүгә иғтибар етешмәй. Уҡытыусы иң элек тормошҡа өйрәтеүсе булырға бурыслы. Ул баланың күңелен, холҡон, рухын тәрбиәләүҙә.

Мин үҙ балаларымды мөмкин тиклем ихлас булырға өйрәтергә тырыштым. Ихласлыҡ ул күңел төбөнән килә. Күңеле саф кеше генә һәр эштә ихлас була, башҡалар менән дә ихлас мөғәмәлә итә, ихлас һөйләшә, уларға изгелек эшләй.

**З. Нурғәлин:** Барыһы ла ата-әсәнән алған тәрбиәнән, үҙен үҫкән ғаилә традициялары рухынан килә. Хәҙерге йәш ғаиләләрҙең тотороҡло булмауының бер сәбәбе, бәлки, ошондалыр ҙа. Әхлаҡ, тормош стиле үҙгәреү генә түгел, боҙолоуындалыр. Үҙгәреш үҙе хәүефле түгел, ул тормоштоң ағышы, ә бына уның кире яҡҡа боролоуы - хәүефле.

Яңыраҡ бер гәзиттә Башҡортостандағы ғаиләләр хаҡында мәҡәлә уҡығайным. Бақтиһәң, ғаиләләрҙең ныҡлығы буйынса Әбйәлил районы беренсе урында тора икән. Унда 50 йылдан ашыу бергә йәшәүселәр 231 ғаилә, ә Өфөлә 300 генә. Миллиондан ашыу халҡы булған ҡалаға был һан бик аҙ. Быны нисек аңлатырға була һуң? Әбйәлилдә боронғо тормош стиле, йолалар, әхлаҡ һаҡланып ҡалған, минеңсә. Беҙҙең яҡҡа килгән килендәр элегерәк ҡәйнә-ҡайныһы, ҡайнағаһы менән ҡапыл ғына һүҙ күтәреп һөйләшеп китмәй ине. Минең әсәйем мәрхүмә юл аша торған ҡайнағаһы менән килгәненә ун йыл үткәс кенә тәүге тапҡыр һөйләште. Бер-береңә ошондай ихтирам, бәлки, ғаилә ныҡлығына хеҙмәт иткәндер ҙә.

Хәҙерге заман әхлағын телевидение баштүбән әйләндерҙе. Ундағы тәртипһеҙлектәрҙе ҡарап ултырған йәш кеше фильмды йәшәү нормаһы итеп ҡабул итә, "был - ғәйеп эш түгел" тип күңеленә һалып ҡуя. Ауылға ҡайтһам, йәштәргә ҡарайым да, күңелдә ниндәйҙер бер борсолоу уяна. Уларҙы ғәйепләп әйтмәйем, әммә йәшәү стиле ныҡ үҙгәрҙе. Өсөнсө сәбәп - араҡы, эскән кешенең һүҙенә бөтөнләй ышанырға ярамай. Кеше эскән икән, нисек кенә һинең алдыңда ал да гөл булмаһын, ниндәй генә һүҙҙәр менән ант итмәһен, араҡы барыбер үҙенекен итә.

Шулай итеп, сит традициялар, ят йолалар тәьҫирендә беҙҙең әхлаҡ ныҡ үҙгәрҙе. Әйтәйек, Әбйәлилде кәртәләп алып ҡына, элекке әхлаҡ менән йәшәткәндә, ундағы ғаиләләрҙең изге йолалары һаҡланыр, улар ныҡлы булыр ине. Әммә был мөмкин түгел.

# ҠАҘАҠБАЕВТАР...

## Ейәнғол уҙамандың әйткәненә тоғро ҡалған

*(2004 йыл, №50)*

**Хәйбулла районының Һаҡмар Наҙарғол ауылында йәшәп ятыусы Бибиһан һәм Мөхәмәтйән ҠАҘАҠБАЕВТАР менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**➔ Һеҙ балаларығыҙ тәрбиәһенә ниндәй сифаттар һалырға тырыштығыҙ?**

**Мөхәмәтйән ағай.** Ейәнғол уҙамандың әйткәнен һәр саҡ иҫтә тоттом: кешегә яҡшы булығыҙ, һауаланмағыҙ, һоранмағыҙ. "Берәйһе ашатһа икән, берәйһе бирһә икән", - тип, кешенән өмөт итеп тормағыҙ, тип ҡабатлай ине ул. Тәңре һеҙгә бик ҙур байлыҡ - аң, аяҡ-ҡул, баш биргән. Кешелә бар ағзанан һеҙҙе лә мәхрүм итмәгән. Бәндәгә бәндә булып һоранмағыҙ, ти торғайны. Шөкөр, һоранманыҡ. Бибиһан менән икәүләшеп тырыштыҡ. Тәңре бер ҡыҙ, биш ул бирҙе. Ҡоротма Ҡаҙаҡбаевтар нәҫелен, тигәндер.

Сәйетгәрәй олатайым: "Белем кеҫәлә яткан аҡса менән бер. Кәрәк саҡта тотаһың да файҙаланаһың. Уҡығыҙ, белем алығыҙ", - тине. Ул һүҙҙәрҙе лә иҫтә тоттом. Балаларҙы уҡыттым. Унан һуң, милли ғорурлыҡ көслө булды әсәйемдә. Тирә-йүндәге аҙәпһеҙлекте халҡынан айырылып, илгә сәселгән килмешәктәрҙән күрҙе. Үҙебеҙҙең ижадыбыҙҙы яҡшы белде, шуға ла тәрбиә ҡанундарыбыҙҙы ла юғары баһалай ине.

**Бибиһан апай.** Ауылда берәй тәртипһеҙлек тураһында ишетеп ҡалһа: "Килмешәктәр башланы намыҫһыҙлыҡты. Улар арҡаһында ололар әйткәне һанға һуғылмай", - ти торғайны бейем. "Балаларҙы нисек тә ҡурсалап алып ҡалырға тырыш, килен. Башҡорт улай булмаған, тип, башҡортлоҡтарына баҫым яһа. Телдән айырма. Туған тел - беренсе ярҙамсың булыр. Телде белһә, өлкәндәр әйткәнен аңлар, телде белһә, күңелдәренә моң ҡуныр", - тиер ине. Бейемдең һүҙҙәрен яҙа барып, китап итеп сығарырлыҡ ҡына ине инде.

**Мөхәмәтйән ағай.** Милләт ғорурлығы булмаған кешенең бар уй-фиғеле ашап-эсеүҙән артмаҫ, ҡорһаҡ ҡына уйлаған кешелә әҙәп тә самалы ғына, үҙенә кәрәк мәлгә етерлек кенә булыр, ти ине шул әсәйем. Үҙе кешегә барһа, иң тәүҙә китаптарына күҙ ташлар ине. Китаптары булмағандарға иҫкәртеү ҙә яһаған-дыр. Тәғәйен ишетмәһәм дә, ни өсөндөр шулай иҫтә ҡалған. Ә әсәйемдең һүҙенә ҡолаҡ һалалар ине. Хатта үҙенән өлкәнерәктәр ҙә кәңәшкә килә ине.

**Бибиһан апай.** Бейемем әйткән аҡылдың иң иҫтә ҡалғаны тағы шул: "Килен, балаларың ямантел булмаһын. Кешегә ҡарата йомшаҡ телле булһындар, кеше хәленә инеп өйрәнһендәр", ти ине. Унан һуң бейемдең бик матур сифаты - кеше һөйләмәне. Рәнйер урында ла ғәйепләп һукранманы. Мин берәйһенең ауыр һүҙен әйтһәм: "Үпкәләмә уға, килен, Хоҙай үҙе туралай ул", - тиған булыр ине.

# ҠАРТАТАЙҘАРҘЫҢ МАТУР ӨЛГӨҺӨНДӘ...

## ейәндәрҙе тәрбиәләйбеҙ

*(2011 йыл, №35).*

**Тәрбиә тураһындағы әңгәмәлә ҡоҙағыйҙар - Башҡортостандың атҡаҙанған химигы, техник фәндәр докторы, Өфө дәүләт нефть-техник университеты профессоры Әмир Фәтҡулла улы ИШКИЛДИН менән 45 йыл иңгә-иң тероп ғүмер иткән Таңһылыу Әхмәт ҡыҙы һәм фольклорсы-ғалим, филология фәндәре кандидаты Мөхтәр Мофаззал улы СӘҒИТОВтың ғүмер юлдашы Тәлиғә Нәһетдин ҡыҙы ҡатнаша.**

**➔ Һеҙ ирегеҙгә, милләтегеҙгә тоғролоҡ һаҡлай белгән, үҙ халҡығыҙға матур холоҡло балалар үҫтергән ҡатындарһығыҙ. Иң мөһиме, һеҙ башҡорт ғаиләһенең иң күркәм моделен тыуҙыра алған ғаиләләр ҡора алғанһығыҙ. Ошо моделде тыуҙыра алмай, тырымтырағай йөрөгән хәҙерге заман йәштәренә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

**Таңһылыу апай:** Беҙ өйҙә гел башҡортса һөйләштек. Балаларыбыҙ Хәбир менән Гөлфиәнең дә, ейән-ейәнсәрҙәрҙең дә теле башҡортса асылды. Әмир башҡорт телендәге һәр китапты һатып алырға тырыша ине, шуға ла ул һәр яҙыусының һәр әҫәрен уҡымаған хәлдә лә, уларҙы ҡараштырып сыҡҡан кешеләр рәтенән булды. Гәзит-журналдар тураһында әйтеп тә тормайым. Ошо холҡо балаларға ла йоҡҡан. Мәҫәлән, Кәрим ейәнем дүрт йәшендә Рәми Ғариповтың ҡайһы бер шиғырҙарын яттан белә ине. Хәҙер, балалар китап уҡымай, тиҙәр, минең ейәнем китаптарҙы китапханаға барып уҡый. Үҙ милләтенә тоғро булып йәшәһән, уға хеҙмәт итергә ынтылһаң һәм һәр ваҡыт кеше тиған исемгә тап төшөрмәһән, шунан артыҡ бер нәмә лә, сит илдең әллә ниндәй тәрбиә өлгөләре лә кәрәкмәй.

Тағы бер нәмә: башҡорт балаһы мотлаҡ рәүештә башҡорт мәктәбендә уҡырға, башҡорт мөхитендә үҫергә, иптәштәре лә үҙ милләтенән булырға тейеш. Минекеләр икеһе лә 20-се Башҡорт ҡала гимназияһын тамамланы. Рухты өйҙә тәрбиәләйһең, әлбиттә, тик мәктәп тә баланың тормошонда ҙур роль уйнай.

Замана үҙгәрә, тип, ҡатын-ҡыҙға үҙгәрергә кәрәкмәйҙер. Кем әйткән әле тыйнаҡ, әҙәпле булыуҙы кире сифат тип! Тап ошо сифаттарыбыҙ беҙгә башҡорт булып һаҡланып ҡалырға ярҙам итәлер ҙә әле. Ҡатын-ҡыҙҙың бар бәхете - ир ҡатыны һәм әсә булыуҙа.

**Тәлиғә апай:** Ҡатын-ҡыҙ аҡыллы булырға тейеш. Ғаилә көткәндә килеп тыуған төрлө хәлдәрҙе унан башҡа бер кем дә ыңғай ғына итеп көйләп ебәрә алмай. Баҫалҡылыҡ ана шул аҡыллы була белеүҙән килмәйме икән? Ҡәйнәм дә баҫалҡы булды. Мин һәр нәмәне уға ҡарап өйрәнергә тырыша инем. Уның өйөндә гел тәртип, бер ауыр һүҙ әйткән кеше юҡ, донъялары түп-түңәрәк ине. Бер үҙе 9 бала үҫтергән ҡәйнәм балаларына һөйөүен белдереүҙән тартынманы, Мөхтәрҙе бигерәк яратты, ҡайтһаҡ, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне. Килен, серенде бер кемгә лә, хатта минә лә һөйләмә, ана, тышҡа сыҡ та бағанаға һөйлә, ти торғайны. Бөгөнгө заманда ҡатын-ҡыҙ араһында насар ғәҙәттәрҙе үҙләштереүселәр бар, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта уларҙың ҡапма-ҡаршыһы булған инсафлы ҡатын-ҡыҙҙар ҙа күп. Һәр кем үҙенең юлын, йәшәү рәүешен үҙе һайлай. Һуңғы осорҙа юҡ ҡына ваҡиғаны ҡуйыртып, шуны сәбәп итеп, тиҙ генә айырылышып ҡуйыусы йәштәр күбәйҙе.

**✓ Ҡыҙыҡһыныу барыһының да күңелен ҡытыҡланы: нисек унда, фашистар ерендәге йәшәү? Уның ғына түгел, һалдаттарҙың яртыһынан күбеһенең атаһын һәләк иткән ҡәһәрле һуғышты башлаусылар илендә халыҡ ниндәй?**




## Әрмеләрҙә йөрөп сәс еткерҙем...

Шверин - немецтар күҙлегенән ҡарағанда бәләкәй, ә беҙҙең һалдаттар өсөн бик ҙур ҡала. Үҙҙәренең ауылынан йә район үҙәгенән ары китмәгән малай-шалай өсөн бигерәк тә күркәм ер. Уларҙың гарнизоны ҡаланан алыҫ түгел урман араһында, оло юлға яҡын ғына урынлашҡан. Күбеһенсә имән, ҡарағай, шыршы үҫкән урмандар, юл ситтәрендә хужаһыҙ үҫеп, мул уңыш биргән алмағастар менән грушалар, тип-тигеҙ юлдар, тап-таҙа урамдар ауыл батҡағынан яңы сыҡҡан Мир кеүек һалдаттарға иҫ киткес тәьҫир итте. Һуғыш бөткәнгә яңы тиҫтә генә йылдан ашыу ваҡыт үтте, беҙҙә, еңеүсе илдә, һаман емереклек, йәшәү ныҡ ауыр, бөтөн ерҙә ҡул хеҙмәте, етешһеҙ тормош, ә бында үҙ ояһында тар-мар ителгән фашистар илендә гөрләтеп йәшәп яталар! Был нисек була һуң? Һалдаттар быны бер нисек тә аңлай алманы, сөнки уларҙың уйынса еңелгән илдә бөлгөнлөк, аслыҡ, насар тормош хөкөм һөрөргә тейеш ине, ә киреһенсә түгел...

Үҙебеҙҙә саҡта Әлкәлә "учебка" үткәндәге казарма тормошо менән Германиялағы һалдат хеҙмәтенең дә айырмаһы ер менән күк араһы ине. Ярты йылға яҡын шыйыҡ өйрә, һыуҙа бешкән тәмһеҙ бутҡа ашап килгән йонсоу егеттәр бындағы "һалдат паегы"нан тиҙ арала көрәйеп китте, йөҙҙәре алһыуланды, кәйефтәре күтәрелде. Туҡмастары, борщтары, щилары ҙур киҫәкле ит менән, ҡуйы булһа, бутҡалары һөттә бешкән, оло киҫәк май һалынған, телеңде йоторлоҡ тәмле ине. Көн дә яңы ғына бешерелгән йылы икмәкте күпме теләһәң, шунса ашарға мөмкин, сикләү юҡ. Ауыл егеттәре өсөн ят булған әллә ниндәй гуляш, бифштекс, шницель, былау, клёцки, буберт, ит һәм балыҡ кәтлиттәре һәм башҡа "второйҙар"ы ла иҫ киткес татлы ине. Тиҙ арала биш-ун килоға артып киткән һалдаттарға йүгереү, башҡа төрлө күнекмәләрҙе үтәү ауырлаша башланы. Рәсми документтарҙа "Мотострелковый полк" тип аталһа ла, ысынында хәрби разведка ғәскәрендә хеҙмәт итеүсе һалдаттар, әлбиттә, күп ваҡыттарын төп шөғөлдәре - разведка оҫталығына өйрәнде, шул уҡ ваҡытта күнекмәләрҙе лә ҡалдырманы. 7 класс белеме менән, аҙаҡтан тракторсыға уҡып алғансы, бер-ике йыл көтөү көткән, мал артынан тиҫтәләрсә саҡрымдар үткән Мир физик яҡтан сыныҡҡан, етеҙ егет ине. Уға барыһы ла еңел бирелде, һәр төр күнекмәләрҙә беренселәр рәтенән төшмәне. Немец телен дә мәктәптә яҡшы уҡығайны, Әлкәләге "учебкала" ла ныҡ өйрәткәйнеләр, бында иһә ябай аралашыу һөйләшенән тыш, һөнәри терминдар буйынса ла талап ныҡ ҡаты ҡуйылды. Телгә тыуымыштан әүәҫлеге булғандырмы, бер ауыҙ урыҫса белмәгән Мир әрмелә тиҙ арала урыҫса ла, немецса ла һупаларға өйрәнде, уны һәр ваҡыт башҡаларға өлгө итеп ҡуя башланылар. Әлкәләге урыҫ "дедтар" ҙа йәһәт өйрәнеүгә булышлыҡ иткәйне шул: уларҙың әйткәнен аңламай, аңшайып торғандарға йыш ҡына туҡмағы ла эләкте, иҙән йыуыу, бәҙрәф таҙартыу, оло-оло бактарҙы тултырып, бәләкәс кенә картуф әрсеү сей елкәләренә тейгән "молодойҙар" үҙҙәре лә һиҙмәҫтән был яфаларҙан ҡотолоу юлының бары үҙҙәренән, үҙҙәренең телде яҡшы белеүенән, бар яҡтан да алдынғы булыуҙарынан ғына тороуын тиҙ төшөндө һәм тырышты. Командирҙар тарафынан маҡтала башлағас, уларҙың ҡурсыуын тойғас, һәр яҡтан өлгөлө булғас, "дедтар" ҙа уларға бәйләнер йөй тапмай башланы, үҙҙәренә тиң итеп ҡуймағанда ла, мөнәсәбәттәре һәйбәтләнде. Шул арауыҡта Мирҙың да абруйы үҫте, матур почеркы, һүрәтте килештереп төшөрөүе билдәле булғас, йыш ҡына штабҡа саҡыртып, айырым эш тә ҡуштылар, стена гәзиттәре сығарттылар.

Германияға оҫҡанда байтаҡ иптәштәре һымаҡ уҡ Мир ҙа үҙен ысын һалдат итеп тойҙо. Ҡыҙыҡһыныу барыһының да күңелен ҡытыҡланы: нисек унда, фашистар ерендәге йәшәү? Уның ғына түгел, һалдаттарҙың яртыһынан күбеһенең атаһын һәләк иткән ҡәһәрле һуғышты башлаусылар илендә халыҡ ниндәй? Һаман да фашистарса этлек уйлаусылармы? Ҡанһыҙмы? Йөҙгә-йөҙ тап килһәләр, уларҙың күҙҙәренә нисек ҡарар совет һалдаты? Илдә саҡта төп бурыс уҡыу, немецса өйрәнеү, разведка өсөн кәрәкле булған азимутты, картаны белеү, кодтар менән эш итеү, радио һәм радиотехник элемтәне өйрәнеү, килгән мәғлүмәтте эшкәртеү һәм артабан тәғәйенләнеше буйынса ебәрергә өйрәнеү булһа, һалдаттар тап шуның өҫтөндә генә эшләп, тырышып, башҡа әйбер тураһында уйламаһа, Германияға килгәндә һәм килеп урынлашып, хеҙмәт итеү башланғас, йөрәктәрендәге ялҡын икенсе төҫ алды. Атайһыҙ үҫкән быуын фашистарға, дөрөҫөрәге, немец халҡына, бөтмәҫ нәфрәт йөрөткән егеттәрҙең ни уйлауы билдәле: атай өсөн үс алырға! Эйе, ныҡ тылҡынылар уларға: немец халҡы фашист түгел! Уларҙың бына тигән ижадсылары - Бах, Бетховен, Моцарт, Гейне, Гете һ.б. - бар. "Һәр дәүерҙең үҙенә күрә була сволочы-ҡәһәр һуҡҡыры!" тип яҙған Һаҙи Таҡташты ла беләләр. Әммә шул немец халҡынан килеп сыҡҡан Гитлерҙы ла онотмайҙар! Етемлек, аслыҡ, юҡсыллыҡ, түгелгән күҙ йәштәре, әсәйҙәренең ваҡытһыҙ ҡартайыуы йә алдан үлеме өсөн үс ҡайнай ине уларҙың йөрәгендә. Һуғыш тамамланыуға ни бары 12 йыл үткән! Күҙ йәштәре кипмәгән, әсәйҙәре ирен, өләсәйҙәре улын, үҙҙәре атайҙарын йә ағайҙарын һуғыштан ҡайтыуын көтөүҙән өмөтөн өҙмәгән ине әле ул саҡта. Уларҙы 4-5 йәшендә генә атайһыҙ иткән фашистарҙың берәүһен булһа ла юҡ итеү менән яныусылар бихисап ине. Уларҙың һөйләшеүҙәре, нисек үс алырға хыялланыуҙары башҡаларҙың да йөрәгендәге быҫҡып ятҡан нәфрәт хисен дөрләтеп ебәрҙе. Быҡаса тыныс, етди, аҙ һүҙле, баҫалҡы Мир ҙа бер мәл ошо тойғоға бирелеп, үс алыу уйы менән йәшәп алды... Әгәр бер хәл булмаһа, ул тойғо уны яңылыш аҙымға, үс алыуға ла килтергән булыр ине, бәлки. Урыҫ мәҡәлендәгесә, "Бәхетһеҙлек булмаһа бәхет тә булмаҫ ине" тигән кеүек, бер бәхетһеҙ осраҡ уны был халәтенән ҡотҡарҙы ла инде...

Уларҙың гарнизоны урынлашҡан Шверин тигән ҡаланың тирә-яғы урманлы, һаҙлыҡлы, бик күп быуалары, күлдәре менән билдәле. Һәйбәт тәмле ашауҙан һалдаттарҙың артыҡ кәүҙә ауырлығы барлыҡҡа килеүе тураһында алдараҡ әйтә биреп ҡуйғайныҡ инде. Шул арҡала физик күнекмәләрҙән түбән күрһәткестәр күренә башлағас, командирҙары ротаны теҙеп ҡуйып, ныҡ ҡына әрләп ташланы, ике аҙна эсендә иң яҡшы күрһәткес булырға тейеш, тигән талап ҡуйҙы. Мир хеҙмәт иткән отделениеға ла ныҡ ҡына эләкте ул көндө. Бөтә күнекмәләрҙә лә ал бирмәгән Мирға ике һалдатты күнектереү бурысы ҡуйылды. Шунан башланды көнө буйы йүгереүҙәр, турникта атылыуҙар, отжимание, подтягиваниелар. Һалдаттарҙы ла ҡыуҙы, үҙе лә ныҡлы шөғөлләнде Мир. Уның да елкәһе ҡалынайып, 63 кило ауырлығы 80-гә яҡынлап барған мәл ине. Башҡаларҙан алдын булһа ла, ныҡ көсәнергә кәрәклеген үҙе һиҙенә ине егет. Ныҡлап керештеләр физподготовкаға.

Гарнизон өс яҡтан сәнскеле тимер менән уратып алынһа, оло юл яғынан ике метрлыҡ бейек ҡоймалар менән кәртәләнгән. Унда нимә барлығы һалдаттарға күренмәй. Ә һалдаттар һәр нәмәне белергә теләй, нимә тыйылған - шул татлы, рөхсәт ителгәненең ҡыҙығы юҡ. Шуға күрә бейек ҡойманың бер-ике тимер таҡтаһын аҫтан һурып, кеше һыйып сығырлыҡ юл әтмәләп алдылар. Сығып йөрөүгә йөрөмәйҙәр, әммә асып, ҡала яғындағы тормошто күҙәтергә яраталар. Юл аша ғына урынлашҡан матур, тәрбиәле паркты ҡарайҙар, ағастан ағасҡа, кешенән һис ҡурҡмай, һикерәнләп йөрөгән тейендәргә, шеш ҡолаҡ ҡуяндарға, һимеҙ йомрандарға, хатта һирәкләп күренеп ҡалған алҡа-ҡолаҡсынлы һеләүһендәргә, оҙон мөгөҙлө, һомғол кәүҙәле гүзәл илектәргә, һарғылт-һоро төҫтәге, арҡалары көрән буй һыҙыҡлы матур әләнйәктәргә һоҡланып иҫтәре китә. Ҡайһы саҡта бер аҙға йәшеренеп тишектән сығып килеү, парктағы алма-грушаларҙы ҡапҡылау һалдаттарға мәрәкә өсөн генә. Ҡайҙалыр ҡасып китеү, рөхсәтһеҙ юғалыу улар өсөн түгел: ныҡлап иҫкәртелгән, бойороҡ менән нығытылған, самоволка өсөн ҡаты яза барлығы ҡандарына һеңдерелгән. Ике һалдат менән физподготовкаға йүнәлгән Мир Зиннәтуллин замполиттан паркка сығып йүгерергә рөхсәт һораны. Башҡаларҙың да унда сығып шөғөлләнгәндәрен күргәне бар ине Мирҙың. Әллә кәйефе яҡшы булдымы, әллә бар яҡтан да өлгөлө сержантҡа ышаныусы ныҡ инеме, бер сәғәттән кире ҡайтыу шарты менән замполит сығырға рөхсәт итте. Өсәүләп паркка барҙылар. Парк ныҡ ҙур, уны әйләп урап сығыу өсөн ярты көнөң дә етмәҫ. Алыҫ китмәй генә бер аҙ йүгергәс, Мир ситтәрәк үҫкән емеш ҡыуағын күреп ҡалды. Туҡталып, бер аҙ ял иткәс, егеттәрҙең үҙҙәрен генә йүгерергә ебәреп, емеш менән һыйланырға уйланы. Ике һалдат кемуҙарҙан йүгереп китте, Мир ҡуйы күкһел ят емеште саҡ ҡына тешләп, тәмләп ҡараны. Шул ҡәҙәр татлы, ауыҙҙа иреп кенә тора ине уныһы. Урыҫтарҙың ежевика тигәне булдымы, икенсеһеме - Мир белмәне, ләззәтләнеп ашарға тотондо. Бик күп тә ваҡыт үтмәне, ҡатын-ҡыҙҙың сырылдаған тауышы ҡолағын сыйып үтте.

- Bitte! helfen Sie! Ich bitte Gott!

Мир тауыш килгән яҡҡа ынтылды. Ярҙам һорап ҡыҫҡырыу дауам итте. Әсе тауыш бер туҡтауһыҙ ҡабатланды:

- Зинһар өсөн! Ярҙам итегеҙ Теймәгеҙ миңә! Аллаһ хаҡына! Ҡотҡарығыҙ!

Алла хаҡы менән ярҙам һорап ҡыҫҡырыусының тауышы килгән яҡҡа һынаулы ғына минутта йүгереп барып етте ул. Бүре йә эт өйөрө ташланған, йылан саҡҡан, соҡорға ҡолап төшкән йә ҡыр йөнлегенә ҡуйылған тоҙаҡҡа баҫҡан, электр линияһына эләгеп, токтан һуғылған - нимә генә тигән уй йәшен тиҙлеге менән үтеп китмәһен уның башынан, күҙенә күренгәненә ышана алманы. Уның йүгерергә киткән ике һалдаты йәп-йәш ҡыҙ баланы ергә һалып, көсләргә маташа ине! Ярым шәрә ҡыҙ үлән өҫтөндә тыпырсына, ыштаны һыпырылған, арты ялтырап бер һалдат ҡыҙҙың өҫтөнә ятмаҡ итә, икенсеһе ҡыҙҙың ҡулдарын ҡармап тотоп, баш осона эйелгән. Нисек барып етеп, икеһен ике яҡҡа осора һуҡҡанын да иҫләмәй ҡалды Зиннәтуллин. Ярһыуҙан аңы томаланып, күҙҙәренә ҡан һауғайны уның. Көтөлмәгән ҡалдән аптырап ҡалған хеҙмәттәштәре аңына килгәнсе, Мир ҡыҙҙы тартып торғоҙоп, ситкә этәрҙе:

- Кит! Бар кит! Ҡайт өйөңә! Тиҙ бул!

Ҡыҙҙың итәк-еңен йыйып, туҙыраған сәстәрен һирпеп, артҡа сигенеүен күргәс, ҡапыл иҫенә төшөп, ҡаты итеп екерҙе:

- Бер кемгә лә әйтмә! Бында ни булғанын онот! Берәйһенә әйтһәң, уларға ла, һиңә лә көн бөтәсәк!

Ҡыҙ артына ҡарай-ҡарай күҙҙән юғалғас, Мир ҡан һауған күҙҙәрен ике иптәшенә төбәне:

- Йә! Аңлатығыҙ! Был ни хәл! Һеҙ нимә, хайуанға әйләндегеҙме? Бының өсөн һеҙгә нимә була? Военный трибунал! Төрмә! Төрмә генә түгел, расстрел!

Һалдаттар тәүҙә аңшайышты, йәһәт кенә өҫ-башын рәткә килтерҙе. Сержанттың ҡысҡырып бөтөүенә улар инде үҙ халәттәренә ҡайтты, йөҙҙәренә ҡаты сырай инде.

- Аҡырма! - тине береһе. - Улар беҙҙекеләрҙе йәлләгәнме? Һин атайлы үҫтеңме? Беҙҙең атайҙарҙы улар нисек язалаған! Оноттоңмо?

Икенсеһенә лә иптәшенең был һүҙҙәре ҡыйыулыҡ өҫтәне:

- Мин белорус! Минең әсәйемде улар күмәкләп этләгән. Унан дар ағасына аҫып ҡуйғандар. Мин быны үҙ күҙем менән күрҙем. Һиңә нимә, бер нимес кәнтәйе йәлме?

- Үс! Үс алырға ирек бир, сержант!

Ҙур кәүҙәле, көслө сержант йәнә иптәштәренең әпәй шүрлегенә менеп төштө. Эстәренә һеңгәҙәткәнсе тондорҙо. Саҡ тындарын рәтләп, үлән өҫтөнә сүгәләгән һалдаттарҙы тартып торғоҙҙо ла, көтмәгәндә яурындарынан ҡосоп, үҙенә тартты.

- Минең дә атай ятып ҡалды. Мин дә әҙ иламаным. Мин дә нәфрәт менән янам. Ләкин... Былай эшләргә хаҡыбыҙ юҡ! Беҙ бит фашизмды еңгән бөйөк Совет һалдаты! Беҙҙең эшебеҙ, намыҫыбыҙ, выжданыбыҙ улай эшләргә ҡушмай! Партия ни тиер?

**(Дауамы. Башы 45-се һанда).**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ЙЫҺАН КИҢЛЕГЕН...

## асып күрһәтә

**Билдәле шағирә, драматург, тәржемәсе һәм журналист Лилиә Һаҡмар студент йылдарынан әүҙем ижад итте һәм ошоға тиклем ижадтан айырылғаны юҡ. Әҙибә төрлө темаға берҙәй еңел яҙа, ниндәй эшкә тотонһа ла аҙағына тиклем алып барып еткерә. Үҙенең шиғриәте аша уҡыусыға кеше күңеле менән ҡуша Йыһан киңлеген дә асып күрһәтеүгә өлгәшә һәм уҡыусыһын юғарылыҡҡа әйҙәй. Шул уҡ ваҡытта Лилиәнең ватансылыҡ хисе ижадының алтын ебе булып һуҙыла. Шуғалыр ҙа, тыуған ергә булған һөйөүе йыр булып та башҡаларҙың йөрәгенә үтеп инә. Лилиә Һаҡмарға - өс һорау.**



**➔ Беҙ бала саҡта әкиәт донъяһына сумып, бәхетле була торғайныҡ. Һин ошо тылсымлы донъяға әйләнеп ҡайтып, бик матур осрашыуҙар үткәрҙең. Дәрес бирҙең. Хәҙер үҙең өсөн алған һабаҡты ла белге килә.**

- Ысынлап та, беҙ бала саҡта башҡорт халыҡ әкиәттәрен тыңлап үҫтек. Ғаиләлә алты бала. Элек ҡунаҡҡа саҡырышыуҙар күп була ине. Ҡунаҡтар кискә йыйылһа, тиҙ генә ҡараңғы төшә, урамда уйнап йөрөп булмай. Барыбыҙ ҙа өйҙә булһаҡ, бәләкәй ауыл өйөндә урын тарая бит инде. Шул саҡта ялан кәртәлә, бесән кәбәненә арҡа терәп көтә торғайныҡ ҡунаҡтар таралышҡанын... Бына шулай ултырабыҙ ҙа, олораҡтар беҙгә сиратлап әкиәттәр һөйләй. Әллә ҡайҙағы серле илдәргә осоп китәбеҙ ҙә, ундағы дейеүҙәрҙе еңеп, иң сибәр ҡыҙҙы ҡотҡарабыҙ... Ғүмер үтә килә шул әкиәттәрҙе үҙемдең улыма ла һөйләнем. Бына шулай быуындан-быуынға күсә килгән дә инде халыҡ ижады. Ә 2020 йылдың көҙөндә мин йәнә әкиәт иленә сумдым.

Көтөлмәгәндә килеп сыҡты ул. Өфө районы Михайловка ауылындағы Балалар ижады йортонда республика кимәлендә "Йәш яҙыусы һәм шағирҙар клубы" эшләп килә. Мине, яҙыусы булараҡ, шул Клубтың бер проектында ҡатнашырға саҡырҙылар. Улар йыл һайын "Лукоморье" тигән әкиәттәр яҙыу конкурсы ойошторалар. Башҡорт телендә лә яҙмалар ҡабул ителә. Бер проектта башҡорт һәм рус телендә әкиәт яҙырға өйрәнеү буйынса махсус курс асыу ҡаралған булған. Балаларға ярҙам итеү тигәндә бер ҡасан да ҡаршы булмай торғайным. Шуға риза булдым да ҡуйҙым.

Мин курсты "Әкиәт яҙырға өйрәнәм" тип атаным. Интернет аша йәнле һөйләшеү формаһында 2021 йылдың йәйенә тиклем барҙы был дәрестәр. Интернетта башҡортса мәғлүмәттәр бөтөнләй юҡ кимәлендә. Курстың планын да, йөкмәткеһен дә үҙемә яҙырға тура килде. Әллә күпме китап, әкиәт, төрлө мәғлүмәтте уҡып, үҙенә кәрәкле, балалар өсөн аңлайышлы һөйләмдәрен генә алырға кәрәк. Йәнә хәҙерге заман балалары ниндәй образдарҙы ярата, шуны аңлайым. Киләсәкте уйлап, борсола башлайым, сөнки бәләкәй саҡтан гел смартфон йә телевизорҙан көнбайыш идеологияһын сағылдырған кино, йәнһүрәттәр ҡарап үҫкән мәктәп уҡыусыларының уйында күберәк һуғыш йә ҡыйралыш, үлтереш кенә һымаҡ. Уларҙы нисек образлы фекер итергә өйрәтергә, кешелектең рухи ҡиммәттәрен аңлатырға, тип баш ватаһың. Бына шул булғандыр ижад йәһәтенән алған дәрестәрем.

Ә шулай ҙа күпкә өйрәндем. Интернет ҡырында башҡортса был темаға материалдарҙы әҙме-күпме байыттым, тимәк, башҡорт теле үҫешенә булышлыҡ иттем, тип уйлайым. Интернетта ни тиклем күберәк башҡортса аралашһаҡ, донъя сиктәрендә беҙҙе шул тиклем күберәк кеше таныясаҡ һәм башҡорт милләте тере, үҫешә икәнен beләсәк.

**➔ Һинең күңелең тулы моң. Музыка ҡоралдарында ла уйнайһың. Музыка, йыр-моң сәнғәтен һайламауыңа үкенмәйһеңме?**

- Эйе шул. Хатта үҙем дә ҡай саҡ "Ниңә бик күп һәләт биргән икән Хоҙай?" тип аптырайым. Белгәс ни, барыһын да тәмләп ҡарағы килә, ә ғүмер бер генә, тәүлегемдә минең дә 24 сәғәт кенә! Әле ныҡлап әҙәби ижадҡа тотонғас, яратҡан мандолинам "ял" итә. Хатта йырларға ла онотоп барам. Өлгөрөп булмай. Хатта бер заман интернетта "Мандолина уйнарға өйрәтеү" дәрестәрен башларға ла уйлап ҡуйғайным. Туҡтап торҙом.

Ысынлап та, бәләкәйҙән нотаҙы өйрәтһәләр, бәлки, йырсы йә музыкант булып китер инем. Әммә шулай ҙа әҙәби ижадты һәм журналистиканы һайлауыма һис тә үкенмәйем. Журналистика төрлө-төрлө яҙмыштар менән танышырға, ҡыҙыҡлы темалар табырға ярҙам итә. Ә ижад итеүҙең иң ҙур ләззәте - әҫәрҙәренде уҡып, ниндәйҙер фәһем алып ҡыуанған кешеләрҙең рәхмәтле һүҙҙәрен ишетеү! Тимәк, бушҡа яҙмағанһың.

**➔ Бөгөнгө йылдар бейеклегенән алып ҡарағанда, ижадыңда ниндәй теманы үҙеңдеке итеп күрәһең?**

- Әллә ниңә шул темалар тураһында бер ҙә уйланғаным булманы. "Ниндәйерәк тормош күренеше, йәки кешеләрҙәге ниндәй сифаттарҙы яҙыу оҡшай?" тигән һорауҙы әҙерәк аңлайым һымаҡ. Мин тормоштағы күренештәр, хәл-ваҡиғаларҙың шундайҙарын һайлайым: улар кешенең холҡон, илебеҙҙе, еребеҙҙе матурларлыҡ, беҙ хыял иткән тыныс, ирекле, маҡсатлы киләсәккә әйҙәрлек булһын! Ә кешеләрҙең холоҡ-фиғелендәге сифаттарға килгәндә: үҙен генә түгел, башҡаларҙы ла ҡайғыртыусы, һәр уйы, эше менән кешелеклек ҡанундарына ярашлы ҡоролған киләсәккә ынтылыусы, маҡсатлы итеп күрһәткем килә ыңғай геройҙарымды.

Йәнә, мин ижадымда эскерһеҙ хистәр, бар кәртәләрҙе емерерлек көскә эйә ысын мөхәббәтте, тормошонда әҙәм күтәрә алмаҫлыҡ ауырлыҡтар тыуһа ла, башҡаларға бәлә һалмаған, кешелеклек сифаттарын юғалтмай, шул ауырлыҡты еңеп сыҡҡан кешеләргә һоҡланыуымды яҙам. Сатирик, юмористик шиғырҙарым көнсөлдәр, әпкәләйҙәр, ярҙам итәм тип ярҙан этеүселәр, кешеләрҙе һәләтенә ҡарап түгел, кейеменә, дәрәжәһенә йәки "аҡса муҡсаһы"на ҡарап мөнәсәбәт ҡороусылар һәм үҙенең бер ҡатлылығы арҡаһында ҡыҙыҡ хәлгә тарыусылар тураһында. Ә ниндәй әҫәремдә ниндәй темалар сағыла, уның әһәмиәте ниҙә икәнен әйтеүҙе әҙәбиәт тәнҡитселәренә ҡалдырам.

Был шиғырҙарҙың ғына темаһы тураһында булды, ахыры. Ә уйлаһаң, әллә күпме теманы асҡанмын икән проза әҫәрҙәремдә. Хикәйәләрҙе алайыҡ. Ил, дәүләт ҡоролошо, "халыҡ" тигән дөйөм исем эсендәге бәләкәй генә кешенең уйҙары ("Хөкүмәт ағай", "Һимеҙлектән ҡотолоу сараһы"), "бәхет" төшөнсәһенең асылы, кеше булып ҡалыу өсөн ҡылған фиҙаҡәрлек ("Бәхетле ҡатын", "Бумеранг ҡануны", "Етешмәгән"), үҙеңдең барлығыңды һәм башҡалар кеүек йәшәүеңде белгертеү ("Буйҙаҡ мөлкәте", "Ҡыҙҙар ҡыҙылға ҡыҙыға"), башҡаларға аңлайышһыҙ күренгән холоҡ-фиғелендә юмор аша аңлатыу ("Ҡәһәр һуҡмай торған йән", "Дарыуҙар юҡ", "Мәйет хәтирәләре") кеүек темалар.

Поэмалар һәм эпик шиғырҙар. Улар эскерһеҙ мөхәббәт һәм уның йәшәүе өсөн ҡылған ҡаһарманлыҡ ("Йондоҙ ҡыҙы", "44 йондоҙ һәм 27 диңгеҙ"), башҡорт халҡының моңға тулы күңелен данлау, башҡорт халыҡ йырҙарының эске йөкмәткеһен аңлатыу ("Башҡорт йыры - тере шишмә"), кешелек ҡиммәттәренең сифатын асыу, ер һәм кеше уйҙары араһындағы бәйләнеш ("Ҡара һәм аҡ араһында", "Миҙән"), әсә булыуҙың Ер йөҙөндә кешелекте һаҡлауға тиң икәнен аңлатыу ("Ҡар өҫтөндәге сабый"), ерҙәге һәр тере йәнде ҡәҙерләү ("Боланҡай") темаларын аса.

Драма әҫәрҙәре. Башҡорт халҡын башҡа халыҡтар алдында танытҡан, уның данын күтәргән шәхестәрҙе данлау, уларҙың эске кисереш, уйҙары, холоҡ-фиғелен асҡан, үҙ ерендә, илендә данлау темаһы күтәрелә уларҙа ("Балапан"- С.Юлаевтың үҫмер осоро, "Аҡ елән"- Р.Нуриевтың үҫмер осоро). Ил етәкселәренең вайымһыҙлығы арҡаһында бөтөүгә дусар кескәй ауылдарҙы тергеҙеү юлдарын асыу ("Марс 500 йәки Марста тормош бармы?"), бик күп аралашыу сараһы булһа ла кешеләрҙең бер-береһенән алыҫайыуы ("Боҙоҡ телефон"), бергә йәшәү мөмкин булмаһа ла, күңелдәрҙә мәңге йәшәгән мөхәббәт ("Йондоҙло күпер", "Ысыҡтағы ҡояш") темалары.

Былар барыһы ла әҫәрҙәремдең йөкмәткеһен асыу ғына булды шикелле. Башҡа төрлө әйтә белмәйем. Рәхмәт!

**Һорауҙарҙы**
**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**бирҙе.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# АТА-БАБАМЫ, АТАЙ-БАБАЙМЫ?

**Беҙҙең башҡорт телендә "ата-баба" тигән бик боронғо һәм тәрән мәғәнәле һүҙ бар. Ошо бик тә боронғо был һүҙҙең мәғәнәһен аңламау арҡаһында хәҙерге башҡорт теле күҙлегенән сығып уны боҙа башланылар һәм ҡайһы бер журналистарыбыҙ "атайҙар-бабайҙар" йәки "атай-бабай" тип яҙа башланы. Былай тип яҙыу, тураһын ғына әйткәндә, төптө мәғәнәһеҙлек, тип атарға кәрәк.**

"Ата-баба" тигән һүҙҙең мәғәнәһен урыҫ теле аша "главные предки" тип аңларға кәрәк. Бер ниндәй ҙә "атай"ҙар һәм "бабай"ҙар, тип сиратлап һанау юҡ был һүҙбәйләнештә. Әгәр улай булһа, башҡорт "бабалар һәм атайҙар" тип әйтер ине. Сөнки ваҡыт арауығында ҡарағанда сират буйынса тәүҙә "баба" (предок), шунан ғына "атай" (отец) килә. Бер нисек тә атай тәүҙә була алмай. Атайҙан баба тыумай, киреһенсә, атайҙар бабайҙарҙың балаһы икәнен генә аңларға тейешбеҙ. Аңларға тейешбеҙ ҙә, тик белем етмәү арҡаһындамы, әллә белемле булып ҡыланып, халыҡты шаҡ ҡатырырға теләүҙәнме - туҙға яҙмаған, мәғәнәһеҙ нәмәләр уйлап сығарабыҙ. Атайҙар-бабайҙар шундайҙар рәтенән тип әйтергә кәрәк.

Егерменсе быуат башында Ғосманлы империяһы тарҡала башлап, төрөк иле донъяла ҡалырмы-юҡмы, тигән сетерекле хәл килеп тыуғас, власты үҙ ҡулына алып, Төрөк дәүләтен һаҡлап ҡалып, уны алға табан әйҙәп етәкләгән ил башлығы Мостафа Кемалды төрөктәр Ата төрк тиҙәр. Был һүҙҙе ҡайһы бер журналистар урыҫ теленә "отец турков" тип тәржемә итә. Ата төрк тигәнде беҙ иң төп, исеме, даны сыҡҡан төрөк тип аңларға тейешбеҙ. Төрөктәр ҙә шул уҡ төрки телле халыҡтарҙың донъяһына ҡарай һәм шулай булғас, Ата төрк тигәндә беҙҙең башҡорт телендәге мәғәнәне күрергә тейешбеҙ.

Мәҫәлән, башҡорттар исеме билдәле, даны сыҡҡан балыҡсы тураһында "ата балыҡсы", йәки тирә-яҡта даны сыҡҡан һунарсыны "ата һунарсы", тиҙәр. Әгәр беҙ баяғы телде белмәгән ҡайһы бер журналистарҙың артынан эйәрһәк, ата һунарсы һүҙен һунарсының атаһы, ә ата балыҡсыны балыҡсының атаһы, тип аңларға тейеш булабыҙ бит.

Минең таныштарым араһында хатта "ата ялҡау" тип даны сыҡҡан берәү бар. Уны мин артыҡ ялҡау тип әйтмәҫ инем. Тик ул танышым бер ҡасан дәүләткә эшләмәне. Артыҡ күп нәмәгә өмөт итмәйенсә, бары менән хушһынып йәшәй ул. Тамаҡ туйҙырырға йәки берәй кейем-һалым алырға аҡса кәрәк булһа, әҙ-мәҙ эшләп ала ла, тағы өйөндә ята. Ауылдаштары уға, көлөп, ата ялҡау, тигән ҡушамат таҡҡан. Танышымдың был ҡушаматҡа бер ҙә иҫе китмәй. Берәүгә лә мәшәҡәт тыуҙырмайынса, яйлап ҡына үҙ яйына йәшәй бирә.

Уғрылыҡта даны сығып, "ата ҡараҡ" ҡушаматы йөрөткән танышым да булды. Тик ул хәҙер мәрхүм инде. Үҙе мәрхүм булһа ла балаларына ҡушаматын ҡалдырып китте һәм матур ғына эшләп йөрөһә лә, улына ҡайһы берәүҙәр ҡараҡ тоҡомо тип әйтеп ҡуялар.

Шулай итеп, ата-баба тигәнде беҙ иң төп баба, урыҫса әйткәндә, главный предок тигән мәғәнәлә ҡулланғанбыҙ. Әле лә шул мәғәнәлә йөрөй был һүҙ, тик үҙ туған телен, уның тарихын һанға һуҡмау арҡаһында ғына ҡайһы берәүҙәр был һүҙҙе боҙоп, атай-бабайҙар тип яҙырға маташа. Әйҙә, телебеҙҙе боҙоуға юл ҡуймайыҡ, уны һаҡлайыҡ. Беҙ һаҡламаһаҡ, уны берәү ҙә һаҡламаҫ. Туған телебеҙ бит тик беҙгә генә кәрәк, ул тик беҙгә генә хеҙмәт итә.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘ БЕР МИНУТ КӨЛ,

## йә спорт менән шөғөлләнә

■ Белгестәр раҫлауынса, бер минут көләү бер сәғәт спорт менән шөғөлләнеүгә тиң. Был ваҡытта яурын, күкрәк, ҡорһаҡ мускулдарына көсөргәнеш төшә, шуға көлөүҙән матур булһын, тиһәгеҙ, йышыраҡ көлөгөҙ. Көләү йөрәк өйәнәгенән дә һаҡлай икән. Табиптар белдереүенсә, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланыусы кешеләрҙең 40 проценты ошо уҡ йәштәге һау кешеләргә ҡарағанда аҙыраҡ йылмайған һәм көлгән. "Беҙ көләү йөрәктә нисек һаҡлай икәнен белмәйбеҙ, әммә нервы-психик көсөргәнеш ҡан тамырҙарын нормала тотоусы эндотелийҙың боҙолоуы менән бәйле икәнен яҡшы аңлайбыҙ. Нервылар ҡаҡшауы һәм пессимизм организмда май йыйылыуға, артерияларға холестерин ултырыуға, ә улар үҙ сиратында йөрәк өйәнәгенә килтерә", - ти белгестәр.

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары эксперттары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-өндә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарарланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Ғалимдар йөрәк ауырыуы булған 608 кешене тикшереп, омега-3 майлы кислоталары кешене ҡартайыуҙан һаҡлауын билдәләгән. Бындай кислоталар йөрәк өйәнәгенән һуң тиҙерәк һауығыу мөмкинлеге бирә, ҡартая барған һайын хәтер насарайыуын акрынайта, күҙ ауырыуҙарын булдырмай. Майлы кислоталарға бай рацион әсәк яман шеше сире барлыҡҡа килеүҙе 40 процентҡа кәметә. Бындай йәшлек эликсирын һәр магазинда ла һатып алып була. Америка ғалимдары фекеренсә, һөмбаш, макрель һәм сардина балыҡтары майлы кислоталарға бай. Шулай уҡ йылҡы ите, ҡаҙылыҡ кеүек милли аштарыбыҙ ҙа организм өсөн бик файҙалы был майлы кислоталарға бай.

■ Кешенең тәбиғәте менән оптимист булыуын АҠШ-тың Канзас штаты университеты асыҡлаған. Был тикшеренеүҙә донъяның 140 илендә йәшәүсе халыҡ ҡатнаша. Яуап биреүселәрҙең 95 проценты тик ыңғай ваҡиғалар көтөп йәшәй һәм был, ғалимдар фекеренсә, "универсаль оптимизм теорияһы"н тағы ла бер раҫлай. Был теория буйынса, һәр кеше алдағы көндәргә ышаныс менән ҡарай.

■ Күңел һалып эшләнгән эш иң негатив факторҙы - хроник стресты булдырмай икән. Быны 2600 кеше ҡатнашлығында үткән тикшеренеүҙәр күрһәткән. Техас штаты ғалимдары фекеренсә, етмәһә, ижади ҡарашлы кешеләр, ҡағиҙә булараҡ, яҡшыраҡ йоҡлай һәм дөрөҫөрәк туҡлана. Аҡыл талап ителгән, ҡатмарлы мәсьәләләр хәл итергә тура килгән һөнәр эйәләре ауыр физик йөкһө уйлау талап ителмәгән эрҙә эшләүселәргә ҡарағанда үҙҙәрен йәшерәк тоя, уларҙың һаулығы ла нығыраҡ була.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# АҒАЙҘАРЫМ

Йәшәйештә бер ҡандан яралмаған, әммә йәндәре, күңелдәре берекләндәр, уй-хыялдары тап килгәндәр була. Яҡын күргән, үҙ иткән, иң терәгән ике ағайым булды. Рауил Бикбаев һәм Зиннур Йәрмөхәмәтов. Икеһе лә милләтебеҙ ғорурлығы, дәүер шәхестәре, ҙур кешеләр. Уҙамандар, ил ағаһы иҡәнлектәре минең өсөн оло ҡыуаныс ине, мәгәр уларҙы иң әүәл күңел тартҡан кеше, яҡын ағайҙар буларак ҡабул иттем. Һис ҡасан бөйөклөктәренән бейеклек, юғары, танылған абруйҙарынан үҙемә файҙа, ҡулай мәлдә арттарына йәшенерлек ышыҡ эҙләмәнем.

Бер көн бик һуң ғына шағирә Лариса Абдуллина шылтыратты. Декабрь айында үтәсәк съезд тураһында һүҙ сыҡҡас, ул һорай ҡуйҙы:

- Рауил ағайға ҡаршы ойошторолған съезды хәтерләйһегеҙме?

- Хәтерләмәгән ҡайҙа!

- Ул саҡта мин йәш кенә шағирә инем. Бәхәсле, ҡырҡыу мәлдә һеҙ ирҙәргә хас ҡылыҡ күрһәткәйнегеҙ...

- Әлләсе, - тип ҡуйыу менән генә сикләндем, - күп йылдар элек булып үткән ығы-зығы бит ул, бөтәһе лә хәтерҙә ҡалмаған.

Ирҙәрсә ҡылыҡ еңел бирелмәй, сәстәрҙе ағарта һуңынан, маңлайға һырҙар өҫтәй, хатта ҡайһылыр кимәлдә ҡартайта ла.

Эйе, съезд бик болалы башланды: кемеһелер шыш та быш килеп, идара рәйесенә ҡаршы һөйләшеүҙәр алып бара, бәғзе берәү ишек төбөндә ағайҙың шәхесенә ҡара яҡҡан китапсығын таратып маташа. Йыйын башланғас, Рауил Бикбай трибуна артына баҫты. Йөҙөндә тамсы ла тулҡынланыу әҫәре күренмәй, үҙен ышанысл һәм ҡыйыу тота. Уның иң китмәле юғары ораторлыҡ һәләтен белә инем. Был юлы ла идараның эшенә, дөйөм яҙыусылар ижадына, тулайым әҙәбиәт донъяһына шул тиклем дә ентекле ҡылыҡһырлама яһаны, ошо сығышы менән ул үҙенең аҡыллы, бөтмөр етәксе, оҫта ойоштороусы, киң даирәле әҙәбиәтсе икәнен тағы ла бер тапҡыр иҫбатланы, раҫланы, әнәп еткермәүселәрҙе, үҙ ҡаҙандарында ҡайнаусыларҙы оло майҙанға сығып еңде. Бындай тәрән эстәлекле, киң йүнәлешле, төптән уйланылған сығышты Рауил ағайҙан һуң башҡаса ишеткәнем булманы, бәлки, киләсәктә ишетмәм дә, сөнки заманалар үҙгәрә, көнитмештәге әҙәмсә мөнәсәбәттәр ваҡлана, ваҡлана һәм таплана. Мостай ағайҙың "Быуат" шиғыры бар бит әле:

*Күрәм - бушҡа әйләнә Ер шары,*
*Бер урында ҡояш тапана,*
*Сәғәт тә юҡ, йыл да, ваҡыт та юҡ.*
*Ваҡытһыҙлыҡ итә тантана,*
*Ваҡытһыҙлыҡ ҡоло иманһыҙлыҡ,*
*Ҡара дегет сәпәй ҡапҡаға...*

Тап шул шиғырҙағы ише йәшәйбеҙ бөгөн...

Йылы урын, юғары эш хаҡын ҡалдырып, барыһын күтәреп һуғып, Сибай ҡалаһына күсеп килгәс, "Ирәндек" лицейында эшләй башланым. Бер көн кемдәндер эш урынымдың телефон номерын һорап табып алған Рауил Бикбай шылтырата:

- Гөлназ Ҡотоева Өфөгә күсә, Хәйҙәр, һинә ҡабул итеп алып, иртәгә үк яҙыусылар ойошмаһында эш башларға кәрәк! Яҙыусылар берлеге идараһында һөйләшеү булып алды. Бөтәһенең дә уйы тап килеп, һиндә туҡталдыҡ!

- Эшләп йөрөйөм бит әле, уҡыу йылы башланғас, дәрестәремде ташлап китәйемме тағы?

- Бик һәйбәт, ике урында ла эшләрһең!



Шулай итеп, ике урында, дөрөҫөрәге, өс урында эшләй башланым: иртә таңдан лицейға йүгерәм, төштән һуң яҙыусылар ойошмаһына, кис етһә, педучилищела әҙәби түңәрәк үткәрәм, шунан ярты төн ауғансы дәрес пландары төҙөйөм...

Ул осорҙа яҙыусылар ойошмаһы гөрләп эшләп торҙо, ойоштороу эштәре, үткәрелгән саралар йәһәтенән Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһынан ғына ҡалыша инек шикелле. Яҙыусылар ойошмалары бик йылы шарттарҙа ихлас аралашып йәшәнек, йыйылышып алып, Яңауылға, Учалыға, унан ҡалһа Стәрлетамаҡҡа сығып китәбеҙ, үҙем дә саҡырып алам. Өҫтәүенә, ай һайын тиерлек Өфөнән яҙыусылар, шағирҙар төркөмтөркөм булып килеп төшәләр, уҡыу йорттарында, мәҙәниәт усаҡтарында әҙәби осрашыуҙар үткәрәләр. Уларҙы ла бит тейешенсә ҡабул итеп, һыйлап, йоҡлатып, оҙатып ҡалырға кәрәк. Өлгөрҙөм һәммәһенә. Яҙыусылар ойошмаһында эшләгән осорҙа Сибай, Хәйбулла, Йылайыр уҡыусыларының ижадын берлергә туплаған алты китап сығарҙыҡ. Ана шул йыйынтыҡтарҙы оло булөктәй күреп ҡабул итә ине Рауил Бикбай, ҡабул итә лә билдәле яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың китаптары ҡуйылған шкафҡа йәнәш итеп урынлаштыра.

Рауил ағай үҙе лә Сибайға килергә ашҡынып торҙо. Килгән һайын институтҡа барырға яратты, уҡыу йортоноң алдына ҡуйылған әҙиптәрҙең аҡ һындары алдында бик оҙаҡ баҫып торор ине. "Бына бит, тәртип, тәрбиә тупһанан башлана, бындай уҡыу йорттары Башҡортостанда ғына түгел, тотош Рәсәйҙә юҡтыр әле!" тип, бик йыш ҡабатлай ине ул. Килгән һайын "Башҡортостан бында башлана" шиғырын уҡымайынса ҡалмай. Ошо шиғырын уҡып, ул Башҡортостандың ҡайҙан башланғанлығына нескә ишара яһай ине шикелле...

...Ике ағайым - Рауил Бикбаев, Зиннур Йәрмөхәмәтов игеҙ, ҡуш рухташ булдылар, бер-береһен үтә яҡын күрҙеләр. Осрашһалар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй торғайны. Ары әйтерем Зиннур Йәрмөхәмәтов хаҡында.

Сибай ҡалаһына күсеп килгәс, эштән ҡайтышлай аҙыҡ-түлек магазинына һуғылдым. Апаруҡ һына оҙон сират. Минән ике-өс кеше алда Зиннур Ғөбәйҙулла улы баҫҡан. Абайлап ҡалғас, эргәмә килде, күреште. Прилавка артында буяҡтарҙан ғына хасил йәш мосолман ҡыҙы һатыу итә. Сираты еткәс, ағай башҡортсалап һаулыҡ һорашты ла теләген әйтте:

- Ҡыҙым, миңә эремсек кәрәк ине!

Һатыусы ҡыҙарынып-бүртенеп юғалып ҡалды:

- Извините пожалуйста, Зиннур Губайдуллович, к сожалению такого продукта у нас нет!

- Һау булығыҙ, улайһа, эремсек эҙләп икенсе һатыу нөктәһенә инергә тура килер!

Ҡыҙый күҙҙәрен шаҡмаҡландырып, минән һорай һалды:

- Что за продукт - эремсек!

- Үҙ телеңде белергә кәрәк, һылыуым, эремсек урыҫса творог була!

Ҡыҙ сығырға йүнәлгән Зиннур ағайҙың артынан йүгерҙе:

- Вернитесь, пожалуйста, Зиннур Губайдуллович, у нас эремсек есть, иң тәмле эремсек только у нас!

Кире ҡайырылманы ағай, тура баҫып сығып китте. Ошо һөйләшеүе, ошо ҡылығы менән туған телен белмәгән маңҡортҡа һабаҡ бирҙе, ғүмерлек һабаҡ.

Иртәгеһен дәрес барышында мәктәп секретары класс ишеген шаҡыны:

- Сегодня Вас к себе вызывает директор института Ярмухаметов!

Бына һиңә - мә, ошоға саҡлы бер тапҡыр осрашҡаныбыҙ ҙа, һөйләшкәнебеҙ ҙә юҡ ине ләһә. Бары уның Сибайҙа бик билдәле кеше булыуын ғына белә инем. Комбинатта, райком хоҙуҡтары менән ҡулланған партойошмала партком секретары булып эшләгән, шунан оҙаҡ йылдар ҡала менән етәкселек иткән мәлендә уны республиканың Премьер-министры вазифаһына саҡырһалар ҙа ул баш тартҡан, әле Урал аръяғындағы берҙән-бер институттың директоры. Ниңәгә кәрәктем икән уға?

Билдәләнгән ваҡытта киттем. Алдан иҫкәрткәндәр, ҡабул итеү бүлмә--һенән тотҡарлыҡһыҙ үткәрҙеләр. Директорҙың кабинеты ҙур. Үтә лә ҙур. Ҡиммәтле йыһаздар зауыҡ менән урынлаштырылған. Хужаның ултырған урыны түрҙә, ҡалҡыу ерҙә. Ағай минең инеүемде күргәс, тәхетенән төштө лә йылмайып килеп күреште:

- Бында килгәнеңде ишеткәйнем, нишләп улайтып ҡасып-боҫоп йөрөйһөң, саҡ эҙләп таптым!

Ҡапма-ҡаршы ултырҙыҡ.

- Бөтәһе лә һәйбәт, Зиннур Ғөбәйҙуллович, тотош ғаиләм менән "Ирәндек" лицейына урынлаштыҡ, ҡатыным да шунда, малайым беренсе класҡа уҡырға төштө. Әлегә кеше тупһаһында йәшәп ятабыҙ әле.

- Иң мөһиме, эш тапҡанһығыҙ бит, баш осоңа ҡыйыҡты һуңғараҡ йүнләрһең, үҙе ҡыҙ, үҙе быуаҙ булмай, бөтәһе лә яйлап яйға һалына!

Көлөп ебәрҙек, баштағы көсөргәнешлек ҡул менән һыпырып алғандай юҡҡа сыҡты. Ағай күрше бүлмәлә әҙерләнгән сәй табынына саҡырҙы. Ошо ерҙә шуны өҫтәп әйтер инем, ағай менән бик күп тапҡырҙар табындаш булырға тура килде, сәйҙәр эстек, ҡымыҙҙан ауыҙ иттек, тик ул миңә бер тапҡыр ҙа иҫерткес эсемлектәр тәҡдим итмәне, үҙе лә ул нәмәгә битараф ине. Спорт менән шөғөлләнгән, волейбол, өҫтәл теннисы уй-

наған, саңғыла шыуған, даими бассейнда йөҙгән, үҙен һәр саҡ тейешле кимәлдә тотоп, физик яҡтан сыныҡҡан кеше ине ул.

Ошо осрашыуҙан һуң ағай мине йыш ҡына үҙе эргәһенә саҡыра башланы:

- Инеп сыҡ әле, һөйләшеп-кәңәшләшеп алаһы бар!

Әңгәмә мәлендә һис ҡасан туранан бәреп һорамай, ниндәй ҙә булһа хәлваҡиғаны һөйләй ҙә ошо күренешкә минең шәхси ҡарашымды белешә. Шунан үҙенең фекерен әйткәс, хушлашырға ҡулын һона:

- Бына, һөйләштек-кәңәшләштек тә!

Бер көн яныма институттың уҡытыусыһы килеп инде. Нишләптер, өнәп, ҡабул итеп еткермәй инем уны. Тегеләр кабинетыма инде лә ҡыуанған кешеләй хәбәрен һалды:

- Институтта мәшхәр, тикшереү бара, кассаларҙы мисәтләгәндәр, иҫәп-хисапты яптҡандар, кемдең эшелер...

- Эшелер, тимәгеҙ, этлеге, тип тә өҫтәгеҙ. Ғәфү итегеҙ, бөгөн беҙҙең гәзит көнө, аҫтыртын эштәрегеҙҙә уңыштар теләмәйем, шулай ҙа һау йөрөгөҙ, ҡулығыҙҙан килмәгән хәлдә лә тирә-яғығыҙға сәләмәт рух таратырға тырышығыҙ, шулай һәйбәтерәк булыр, үҙегеҙгә лә, башҡаларға ла... - Әҙәпле генә итеп саҡырылмаған ҡунаҡты ҡыуып сығарҙым.

Төштән һуң ағайҙың өйөнә ҡарай китеп барғанда бер төркөм кешеләр тороуын күрҙем, араларында мин ҡабул итмәгән теге кеше лә бар. Уның талағы ташып торған мәле булғандыр, күрәһең, шәйләп алыу менән минең тарафҡа һөнәрләй итеп һуҡ бармағын сәнсте:

- Ана, Йәрмөхәмәтовтың эйәрсәне китеп бара!

Ошо хаҡта ағайға әйттем, ул былай тине:

- Әгәр һинең артыңдан төкөрөп ҡалғандар икән, тимәк, һин дөрөҫ йүнәлештә бараһың!

Уларҙың ишек алдындағы беседкала бер килке һүҙһеҙ сукайыштыҡ. Һиңйәт ағай күҙҙәремә тура ҡараны:

- Ошо килеп тыуған хәл хаҡында ни әйтерһең?

- Эт өрөп торор!

- Минең ғәйепһеҙ икәнемә ышанаһыңмы?

- Әгәр ышанмаһам, әлеге мәлдә һеҙгә килмәгән булыр инем!

Эйе, һуңғы сиктә ул үҙенең ғәйепһеҙлеген суд аша иҫбат итте, әммә ошо ваҡиғанан һуң ағай бирешкәндәй итте, эсенә йомолдо, аҙ һүҙлегә әүерелде, хатта ошоға яҡын күргән ҡайһы берәүҙәргә ышанысын да юғалтты шикелле. Бер мәл иләҫләнеп Сибайынан китергә йыйына башланы. Тағы һөйләшеп алтырабыҙ.

- Йә, ҡустым, һинең ҡуҙаллауың нисек?

- Күрәҙәсе түгелмен шул, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Николай Васильевич Гоголдең "Үле йәндәр" әҫәрендә ҡалаға килеп ингән рессорлы көймәне күреп ҡалып, бер ир эргәһендәгеһенә һорауын бирә: "Вишь ты, - сказал один другому, - вон какое колесо! Что ты думаешь, доедет то колесо, если б случилось, в Москву, или не доедет?" "Доедет",- отвечал другой. "А в Казань-то, я думаю, не доедет?" "В Казань не доедет", - отвечал другой. Этим разговор и закончился.

- Мин дә шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатлайым ул, тәгәрмәс һис һүҙһеҙ етер Мәскәүгә, ә бына кире Ҡаҙанға саҡлы сыҙамаҫ, моғайын, Өфө хаҡында әйтеп тә тормайым, - Зиннур Ғөбәйҙуллович күңелһеҙ йылмайҙы.

- Әллә тим, тәртәгеҙҙе Өфөгә ҡайырып, ҡамытығыҙҙы шунда һалаһығыҙмы?

- Юҡ, донъя күргем килә...

- Донъя гиҙеү әлегә килеп сыҡмаҫ бит әле, бынау тажлы киҙеү халыҡты йонсотто бигерәк, һаман да булһа өйҙәребеҙҙә бикләнеп ятабыҙ, күп кенә илдәр ҙә инер ҡапҡаларын япты. Тағы һеҙ тотош булмышығыҙ менән башҡорт уҙаманы, телһеҙ, мәҙәниәтһеҙ, әҙәбиәтһеҙ, ғөмүмән, халыҡтан айырылып, тегендә ни ҡылырһығыҙ? Булат Рафиҡовтың башҡорт ҡымыҙы хаҡында бик тәрән фекерле бер поэмаһы бар. Англия короле башҡорт ҡымыҙынан ауыҙ иткәс, уны үҙ илендә етештереү уйы менән япып китә лә бер өйөр бейәләр һатып ала. Ә тегендә ҡымыҙҙың бөтөнләй тәме юҡ икән. Уралдан үлән дә һатып алып, йылҡыларға ашатып маташа - һөҙөмтә бер үк. Баҡтиһәң, тик башҡорт далаһында ғына етештереп була икән ул ҡымыҙҙы! Ә Мәскәүҙә, билдәле, ҡымыҙ юҡ!

- Һәр ваҡыттағыса, аҡыллыға ишара, тигәндәй, кинәйәләп һөйләйһең. Улайһа, һеҙ беҙҙең китеүгә ҡаршы?

- Үҙегеҙ хәл итегеҙ, ағай, ә мин уйымдағын ғына еткерҙем.

- Беҙ ҙә һөйләшеп, шундай ҡарарға килдек, балаларға яҡын булғыбыҙ килә.

Барыбер Зиннур ағай күңелендәген аҙағынаса асманы, эсенә йәшерҙе... Тегендә барғас, көн һайын шылтырата башланы. Бер шылтыратыуында һауа торошон һораша. Икенсе шылтыратыуында үҙенең яңылыҡтарын еткерә: "Бөгөн балыҡҡа барҙым... Эргәлә генә күл. Унда ҡырағай өйрәктәр йөҙә. Көн һайын шуларҙы ашатам. Килеремдә көтөп торалар..." Көн һайын, хатта көнөнә ике тапҡыр башҡорт бейеүҙәре, йырҙары яҙылған видеоролик һала. Һағына ине тыуған яҡты Зиннур ағай, юҡһына ине Башҡортостанын, телен, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен. Урал арьяғының яңылыҡтарын белеп торһон, тип аҙна һайын "Атайсал" гәзитен ебәрәм. Ә ул шунда уҡ уҡый ҙа фекерен белдерә һала. Йә көтмәгәндә тәүлектең теләһә ниндәй мәлендә шылтырата ла берәйһенең хәлен һораша: "Шул кеше урамда күренәме ул? Беҙ уның менән волейбол уйнай торғайныҡ. Күҙенә салына-нитә ҡалһа, сәләмемде еткер!.." Тел менән әйтелмәгән, әммә йәнде, булмышты кимергән һары һағыш тигәндәре шулдыр, моғайын...

Тағы ла Зиннур ағайҙың бик тә һәйбәт бер ғәҙәте булды. Йыл һайын иртә таң менән шылтырата ла, тыуған көнөм менән ҡотлап, изге теләктәрен еткерә. Һис ҡасан ҡотламай ҡалмай, һис ҡасан онотмай. Ә бит үҙенең дә хәл ителмәгән мәсьәләләре булғандыр, бәлки, уны кәйеф төшөнкөлөгө лә урап үтмәгәндер, тормош бит, бер алдын күрһәтә, бер артын... Бер мине генә уңыштар менән ҡотламаны, башҡаларға ла матур теләктәрен, изге уйҙарын еткерергә ашыҡты. Шул рәүешле кешеләрҙе ҡайғыртып, кешеләрҙе хәстәрләп йәшәне. Ошо түгелме ни әҙәп, тәртип, рух, миһырбанлыҡ өлгөһө!

Һәм тағы. Ул алған миҙалдарын шаушырлатып тағып, күкрәк киреп алға ынтылманы, дан-шөһрәт тә эҙләмәне. Бер ингәнемдә ниндәйҙер ҡағыҙҙы асыу менән йыртҡыслап, сүп һауытына ырғытты ла миңә былай тине:

- Бына, заман китте, Хәйҙәр, ә, әҙәм балаһы оятын юғалтты! Миңә Ушинский миҙалын тәҡдим итеп хат ебәргәндәр! Тегеләр ҡуйған хаҡты бөгөн үк түләп ҡуйһам, тиҙҙән миҙалы ла килеп төшә. Хәтәр бит, ә! Шул һатып алған ҡалайҙы мин түшемә тағып йөрөргә тейешме, мәсхәрә!

Ағайға Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының "Ал да нур сәс халҡыңа!" миҙалын тапшырған мәлдә ысын күңелдән ҡыуандым, был баһаға һис шикһеҙ лайыҡ ине ағай, сөнки ул башҡорт халҡы өсөн күпме изге эштәр эшләне, хисаплап бөтөрлөк түгел! Әйткәндәй, миңә лә шундай уҡ миҙал тапшырҙылар. Уны ваҡыт-ваҡыт ҡулыма алам да, миҙалды кире ҡумтаһына һалып ҡуям. Ә бит күп осраҡта уны енелелпе эш күрһәткәндәр тағып йөрөй. Ул ғынамы, башҡа билдәләрҙең дә бәҫе бик төшөп китте. Күп осраҡта улар таныш-тоношлоҡ билдәһе. Ситләшеберәк булһа ла шуны ла әҫтәйем, бына нисә йыл инде яҙыусылар-шағирҙарға Салауат Юлаев премияны тапшырылғаны юҡ, ә бит милләт батыры иң әүәл шағир-импровизатор булған. Ошо юғары баһаға тиң яҙыусылар-шағирҙар юҡ тип уйлайһығыҙмы? Быны сәбәбе үтә ябай икән дәбаһа: премияны баһалап биреүсе комиссияла бер генә әҙәбиәтсе лә юҡ икән, шулай булғас, әҫәрҙәрҙе тәрәндән анализлай белеүсе кеше лә юҡ, кеше булмағас, эште баһалаусы ла юҡ, тимәк...

Хәҙер интернет заманы, бөтә хәбәр шунда. Уҡыйһың да хайран ҡалаһың ҡайһы саҡ, унда дөрөҫлөктән бигерәк уйҙырма етерлек. Башҡалар шуны уҡый һәм "лайыҡ" ҡуя. Ҡуй инде, кемдер вафат булған, бәғзе бер туң баш ошо кеше ҡайғыһына, фажиғәһенә "лайыҡ" мөһөрөн баҫа. Бер көн Башҡортостанда бик билдәле кеше былай тип яҙа: "Зиннур Йәрмөхәмәтовты белмәйем, күргән кешем дә түгел, аралашҡаным да булманы, бергә эшләмәнем дә, әммә яҙам..." Ары бысраҡлыҡ киткән... Белмәгән-күрмәгән кеше хаҡында яҙыу мөмкин эшме, иҫең китерлек! Тегенең битенә шәхсән уйҙарымды еткереп яуап яҙып ебәрҙем. Һуңынан Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров былай тип: "Хөйҙәр ағай, ундайҙарға шәхси яуап яҙып ҡына сикләнергә ярамай, мәлендә тотош йәмәғәтселеккә ишеттереп, ҡулдарына һуғырға кәрәк!.."

...Зиннур ағайҙың һуңғы видеошылтыратыуынан һуң бер көн үткәс, иртәгәһенә кис ҡайғылы хәбәр алдым. Нисек инде, һин дә мин тетә баҫып йөрөгән кеше кисә бар, бөгөн юҡ, быны булыуы мөмкин түгел! Институт директоры Илдар Сәлихйән улына шылтыраттым. Ул ағайҙың көтмәгәндә вафат булып ҡалыу хәбәрен дөрөҫләне...

Рәхмәт яуғырҙары, институт етәкселеге ҡала хакимиәте менән һөйләшеп, Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров менән кәңәшләшкәндән һуң, сентябрь аҙағында уның ҡәҙер һәм хәтер кисәһен үткәрергә булдылар. Бик юғары кимәлдә ойошторолған ине сара. Бик күп мәртәбәле ҡунаҡтар, туғандары килде. Институт бинаһы алдына уға арналған таҡтаташ ҡуйылды, аҙаҡтан фәнни-ғәмәли конференция үткәрелде. Шунда уҡ конкурсҡа йомғаҡ та яһап ҡуйҙыҡ. "Ашаған белмәй, тураған белә!" тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәрҙер, башынан аҙағына тиклем хәтер кисәһен матур итеп ойоштороусылар, үткәреүселәрҙең тырышлығы хаҡында әйтеп тә тормайым, шул кисәнең бөләкәй генә бер өлөшөн атҡарыуы ла еңелдән түгел, һәр нәмәһен теүәлләргә, уйлап-еренә еткерергә кәрәк. Шөкөр, иҡтисад фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған тәҙәүсеһе, Сибай ҡалаһының почетлы граждыны Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың рухы алдында күпмелер бурысты үтәп, ҡыуанып таралыштыҡ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рауил Бикбаев, Зиннур Йәрмөхәмәтов - милләтебеҙҙең аҡ ҡаялары, рухтарына һис ҡасан бысраҡ-әшәкелек йоҡмай, улар ваҡлыҡтарҙан юғары. Буй үрелеп етмәҫ юғары ла, шул уҡ ваҡытта халҡын милләтен өҙләкһеҙ ҡайғыртыусы ябай шәхестәр ҙә ине улар. Шул рәүешле беҙҙең хәтерҙә мәңге ҡалырҙар, һаҡланырҙар! Яҙмама "Ағайҙарым" тип атама бирҙем дә уйға ҡалдым. Улар бер минең генә ағайҙарым булдымы икән? Юҡтыр. Улар күптәр өсөн өлгө ине, эшһөйәрлек, ғәҙеллек, туған халҡына бирелгәнлек, милләтенә тоғролоҡ өлгөһө!**

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Нисек итеп тылсымыңды көсәйтергә?

Был һығымталар һеҙҙең башығыҙға тонналыҡ кирбес кеүек килеп төшәр. Мин һеҙҙең менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә ниәтләйем.

Әгәр һеҙ өндәге төш халәтенә тормошоғоҙҙо яҡшыртыуға йүнәлтелгән күрһәтмәләргә ярашлы инһәгеҙ, был бик һиҙелмәһә лә, рухи батшалыҡ менән таныштығыҙ ҙа инде. Әммә ысынлап та шундай тулыһынса үҙегеҙ лайыҡлы тормош рәхәтен күрер өсөн миңә һеҙгә туранан-тура һөжүм итергә тура киләсәк.

Тәүҙә Аллаһ аңлатмаһын ҡабул итегеҙ. Мин уның хаҡында аңлы рәүештә һүҙ йөрөтмәнем. Аллаһ - ул Ижадсы, шуға ла мин Ижадсы тураһында һүҙ алып барҙым. Әммә Ижадсы үҙен Аллаһ тип атауға һис тә ҡаршы түгел. Мин дә ҡаршы түгел. Шулай булһын да. Аллаһтың барлығын танып, һеҙ уның менән бәйләнеште камиллаштырағыҙ. Аллаһ - ул Ижадсы, Ижадсы - ул Аллаһ. Беҙ Атайыбыҙҙы уның исеменә ҡарамай, уны ҡитғаның теләһә ниндәй мөйөшөндә нисек атауҙарына ҡарамаҫтан, яратабыҙ.

Ошо планетала йәшәгән ваҡыттан нисек күберәк файҙа алырға? Кешелек планетаның мәңгелек хужаһы түгел. Ғәмәлдә, беҙ бында күптән түгел генә килгәнбеҙ. Әгәр Ер тарихы теүәл бер йыл дауам итеүен күҙ алдына килтерһәк, 1 ғинуар - уның барлыҡҡа килгән, 31 декабрь иһә бөгөнгө көн буласаҡ. Ошо йылдың мөһим этаптарын ҡараһаҡ, бында беренсе ябай бактерия февралдә барлыҡҡа килә, ә беренсе балыҡ - ноябрь һуңында. Динозаврҙар яҡынса 10 декабрҙә барлыҡҡа килә һәм 25-тәрендә планетанан юҡҡа сыға. Кеше тип аталған төүге йән эйәһе 31 декабрҙә тыуа. Ә беҙ белгән кешелек 15 минутҡа һуңыраҡ, 23 сәғәт 45 минутта барлыҡҡа килә.

Шулай итеп, беҙҙең ниндәйҙер милеккә хаҡыбыҙ бар, тип уйларға ярамай. Беҙ - был ҡунаҡханаының яңы ғына килеп йәшәй башлаусылары. Ҡанаттарҙы ҡағып, осорға һәм тотороҡло урын биләргә ваҡыт етте.

Планетаның күпселек кешеһе мейеһенең һул яҡ ярымшары менән генә файҙалана, әммә Ижадсы беҙгә уң яҡ ярымшарҙы юҡҡа ғына бирмәгән. Мейенең бер яҡлы ғына эшләүе бихисап проблемалар тыуҙырҙы ла инде. Беҙ үҙебеҙҙе, рухиәткә зыян килтереп, тик матди тормошҡа арнаныҡ. Ҡайһы берәребеҙ рухиәткә ял көндәрен генә бүлә, әммә дини биналарҙың тупһаһын аша атлап сығыу менән унда булған нәмәләрҙе онота.

Күптәребеҙ рухиәтһеҙлеккә һайлай һәм үҙен хәрби хәрәкәттәр театрына бағышлай, наркопритондарҙы, төрмәләрҙе, эшһеҙҙәр өсөн урындарҙы, дауаханаларҙы тултыра.

Әммә мейеһенең уң яҡ ярымшарын эшләтеүселәр ҡыуанысլыраҡ һәм бәхетлерәк йәшәү рәүешен һайлаған. Быға һеҙ үҙегеҙ ҙә миҫал була алаһығыҙ. Һөҙөмтәлә һеҙ был планетала булыуығыҙҙан ҙур файҙа алдығыҙ, фәрештәләр, күҙгә күренмәҫ терәк - Илаһ һағы аҫтында әкиәти сәйәхәткә юлланығыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



### 21 НОЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России-2022. Произвольная программа. Этап V. [0+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.00 Д/ф "Маршал советского кино". К 95-летию со дня рождения Михаила Ульянова. [12+]
12.45, 14.15, 17.15, 20.20, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. Памяти Сергея Пускепалиса. [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Баренцево море". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 07:00 до14:00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз).**
**14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 Финликбез. [12+]**
**18.00 История одного села. [12+]**
**18.20 Хоккей. "Барыс" (Астана) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**21.00 Спортивная история. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**23.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**1.45 Спектакль "Плачу вперед!". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

### 22 НОЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 17.15, 20.20, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Баренцево море". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Ете егет. [12+]**
**10.45 Специальный репортаж. [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**16.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**17.00 "Дорога к храму". [0+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**23.30 История одного села. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**1.45 Спектакль "Ночь, как вся жизнь". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

### 23 НОЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 17.15, 20.20, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Баренцево море". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 23.00 Автограф. [12+]**
**10.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**11.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00 Тормош. [12+]**
**17.00 "Это моя профессия". [12+]**
**17.45 "Орнамент". [6+]**
**18.00 Д/ф "Глубокие корни". [12+]**
**18.50 Хоккей. "Металлург" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**1.45 Спектакль "Суд матери". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 24 НОЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 17.15, 20.20, 23.45, 3.05 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20 Т/с "Баренцево море". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 2.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
3.00, 3.50 Т/с "Личное дело". [16+]
4.43 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Башкирские каникулы. [12+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**11.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**1.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**1.45 Спектакль "Кавардак Forever". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Дорога к храму". [0+]**

### 25 НОЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 17.15, 2.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
18.00 Вечерние новости.
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 ф а н т а с т и к а. Фин а л. [12+]
0.05 Д/ф "Баста. Моя игра". [16+]
1.20 Т/с "Судьба на выбор". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Дуэты. [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Непредвиденные обстоятельства". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [16+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00, 4.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.00 История одного села. [12+]**
**12.15, 15.45 Патриот РФ. [12+]**
**12.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**15.00 "Городок АЮЯ". [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**16.00, 6.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00, 5.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Автомобилист" (Екатеринбург). КХЛ.**
**21.15 История признания. [12+]**
**22.00 "Бай". [12+]**
**23.00, 4.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Колесо времени. [12+]**
**1.15 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**2.00 Спектакль "Моя семья". [12+]**

### 26 НОЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.40 Д/ф "Роковая любовь Саввы Морозова". [12+]
16.55 "Горячий лед". Гран-при России-2022. Фигурное катание. Короткая программа. Этап VI. Прямой эфир.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Снова вместе. Ледниковый период". [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.15 Х/ф Премьера. "Тень звезды". [12+]
0.55 Д/с "Великие династии". [12+]
1.50 "Моя родословная". [12+]
2.30 "Наедине со всеми". [16+]
3.15 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Доктор Мясников. [12+]
12.35 Т/с "Тайны следствия-21". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Столичная штучка". [12+]
0.50 Х/ф "Обучаю игре на гитаре". [16+]
3.50 Х/ф "Не покидай меня, Любовь". [12+]
5.31 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 "Это моя профессия". [12+]**
**9.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 "КультУра". [6+]**
**11.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 "Все песни мамам". Концерт. [12+]**
**19.00, 4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Специальный репортаж. [6+]**
**20.00 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00, 3.45 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 0.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**0.45 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**1.30 Спектакль "Подарок". [12+]**
**2.45, 6.00 Тормош. [12+]**
**3.15 Финликбез. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

### 27 НОЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.10, 6.10 Х/ф "Спортлото-82". [0+]
6.00, 10.00 Новости.
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.30 Х/ф "Женщины". [0+]
16.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России-2022. Произвольная программа. Этап VI. Прямой эфир.
17.50 Д/с "Романовы". [12+]
18.50 Д/ф Премьера. "Как убили Джона Кеннеди". [16+]
21.00 "Время".
22.35 "Что? Где? Когда?" Зимняя серия игр. [16+]
23.45 Д/ф "Безумные приключения Луи де Фюнеса". [12+]
1.35 "Моя родословная". [12+]
2.20 "Наедине со всеми". [16+]
3.05 Д/с "Россия от края до края". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.35, 2.30 Х/ф "Мама выходит замуж". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 16.00 Вести.
11.50 Х/ф "Дом, где сердце". [12+]
17.00, 19.00 Песни от всей души. [12+]
18.00 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя Птица".
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
4.15 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [0+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Новости (на рус. яз).**
**9.30 "Бай". [12+]**
**10.00 Концерт ко Дню матери. [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа". [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.**
**19.00, 3.45 "Честно говоря". [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**20.30 Патриот РФ. [12+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30, 3.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Спектакль "Шестая жена Ивана Грозного". [12+]**
**2.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**2.45 Историческая среда. [12+]**
**4.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ТӘРБИӘ - ИҢ ЯҠШЫ МИРАҪ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**44-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Өйрәк. Монолог. Алйырҙан. Диалог. Ишара. Таяҡ. Баҡара. Һары. Дьякон. Фа. Ҡарт. Ҡата. Игәт. Ғәмбәр. Ноҡот. Урама. Ашуғ. Ра. Йомош. Айыт. Алҡа.

**Вертикаль буйынса:** Ижадхана. Ағасъяңаҡ. Афродита. Мышы. Шандау. Рота. Йондоҙ. Туғай. Һаҡ. Оҫта. Нукта. Алым. Киото. Ойоҡ. До. Бынағайыш. Ҡомар. Лама. Галантерея.

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 ноябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+

**26 ноябрь Премьера! "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 18.00 12+

**27 ноябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль драма. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 ноябрь "У ковчега в восемь"** (У. Хуб), ғаилә өсөн спектакль. 12.00 6+

**23 ноябрь "Цирк на поляне"** (М. Непряхин), әкиәт. 12.00 0+

**25 ноябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 11.00 6+

**"Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 16+

**26 ноябрь "Волшебная мельница"** (М. Кәрим), әкиәт. 12.00 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 ноябрь "Фортепианная поэма"**. 6+

**26 ноябрь "В ожидании чуда",** буласаҡ әсәйҙәр өсөн концерт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**23 ноябрь "Йөрәк моңдары"** концерт. 6+

**25 ноябрь "Нисек кейәүгә сығырға?.."** (Н. Ғәйетбай), комедия. 12+

**27 ноябрь "В поисках волшебства"** (М. Хейфец), әкиәт. 12.00 0+

**"Караул! Атай өйләнә?!"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 18.00 12+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**21 ноябрь "С чего начинается Родина?"** әҙәби-музыкаль лекторий. 10.00, 13.00 6+

**23 ноябрь** БР-ҙың халыҡ артисы **Гөлшат Зыязетдинованың** юбилей кисәһе. 16+

**25 ноябрь "Йөрәк майым..."** (Б. Абдуразаков), мелодрама. 13.00, 19.00 16+

**26 ноябрь "Волшебная лампа Аладдина"** (Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**"Өҙөлгән өмөт"** (Н. Асанбаев) драмаһы менән **21 ноябрь** - Аҫҡар (Әбйәлил), **23 ноябрь** - Аҡъяр, **24 ноябрь** - Баймаҡта гастролдәр. 16+

**22, 23, 24 ноябрь "Шахтер"** (Б. Ҡаһарманова), драма. 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабиғел ахыр, Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ақшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (26) дүшәмбе | 7:30 | 9:00 | 13:30 | 15:15 | 17:02 | 18:32 |
| 22 (27) шишәмбе | 7:32 | 9:02 | 13:30 | 15:14 | 17:01 | 18:31 |
| 23 (28) шаршамбы | 7:33 | 9:03 | 13:30 | 15:13 | 17:00 | 18:30 |
| 24 (29) кесе йома | 7:35 | 9:05 | 13:30 | 15:12 | 16:58 | 18:28 |
| 25 (1) йома | 7:37 | 9:07 | 13:30 | 15:11 | 16:57 | 18:27 |
| 26 (2) шәмбе | 7:39 | 9:09 | 13:30 | 15:10 | 16:56 | 18:26 |
| 27 (3) йәкшәмбе | 7:41 | 9:11 | 13:30 | 15:09 | 16:55 | 18:25 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ИҪКӘРТЕҮ

## ИРТӘГӘНДЕ БӨГӨН УЙЛА



**Роспотребнадзор талпан энцефалитынан хәҙер ҙә прививка эшләтергә була, тип тәҡдим итә. Был бөжәктәрҙең иң ныҡ активлашыу мәлено организмда иммунитет барлыҡҡа килтерә.**

Беренсе һәм икенсе прививка араһы 1-7 ай булырға тейеш. Өсөнсө вакцина беренсеһенән һуң - бер йыл үткәс, ревакцинация өс йыл һайын эшләнә. Шулай уҡ ашығыс вакцинация ла бар, ул яҙғыһын һәм йәйгеһен, ике этапта яһала (беренсеһенән һуң ике аҙна үткәс - икенсеһе).

Республикала йыл һайын талпан энцефалитынан һөнәре буйынса хәүеф аҫтында булған 30 меңдән ашыу кеше прививка яһата, медицина учреждениеларына талпан ҡаҙалған 10 меңдән ашыу кеше мөрәжәғәт итә.

Төбәктә вируслы талпан энцефалиты һәм йоғошло талпан боррелиозы менән сирләүселәр һаны арта. Мәҫәлән, йылдың 9 айында талпан энцефалиты менән 28 осраҡ теркәлһә, талпан боррелиозы менән - 31. Сирләүселәр һаны күп йыллыҡ күрһәткестән 1,7 һәм 2,2 тапҡырға артып китә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Башҡортостанда коронавирустан вакцина яһатыу ҙа дауам итә: һуңғы тәүлектә уны 6 291 кеше эшләткән. Республикала бөтәһе 3 244 759 кеше тулыһынса (был 130,6 процентты тәшкил итә) вакцинация үткән, ә 945 054 кеше ҡабаттан вакцина яһатҡан. Улар араһында 975 850-һе - 60 йәштән өлкәнерәк граждандар, 10 430-ы - балалар.**

ОҪТАХАНА

# ЗАМАН ТАЛАБЫ "ЗАМАНДАШ"

**Хәҙерге заман театры һәм уның тамашасыһы ниндәй, йәки улар бер-береһенең һулышын тоямы? Нәҡ шул һорауға яуап эҙләнеләр ошо көндәрҙә Өфөлә үткәрелгән "Замандаш" театраль белем биреү майҙансығы сиктәрендә ойошторолған саралар барышында. Драматургия өлкәһендә яңы исемдәр асыуға, театр әһелдәре менән тығыҙ бәйләнештәр булдырырға ярҙам итеүгә һәм, әлбиттә, тәжрибә уртаҡлашыуға, ижади үҫеш йүнәлеше биреүгә ҡоролған был әһәмиәтле майҙансыҡ дүрт көн дауам итте.**



"Замандаш" майҙансығы Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Драматургия һәм режиссура үҙәге, М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры тарафынан ойошторолдо. Уның сиктәрендә үткән төп сараларҙың береһе - Заманса драматургия республика семинарына быйыл башҡорт, рус, татар телдәрендә ижад ителгән ҡырҡтан ашыу үҙенсәлекле пьеса һәм проза әҫәрҙәренең инсценировкалары тәҡдим ителгән. Ошо эштәр араһынан 13 пьеса һайлап алынып, уларҙы театр белгестәре тикшереп, йәш драматургтарға үҙ фекер-кәңәштәрен еткерҙе. Ә режиссерҙар был яҙма рәүешендәге әҫәрҙәргә "йән өрөп", өҙөктәрен сәхнәләштерҙе. Һәр эште ҡарағандан һуң философия фәндәре докторы, сәнғәт фәне кандидаты, профессор Галина Вербицкая, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты уҡытыусыһы Ирина Шәмсетдинова, драматург һәм сценарист Наталья Мошина әҫәрҙе ижад иткән драматургтың һәм режиссерҙың, сәхнәләштереүҙә ҡатнашҡан актерҙарҙың эшенә үҙ баһаһын бирҙе, тәьҫораттары һәм профессиональ кәңәштәре менән бүлеште.

Бына шундай һөҙөмтәле семинарҙың һуңғы көнөндә ҡатнашыу һәм дүрт авторҙың әҫәрҙәренән алынған өҙөктәрҙе ҡарау форсаты тейҙе беҙгә лә. Екатерина Тимофееваның "Полина ищет па" пьесаһы буйынса Туймазы дәүләт татар театрында Редик Ғәниев, Әнгизә Ишбулдинаның "Вот где ты северный юг" пьесаһы буйынса М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында Илшат Мөхөтдинов, Баныу Ҡаһарманованың "Яҙмыш математикаһы" буйынса Салауат дәүләт башҡорт драма театрында Лиана Ниғмәтуллина, Айбулат Сәсәнбаевтың "СуперБулат"ы буйынса Эльмир Хаертдинов "Нур" Өфө дәүләт татар театрында артистар менән эшләгән. Киләсәктә тулы спектакль булып үҫеп етеүе ихтимал әҫәрҙәрҙән күренештәр бик үҙенсәлекле, заманса, йәштәрсә килеп сыҡҡан. Ошо дүрт әҫәрҙең өсәүһендә ғаиләлә ҡатын-ҡыҙ арҡаланыр, балалар яратып "атай" тип атар ир-егеттәрҙең юҡлығы сағылдырылыуы бөгөнгө йәмғиәттебеҙҙәге хәлдәргә ишаралап, күптәрҙе уйға һалды. Екатерина Тимофееваның төп героиняһы - үҫмер ҡыҙ, ул атаһын бөтөнләй күргәне булмаған һәм уны эҙләп, күрше ҡалаға сығып китә. Ә Әнгизә Ишбулдина пьесаһындағы өҙөктән биш геройҙың береһе генә егет кеше һәм был ғаиләләге һәр ҡатын-ҡыҙҙың көслө зат менән мөнәсәбәттәр ҡороуҙа үҙ ҡыйынлыҡтары булыуын сағылдырҙы. Баныу Ҡаһарманованың пьесаһында ла балаларын яңғыҙы аяҡҡа баҫтырырға тырышып йәшәгән эшҡыуар әсәй образы. "Драматургия тормошто сағылдыра", - ти икән профессор Галина Вербицкая, тимәк, бына ниндәй бөгөн беҙҙең ысынбарлыҡ...

"Замандаш" майҙансығы сиктәрендә йәш драматургтар, республикабыҙ театрҙары хеҙмәткәрҙәре өсөн бик файҙалы оҫталыҡ дәрестәре үтте һәм билдәле театраль тәнҡитсе, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Татьяна Тихоновец лекциялар ҙа һөйләне. Ул үҫмерҙәр өсөн сәхнә әҫәрҙәре ижад итеү һәм Рәсәйҙең милли театрҙарының үткәне, киләсәге тураһында бик ҡыҙыҡлы телмәр тотто. Был махсус дәрестәр тураһында драматург Әнгизә Ишбулдина тәьҫораттары менән бүлешкәндә: "Үҫмерҙәр менән алып барған эшмәкәрлегемдең дөрөҫ йүнәлеш булыуына тағы ла нығыраҡ инандым", - тине.

- Замандаш" театраль белем биреү майҙансығы үҙе лә шундай оҙаҡ йылдар дауамында даими рәүештә алып барылған эштең бер сағылышы бит. "Замандаш"тың тамыры бик алыҫтарға, 1990 йылдарға барып тоташа. Белеүемсә, был осорҙа Яҙыусылар союзында йәш яҙыусылар конференциялары үткәрелә, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн драма әҫәрҙәре ижад итеүсе йәштәрҙең осрашыуҙары ойошторола. Азат Абдуллин, Фәрит Богданов, Нәжиб Асанбаевтар йәштәрҙе порукаға алып, улар яҙғандарҙы тикшереп, өйрәтә торғайны, - ти билдәле журналист, драматург Сәрүәр Сурина. - Ә инде 1992 йылда Наил Ғәйетбаев йәш драматургтар өсөн беренсе булып семинарҙар ойоштора башланы. Бөгөн барыбыҙға ла билдәле М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры ул ваҡытта Йәш тамашасылар театры тип аталып, Олег Ханов етәкселегендә балалар һәм йәштәр өсөн пьесалар яҙыусылар араһында конкурс уҙғарҙы. Унда "Камикадзе" пьесаһы менән Флорид Бүләков - Гран-при, "Һарысәс" өсөн Рәмил Ҡол-Дәүләт - беренсе, мин "Алтын балта" өсөн - икенсе, "Айыу бабай йоҡламай" пьесаһы өсөн Сафуан Әлибай өсөнсө урын алыуы хәтеремдә. Шулай уҡ бөтәбеҙгә лә билдәле "Талҡаҫ семинарҙары" ла йәштәр араһынан драматургтар эҙләү маҡсатында эшләне. Шунда белем алған йәштәр - Зиннур Сөләймәнов һәм Әлиә Яхина 2014 йылда Башҡортостандың Драматургия һәм режиссура үҙәген булдырҙы һәм Рәсәй кимәлендә эшләрлек йүнәлеш бирҙе. Бына шундай күптән нигеҙ һалынған эштең дауамы ул "Замандаш" белем биреү майҙансығы. Был эш бөгөн башланды тип әйтеп булмай, шуныһы бик шатлыҡлы. Ул эшмәкәрлеген һаман киңәйтә барып, ижади оҫтаханалар ҙа үткәрелә хәҙер. Был юлы ҡул осондағы әйберҙәрҙән реквизиттар, бутафория эшләргә өйрәттеләр. Драматург өсөн уныһы ла файҙалы, сөнки ҡуйып булмаҫлыҡ әйберҙәр яҙмаҫ өсөн сәхнә талабын, шарттарын белеү ҙә кәрәк...

Ғөмүмән, һәр ҡатнашыусы "Замандаш"тың әһәмиәтен юғары баһаланы. Билдәле журналист, әҫәрҙәре А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында ҡуйылған Баныу Ҡаһарманова ла нәҡ ошо семинарҙарҙың береһенән ҡанатланып ҡайтып ижад итеүен йәшермәй: "Замандаш" - этәргес көс", - тине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Замандаш" театраль белем биреү майҙансығына йомғаҡ яһалған кисәлә М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының баш режиссеры Айрат Абушахманов милли театрҙарҙың туған телдәрҙә ижад итеүсе драматургтарға ҡытлыҡ кисереүе тураһында әсенеп телгә алғайны. Башҡорт драматургияһының классиктарын ҡабат-ҡабат сәхнәләштереү генә етмәй, бөгөн тамашасы, бигерәк тә йәштәрҙе, ылыҡтырырлыҡ замандаштар тураһында заманса тамашалар кәрәк. Шуға "Замандаш" яңы исемдәр асып һәм халыҡ күңелен арбарлыҡ әҫәрҙәргә юл ярып, үҙенә нигеҙ һалған башланғыстарҙың эшен лайыҡлы дауам итһен!**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## КИТКӘН КЕШЕНЕ ТОТҠАРЛАМА, килеүсене ҡыума

Алтын тотҡан алтынды таныр, күрмәй күргән еҙҙе лә алтын тиер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, кеше аҡылы уның тормошон мәңгелек көрәшкә әйләндерә.

**(Сара Бернар).**

Хәҡиҡәткә юл көтөлмәгән боролоштар менән тулы.

**(Санскрит мәҡәле).**

Ысын дәрәжә йылға һымаҡ: ни тиклем тәрәнерәк булған һайын, тауышы аҡрыныраҡ сыға.

**(Мишель де Монтень).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер дин әһеле мәсеттән ҡайтышлай таныш йортҡа инеп, унда йәшәүселәрҙең хәл-әхүәлен белешеп сығырға була. Барып инһә, йорт хужаһы тубыҡланып доға ҡылып ултыра һәм сүрәләр урынына ниндәйҙер буталсыҡ һүҙҙәр һөйләй: "Әй, Хоҙайым, - тип мөрәжәғәт итә был кеше Аллаға, - Һиңә яҡындарға булышлыҡ ит. Һинең тәнең бысранғанда, мин Һине йыуындырырға вәғәҙә бирәм. Мин бик яҡшы итексе, һиңә итек теґеп бирермен. Һине берәү ҙә хәстәрләмәгәндә, мин Һинең эргәңдә булырмын. Ауырыһаң, Һиңә дарыу алып килермен, ҡарармын. Мин ашарға ла оҫта бешерәм..." Дин әһеле танышының был доғаларын Хоҙайҙы мыҫҡыл итеү һымаҡ ҡабул итә һәм уны бүлдереп, ҡысҡырып уҡ ебәрә: "Туҡтат был ахмаҡлығыңды! Нимә һөйләйһең һин? Хоҙайға нимәгә кәрәк һинең итегең? Һин нисек итеп Уны йыуындырмаҡсыһың? Ул һинең ашарға әҙерләүеңә мохтаж тип уйлайһыңмы? Кемдән өйрәндең бындай доғаларға?" Йорт хужаһы уңайһыҙланып ҡына былай ти: "Мин доға ҡылырға берәүҙән дә өйрәнмәнем. Мин бик наҙан һәм ярлы кешемен. Башҡа эштәрҙе нисек итеп үҙем белгәнсә башҡарһам, доғаларҙы ла үҙем белгәнсә генә ҡылам. Ғөмүмән, үҙемдең шәхси тәжрибәм минең доғаларыма әйләнде. Мине дөрөҫ итеп доға ҡылырға өйрәт улайһа, үтенеп һорайым..." Дин әһеле йорт хужаһын дөрөҫ итеп доға ҡылырға өйрәтә һәм уның ихлас рәхмәтенә лайыҡ була. Илай-илай оҙатып ҡала ул дин әһелен. Дин әһеле лә, изге эш эшләнем, тип бик ҡәнәғәт ҡала. Хоҙай күрәме, беләме, тигән һымаҡ, ҡараштарын күккә төбәһә, Хоҙайҙан шундай һүҙҙәр килә: "Һин ерҙәге кешеләрҙе миңә ебәрергә тейешһең, әммә һин әле генә минең яратҡан бер әҙәмемде минән алыҫлаштырҙың. Һинең был кешегә өйрәткән "дөрөҫ" доғаларың доға түгел, сөнки доғалар бер ниндәй ҡағиҙә буйынса ла ҡылынмай..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 22046

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
18 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1459